# УРЫҪСА – БАШҠОРТСА
# БАШҠОРТСА – УРЫҪСА
# УМАРТАСЫЛЫҠ
# ҺҮҘЛЕГЕ

# РУССКО – БАШКИРСКИЙ
# БАШКИРСКО – РУССКИЙ
# СЛОВАРЬ
# ПО ПЧЕЛОВОДСТВУ

Г. Д. Зайнуллина

# РУССКО – БАШКИРСКИЙ БАШКИРСКО – РУССКИЙ СЛОВАРЬ ПО ПЧЕЛОВОДСТВУ

*Утвержден Министерством народного образования Республики Башкортостан*

Уфа
«Китап»
2001

Г. Д. Зәйнуллина

# УРЫҪСА – БАШҠОРТСА БАШҠОРТСА – УРЫҪСА УМАРТАСЫЛЫҠ ҺҮҘЛЕГЕ

*Башҡортостан Республикаһы Халыҡ мәғарифы министрлығы тарафынан раҫланды*

Өфө
«Китап»
2001

УДК 638(03)
ББК 46.91 я 2
З–95

Рецензенттары:
Филология фәндәре докторы, профессор *Э. Ф. Ишбирҙин*
Филология фәндәре кандидаты *М. И. Дилмөхәмәтов*

**Зәйнуллина Г. Д.**

Урыҫса-башҡортса, башҡортса-урыҫса умартасылыҡ һүҙлеге. – Өфө: «Китап», 2001. – 160 бит.

З-95

ISBN 5-295-02 844-5

Уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән һүҙлек меңгә яҡын һүҙ һәм һүҙбәйләнеште эсенә ала. Терминдарҙың күбеһенә ҡыҫҡаса аңлатма бирелде.

Һүҙлек уҡыусылар, студенттар, тәржемәселәр өсөн ҡулланма булып тора. Башҡорт әҙәби теленең һүҙ байлығы менән ҡыҙыҡһыныусылар ҙа был һүҙлеккә битараф ҡалмаҫ.

ТП–52

**УДК 638(03)**
**ББК 46.91 я 2**

**ISBN 5-295-02 844-5**

© Г. Д. Зәйнуллина, 2001

*Силәбе өлкәһе Арғаяш районы*
*Мәтәл урта мәктәбенең*
*140 йыллығына бағышлайым*

# УМАРТАСЫЛЫҠ ТАРИХЫНАН

Бал ҡорто хаҡындағы тәүге мәғлүмәттәр бик боронғо дәүерҙәргә барып тоташа. Палеонтология белгестәре, бал ҡорто бынан 50 млн йыл элек барлыҡҡа килгән, тип раҫлай. Бынан 15 мең йыл элек төшөрөлгән ҡорт һүрәттәре бөгөнгө көнгә тиклем һаҡланып ҡалған[1].

Тарихи сығанаҡтарға ҡарағанда, боронғо Египетта күсмә умартасылыҡ ныҡ үҫешкән булған. Боронғо заманда Греция менән Римда балды тәңре тарафынан күктән төшөрөлгән илаһи ризыҡ тип иҫәпләгәндәр, шуға күрә уны кешенең аҡылын, зиһенен камиллаштырыусы, дәрт һәм илһам уятыусы сихри ниғмәт итеп ҡабул иткәндәр. Бал ҡортон изге йән эйәһе тип иҫәпләп, уның рәсемен мәмерйә таштарына, ҡаяларға, һауыт-һабаларға, ҡәбер таштарына сүкеп төшөрөр булғандар. Әүәлге заманда Египетта бал ҡорттары тоғролоҡ, ҡаһарманлыҡ символы булып һаналған, сөнки улар, ояларын дошмандан һаҡлағанда, үҙҙәрен һәр ваҡыт үлемесле алышҡа дусар иткән.

Балдың шифалығы күптәнге замандарҙан уҡ билдәле. Мәҫәлән, Гиппократ ауырыуҙарҙы бал менән дауалаған. Сәләмәтлекте һаҡлау, ғүмерҙе оҙайтыу өсөн уларға көн дә әҙләп бал ашарға тәҡдим иткән. Был кәңәште тотоусыларҙың байтағы ғүмер буйы яфалаған ауырыуҙарынан ҡотолған һәм йәшәү өсөн өҫтәмә көс-ҡеүәт алыр булған.

Боронғо Грецияның мәшһүр математигы Пифагор (беҙҙең эраға тиклем 580–500 йылдар) үҙенең оҙон ғүмерле булыуының сәбәбен даими рәүештә бал ашауҙа күргән. Йөҙ йылдан ашыу йәшәгән боронғо философ Демокрит (беҙҙең эраға тиклем 460–370 йылдар) сәләмәтлекте һаҡлау өсөн бал ашарға кәңәш иткән. Атаҡлы табип, тәбиғәт фәндәре белгесе, шағир Әбүғәлисина (980–1037 йылдар), йәшлегегеҙҙе һаҡларға

[1] ***Ноғманов Р., Ишемғолов Ә.*** Умартасылыҡ серҙәре. Өфө. 1997, 6-сы бит.

теләһәгеҙ, бал ашағыҙ, тигән. Ул бигерәк тә 45 йәштән уҙған кешеләргә балды даими рәүештә ҡулланырға кәңәш биргән.

Ғалимдарҙың иҫәпләүенсә, ер йөҙөндә 40–50 млн күс бал ҡорто йәшәй, шуларҙың 8 млн самаһы беҙҙең Рәсәйгә тура килә. Мәғлүм ки: һәр күс йылына уртаса 10 кг тауар балы бирә ала.

Ҡортсолоҡ беҙҙең ата-бабаларыбыҙҙың иң боронғо шөғөлө. Башҡорттарҙың әүәлдән килгән кәсебе булған солоҡсолоҡ хаҡында Көньяҡ Урал буйлап сәйәхәт иткән ғалимдарҙың юлъяҙмаларында бик күп мөһим мәғлүмәттәр һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, ғалим-географ Н. П. Рычков башҡорттарҙың ҡортсолоҡ кәсебен бик оҫта, яратып, күңел биреп башҡарыуҙары хаҡында шулай бәйән итә: «Был халыҡтың иң ҙур байлығы – бал ҡорто. Табышлы кәсепте улар шул тиклем оҫта һәм теүәл алып бара, ҡортсолоҡ буйынса уларға еткән бүтәнсә халыҡ юҡтыр, моғайын»[1].

«Башҡортостан – ҡорт аҫрау өсөн ифрат уңайлы төбәк, шуға күрә солоҡсолоҡ унда боронғо дәүерҙәрҙә үк сәскә атҡан», – тип билдәләй С. И. Руденко үҙенең хеҙмәттәрендә[2].

«Урал буйы башҡорттарында солоҡсолоҡ татар-монгол иҙеүенә тиклем, һунарсылыҡ кеүек үк, төп кәсеп булып хеҙмәт иткән», – тип фекер йөрөтә Р. Ғ. Кузеев[3].

Күренекле урыҫ ғалимы И. И. Лепехин беренселәрҙән булып башҡорттарҙың солоҡ яһау серҙәрен, солоҡ яһау ҡорамалдарын ентекләп тасуир итә. Ул Шүлгәнташ мәмерйәһе тәбиғәтен һүрәтләгәндә: «Был төбәктә бал ҡорто булмаған ҡарағайҙы табыуы ҡыйын», – тип яҙып ҡалдырған[4].

Академик П. С. Паллас Башҡортостандың гүзәл тәбиғәтен һүрәтләп, уның бал ҡорто үрсетеү өсөн ифрат ҡулайлы булыуы хаҡында яҙа; солоҡ яһай торған ҡорамалдарҙы, солоҡто айыуҙан һаҡлау ысулдарын һанап сыға[5].

Ысынлап та, Башҡортостандың йәйрәп ятҡан далалары, сәскәле яландары, данлыҡлы йүкә урмандары ҡорт аҫрау өсөн ифрат уңайлы. Рәсәйҙәге 1,5 млн гектар йүкә урманының нәҡ яртыһы беҙҙең респуб-

---

[1] *Рычков Н. П.* Журнал и дневные записки путешествия капитана Рычкова по разным провинциям Российского государства в 1769 и 1770 гг. СПб., 1770. С. 138–139.

[2] *Руденко С. И.* Башкиры. М.; Л.: Наука, 1955. С. 96.

[3] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. М.: Наука, 1974. С. 493.

[4] *Лепехин И. И.* Дневные записки путешествия доктора И. Лепехина по разным провинциям Российского государства в 1768–1769 гг. СПб., 1772. С. 68.

[5] *Паллас П. С.* Путешествие по различным местам Российского государства. СПб., 1770. Т. I. Ч. 2. С. 6–24.

ликаға тура килә. Һуңғы йылдарҙа беҙҙә ҡорт үрсетеүгә, ҡортсолоҡ продукттары етештереүгә һәм уны халыҡ хужалығының төрлө тармаҡтарында файҙаланыуға ҙур иғтибар бирелә башланы. Мәҫәлән, 1995 йылда «Умартасылыҡ тураһында закон» ҡабул ителде. Ҡанунға ярашлы рәүештә һәр кеше күпме теләй – шунса умарта тота ала. Беҙҙең республика Рәсәй ерлегендә беренсе тапҡыр умартасылар ярышы ойошторҙо. Августың һәр икенсе йәкшәмбеһе – умартасылар байрамы тип иғлан ителде. 2000 йылдан башлап Умартасылыҡ агентлығын республика бюджетына күсереү күҙ уңында тотола. Республика Умартасылыҡ агентлығы үҙ нәүбәтендә ҡортсолоҡто үҫтереү программаһын тормошҡа ашырыу буйынса бик ҙур эш алып бара. Яҡын киләсәктә, йәғни 2005 йылға тиклем, күстәр һаны 350 меңгә, бал – 4 мең тоннаға, балауыҙ етештереү 210 тоннаға еткерелергә тейеш.

Шулай итеп, умартасылыҡ ауыл хужалығының мөһим тармағына әйләнә бара. Умарталар һаны һәм бал алыу буйынса Рәсәй донъяла беренсе урында тора. Башҡорт балы иһә үҙенең сафлығы, тәме, хуш еҫе һәм шифалылығы менән донъя күләмендә юғары баһа алып, өс алтын миҙалға лайыҡ булды. Беренсе алтын миҙал 1900 йылда Бөтә донъя күргәҙмәһендә – Парижда, икенсе алтын миҙал 1961 йылда Халыҡ-ара күргәҙмәлә – Эрфуртта, өсөнсөһө иһә 1971 йылда умартасыларҙың Мәскәүҙә үткәрелгән XXIII халыҡ-ара конгресында бирелде. Башҡорт бал ҡорто ла лайыҡлы баһаланды, ул 1965 йылда Бухарестта үткән XX халыҡ-ара конгреста көмөш миҙал һәм диплом менән бүләкләнде.

Башҡорт солоҡ ҡорто – Рәсәй урта һыҙаты ҡортоноң урындағы тәбиғәт шарттарына яраҡлашҡан һәм хәҙерге көндә Бөрйән районында йәшәгән тоҡомо. Уны һаҡлау, үрсетеү эше менән Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының Ағиҙел филиалы шөғөлләнә. Ул 1986 йылда үҙ аллы «Шүлгәнташ» ҡурсаулығына әйләндерелде. Шуныһы ҡыуаныслы: «Шүлгәнташ» ҡурсаулығында «Байсалан» һәм «Шүлгәнташ» исемле ике умарталыҡ төп башҡорт ҡорттарының бөрйән популяцияһын һаҡлап ҡала алған. Шуға күрә улар тоҡомсолоҡто үҫтереү, һаҡлау, таратыу хоҡуғына эйә булған махсус статус алды.

II республика конкурсына бөрйәндәр яңылыҡ алып килде: күптән түгел Рәсәй ғалимдары беҙҙең ҡортсоларға инә ҡорттарҙы яһалма юл менән аталандырыу ысулын өйрәткәйне, шуға күрә уларға быйыл тоҡомсолоҡ эше алып барырға лицензия бирелде. Хәҙерге көндә бөрйәндәр аталанған ҡорттарҙы һәм инә ҡорт пакеттарын һатыу хоҡуғына эйә булды. Мәғлүм булыуынса, уларға ихтыяж

көндән-көн арта бара, хатта сит илдәр ҙә был мәсьәлә менән нык ҡыҙыҡһына башланы.

Шулай итеп, һуңғы йылдарҙа Башҡортостан умартасылығында сифат яғынан да, технология йәһәтенән дә ҡырҡа һынылыш күҙәтелә. Урта мәктәптәрҙә уҡытыу өсөн «Умартасылыҡ» курсына программа эшләнде. 1999 йылда Халыҡ мәғарифы министрлығы уны раҫланы һәм республика урта мәктәптәрендә уҡытыу өсөн тәҡдим итте.

## ҠОРТСОЛОҠ ЛЕКСИКАҺЫ ХАҠЫНДА БЕР НИСӘ ҺҮҘ

Мәғлүм булыуынса, халҡыбыҙ әүәлдән солоҡсолоҡ менән шөғөлләнгән, сөнки сәскәле туғайҙар, хуш еҫле йүкә урмандары ҡорт аҫрау өсөн бик тә уңайлы булған. Бер аҙ һүнеп ҡалған был боронғо кәсеп һуңғы йылдарҙа ҡабаттан аяҡҡа баҫтырылды һәм хөкүмәт тарафынан яҡлау тапты.

Ҡортсолоҡ халҡыбыҙҙың күптәнге шөғөлө булғанға күрә, телебеҙҙә был өлкәгә ҡараған бик күп һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр, әйтемдәр, мәҡәлдәр һаҡланып ҡалған. Аңлатмалы һүҙлеккә был һүҙҙәрҙең фәҡәт әҙәби варианттары ғына алынған, әммә тел ғилеме, тарих, этнография фәндәре өсөн уларҙың барыһы ла мөһим, улар тарихи мәғлүмәт, ғилми сығанаҡ булараҡ әһәмиәтле.

Күҙәтеүҙәргә ҡарағанда, ҡортсолоҡҡа ҡараған һәр бер нәмәнең үҙ атамаһы бар, әммә уларҙың байтағы һирәк ҡулланылғанлыҡтан иҫкергән һүҙҙәр рәтенә инә һәм әкренләп онотола бара. Йыш ҡына ҡортсолоҡҡа ҡараған атамаларҙы тик һөйләштәрҙә осратырға, йә булмаһа өлкән йәштәге солоҡсоларҙан ғына ишетергә тура килә. Шуға күрә ошо байлыҡты һаҡлап алып ҡалыу беҙҙең оло бурыс булырға тейеш.

Башҡорт тел ғилемендә ҡортсолоҡ лексикаһына арналған хеҙмәттәр бик аҙ. Шулар иҫәбенә Н. Х. Мәҡсүтованың «Бөрйән һөйләше» исемле мәҡәләһен индерергә була[1]. Автор был хеҙмәтендә бал ҡортонон һөйләштәге атамаларын, солоҡ ҡорамалдарын һанап биргән. «Дим башҡорттары һөйләшенең ҡайһы бер үҙенсәлектәре» исемле мәҡәләһендә У. М. Яруллина ҡортсолоҡҡа ҡараған терминдар

---

[1] *Максютова Н. Х.* Бурзянский говор // Башкирская диалектология. Уфа, 1963. С. 115.

исемлеген тәкдим иткән[1]. Ҡортсолоҡ лексикаһына Ж. Ғ. Кейекбаевтың «Башҡорт теле лексикаһы һәм фразеологияһы» дәреслегендә байтаҡ урын бирелгән[2]. Ләкин был хеҙмәттәрҙә мәҡәлә авторҙары ҡортсолоҡ атамаларын фәҡәт һанап китеү менән генә сикләнгәндәр: лингвистик анализ яһалмаған, номинация принциптары тикшерелмәгән.

1987 йылда СССР Фәндәр академияһының Тел ғилеме институты аспиранты Зәйнуллина Л. М. ҡортсолоҡ атамаларына арналған ғилми хеҙмәтендә был өлкәгә ҡараған һүҙҙәрҙе төрлө яҡлап тикшергән, уны системаға һалған, әҙәби һәм диалект варианттарын билдәләгән, уларҙың формалашыу һәм яһалыу ысулдарына туҡталған[3]. Ғөмүмән, ҡортсолоҡ лексикаһы тикшеренеүсе тарафынан мотивация күҙлегенән сығып өйрәнелгән. Авторҙың фекеренсә, был тематик төркөмгә ингән һүҙҙәргә атама биргәндә, иң беренсе булып нәмәнең төп үҙенсәлеге, сифаты, тышҡы күренеше, башҡарған функцияһы һәм тышҡы мөхиткә булған мөнәсәбәте иҫәпкә алынған. Мәҫәлән, **солоҡтоң**, йәғни ағасты соҡоп яһаған умартаның һөйләштәрҙә тиҫтәгә яҡын атамаһы бар: **солоҡ умарта, түмәр умарта, түңгәк умарта, бағана умарта, төпсөк умарта, улаҡ умарта, һөйәм умарта.** Күренеүенсә, умартаға атама биргәндә был осраҡта тирә-яҡтағы нәмәләргә оҡшатыу төп мотив итеп алынған.

Сифатына, миҙгеленә, сығышына, эшкәртелеүенә ҡарап, бал түбәндәгесә атап йөрөтөлә: **ҡорт балы, тос бал, шим бал, сей бал, сосо бал, шәкәрләнгән бал, ҡомоҡҡан бал, йәш бал, яңы бал, йылы бал, аҙау бал, ултырған бал, йыллаған бал, ҡышлаған бал, йүкә балы, сәскә балы, ҡарабойҙай балы, кәрәҙле бал, балауыҙлы бал, мисәтле бал, ҡыналы бал, шыйыҡ бал, ҡыуған бал, айыртылған бал, һыҡтырылған бал, ағыҙған бал, һитәле бал, мансалы бал, фураж балы, шәкәр балы, япраҡ балы, уҡран бал һ. б.**

Солоҡ умарта эсенә балауыҙҙы тотоп тороу өсөн ҡуйылған нәҙек таяу сыралар әҙәби телдә **тағара** тип атала, ә һөйләштәрҙә уның бер нисә варианты йөрөй: **шеш, татау, тырма, сырныҡ, сәнсем, сыра, таяуыс, тағрау, тарау** һ. б.

---

[1] *Яруллина У. М.* Некоторые лексические особенности говора демских башкир // Башкирская лексика. 1966. С. 136.

[2] *Киекбаев Дж. Г.* Лексика и фразеология башкирского языка. Уфа, 1966. С. 50.

[3] *Зайнуллина Л. М.* Ономасиологическое исследование лексики пчеловодства в башкирском языке. М., 1987. (Науч. рук. д. ф. н., проф. К. М. Мусаев).

Умарта ҡарағанда ҡорттарға төтөн өрҙөрә торған ҡорамал шулай уҡ тиҫтәләгән атама менән йөрөй. Исем биреүҙең нигеҙендә был ҡорамалдың теге йәки был эшкә тәғәйәнләнеше төп мотив булып ята: **төтәткес, төтөнлөк, төтөнсә, өрҙөргөс, орҙорткос, өргөс, ыҫлаҡ, ыҫтыҡ, ыҫтатҡыс, ҡыуау, боһолдаҡ, мөрйә, күрек** һ. б.

Бал ҡорттары ла тышҡы ҡиәфәте, башҡарған эше, ғаиләләге урыны буйынса бик күп атамалар менән йөрөй: **инә ҡорт, ата ҡорт, эшсе ҡорт, кейек ҡорт, бур ҡорт, рәшә ҡорт, шәйләк ҡорт, ҡарауылсы ҡорт, тәрбиәсе ҡорт, ҡабул итеүсе ҡорт, һаҡсы ҡорт, йыйыштырыусы ҡорт, елпеүсе ҡорт, ана ҡорт, һоро ҡорт, ҡары ҡорт, һары ҡорт** һ. б.

Балды кәрәҙенән айырып, ағыҙып алыу, йәғни **бал ҡыуҙырыу,** һүҙбәйләнеше шулай уҡ бер нисә вариантта ҡулланыла: **бал ҡыуыу, бал һыҡтырыу, бал алыу, бал һиптереү, бал өйортөү, бал айырыу, бал ағыҙыу** һ. б.

Ҡорттарҙың бал менән тулған кәрәҙҙе балауыҙ менән һылап ҡуйыуын әҙәби телдә **сигәләү** тип атайҙар. Шул уҡ мәғәнәлә **ҡыналау** һүҙе лә киң ҡулланыла. **Ҡыналау** ҡына һүҙенән яһалған. **Ҡына** кәрәҙ өҫтөн һылап ҡуя торған йоҡа ғына аҡ балауыҙ. Әҙәби телдә шулай уҡ **мисәтләү** тигән өсөнсө вариантты ла йыш ҡына осратырға була. Был һүҙҙәрҙең һөйләштәрҙәге ҡулланылышын сағыштырғанда **мисәтләү** һүҙе киңерәк таралған. Ғөмүмән, синонимдарҙың барлыҡҡа килеүен һәм таралыуын төрлөсә аңлатырға була. Уларҙың барлыҡҡа килеүенең төп сәбәбе донъяны танып белеүгә бәйле. Билдәле булыуынса, кешеләрҙең ысынбарлыҡты танып белеүе камиллашҡан һайын, тирәяҡтағы нәмәләрҙең яңы үҙенсәлектәре, быға тиклем билдәһеҙ сифаттары асыла бара. Был хәҡиҡәт һүҙҙәрҙә, атамаларҙа сағылыш таба. Шулай уҡ һуңғы йылдарҙа ике теллелек шарттарында урыҫ һәм башҡорт һүҙҙәрен йәнәш ҡулланыу ҙа синонимдар даирәһен киңәйтеүгә алып килде. Төп башҡорт һүҙҙәре булған **сигәләү, һылау, ҡыналау** кеүек мәғәнәләш атамалар рәтенә **мисәтләү** ҡылымының килеп инеүе быға үҙе бер миҫал булып тора. Күренеүенсә, әҙәби телдәге синонимдар һөйләштә ҡулланылған мәғәнәләш һүҙҙәр иҫәбенә байый, сөнки уларҙың байтағы телдә йыш ҡулланыу сәбәпле әҙәби һүҙгә әйләнә. Мәғәнәләш һүҙҙәр телде байыта, фекерҙе аныҡыраҡ әйтергә ярҙам итә, телмәргә йәм өҫтәй, уны йәнләндерә.

Йомғаҡлап ошо фекерҙе әйтмәксебеҙ: ҡортсолоҡҡа ҡараған атамаларҙың күпселеген диалект һүҙҙәр тәшкил итә, шуға күрә уларҙың байтағы һүҙлектәргә алынмаған. Ошо тематик төркөмгә ингән һүҙҙәрҙе бер ергә туплап, билдәле бер системаға һалып һүҙлек төҙөү телебеҙҙе байытыу, халҡыбыҙҙың данлы тарихын ҡабаттан байҡау һәм тергеҙеү йәһәтенән оло бер эш булыр ине.

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

Мендән ашыу лексик берәмекте үҙ эсенә алған умартасылыҡ һүҙлеге урыҫса-башҡортса, башҡортса-урыҫса өлөштәрҙән тора. Һүҙлеккә умартасылыҡҡа ҡараған барлыҡ һүҙҙәр, һүҙбәйләнештәр алынды. Уларҙың байтағы ҡортсолоҡ буйынса яҙылған ғилми әҙәбиәттән, дәреслектәрҙән, матбуғат материалдарынан, һүҙлектәрҙән йыйылды.

Терминдарҙың күбеһенә ҡыҫҡаса аңлатма бирелде. Баш һүҙҙәр ҡалын хәрефтәр менән алфавит тәртибендә урынлаштырылды, ә йәйә эсендәге аңлатмалар курсив менән бирелде. Мәҫәлән:

**падевый мед** япраҡ балы (*корттарҙың япраҡ бүлеп сығарған шәрбәтле матдәләрҙе эшкәртеп йыйған балы)*

**снозы** тағара *(солоҡ умарта эсенә балауыҙҙы тотоп тороу өсөн ҡуйылған нәҙек кенә таяу сыралар*)

**кәрәҙле бал** сотовый мед

**ҡорт тубалы** роевник

Синонимдар, диалект һүҙҙәре алфавит буйынса бирелеп, әҙәби вариантҡа тоҫҡама яһалды. Мәҫәлән:

**сәнсем** *диал. то же, что* **тағара**

**улаҡ умарта** *диал. то же, что* **солоҡ умарта**

**бал өйөрөлтөү** *то же, что* **бал ҡыуҙырыу**

Беҙ тәҡдим иткән был һүҙлек Башҡортостан Республикаһының Халыҡ мәғарифы министрлығы тарафынан раҫланған «Умартасылыҡ» курсы программаһына яраҡлаштырып төҙөлдө. Ул урта мәктәп уҡыусыларына, махсус уҡыу йорто студенттарына, матбуғат, телевидение, радио хеҙмәткәрҙәренә, журналистарға, тәржемәселәргә һәм башҡорт теле менән ҡыҙыҡһынған уҡыусыларға тәғәйенләнә.

## ШАРТЛЫ ҠЫҪҠАРТМАЛАР

*анат.* – анатомия термины
*бот.* – ботаника термины
*вет.*– ветеринария термины
*диал.* – диалект һүҙе
*зоол.* – зоология термины
*этн.* – этнография термины

## ФАЙҘАЛАНЫЛҒАН ҒИЛМИ ӘҘӘБИӘТ ҺӘМ ҺҮҘЛЕКТӘР


*Аветисян Г. А.* Разведенис и содержание пчел. М., 1983.
Башҡорт теленең һүҙлеге. Т. 1–2. М., 1993–1994.
Башҡортса-русса һүҙлек. М., 1996.
Башҡорт һөйләштәренең һүҙлеге. Т. 1–3. Уфа, 1970–1987.
*Буренин Н. Л., Котова Г. Н.* Справочник по пчеловодству. М., 1985.
*Власов В. Н.* Башҡорт балы. Өфө, 1983.
*Власов В. Н., Хайретдинов Л. Г., Шафиков И. В.* Календарь пчеловода Башкирии. Уфа, 1987.
*Вахитов Р.* Пчелы и люди. Өфө, 1992.
*Ноғоманов Р. Г., Ишемғолов Ә. М.* Умартасылыҡ серҙәре. Өфө, 1997.
*Нуждин А. С., Таранов Г. Ф.* Учебник пчеловода. М., 1984.
*Тименский П. И.* Юному пчеловоду. М., 1988.
*Черкасова А. И., Давыденко И. К. и др.* Словарь-справочник по пчеловодству. Киев,1991.
*Шакиров Д. Т.* Пчеловодство Башкирии. Уфа, 1992.
*Шафиҡов И. В.* Бал ҡортоноң наҙы бар. Өфө, 1992.

## ИЗ ИСТОРИИ ПЧЕЛОВОДСТВА

Пчеловодство является одним из древнейших промыслов человека. Об этом свидетельствует рисунок, сделанный на скале за 15 тысяч лет до нашей эры, изображающий добычу меда. Первые письменные памятники упоминают о пчеловодстве за 3 тысячи лет до нашей эры.

По арабским источникам, пасеки в Киевской Руси появились уже в IV столетии. Пчеловодство прошло несколько этапов развития. В течение многих тысячелетий продолжался период **«дикого» пчеловодства**, когда человек уничтожал в дуплах деревьев пчелиные семьи и забирал все их медовые запасы.

Следующий этап – **бортничество**. При бортевом пчеловодстве устраивали искусственные жилища для пчел в виде выдолбленных дупел в деревьях, а позднее – в обрубках деревьев, которые размещали в лесах на деревьях для привития роев. Такие дупла называли бортями.

На смену бортничеству пришло **колодное** пчеловодство. При колодном пчеловодстве пчел содержали в неразборных колодах и дуплянках, выдолбленных в обрубках деревьев и размещенных на лесных полянах или возле жилья человека. Колодное пчеловодство имело широкое распространение до XX века, и оно по своей сути оставалось промыслом, так как жилища для пчел не позволяли человеку вмешиваться в жизнь насекомых и тем более регулировать ее.

В книге русского натуралиста И. И. Лепехина впервые подробно описывается, как башкиры организовывают защиту бортей и уход за ними[1]. Академик А. С. Паллас, побывавший в Уфе и ее окрестностях, пришел к выводу, что башкирские земли – благодатнейшие места для разведения пчел. Он подробно описал технику и инструменты, применяемые башкирами для изготовления бортей, и способы защиты их от медведей[2].

---

[1] *Лепехин И. И.* Дневные записки путешествия доктора И. Лепехина по разным провинциям Российского государства в 1768–1769 гг. СПб., 1772. С. 68.

[2] *Паллас П. С.* Путешествие по различным местам Российского государства. СПб., 1770. Т. 1. Ч. 2. С. 6–24.

«Башкирия – классическая страна пчеловодства; пчеловодство и бортничество процветали там со времен глубокой древности», — пишет С. И. Руденко[1].

«Бортничество, так же как и охота, еще в домонгольские времена у башкир Приуралья имело не только подсобное, но и промысловое значение»[2].

С развитием земледелия и вырубкой лесов бортничество уступило место пасечному пчеловодству. Бортничество сохранилось в Бурзянском районе нашей республики. С целью сохранения и изучения бортевых пчел в естественном состоянии с 1986 года организован государственный заповедник Шульганташ на базе Прибельского филиала Башкирского государственного заповедника.

Изобретение П. И. Прокоповичем рамочного улья (1814 г.), Л. Лангстратом подвижной рамки (1851 г.), Ф. Грушкой – медогонки (1865 г.) и Й. Мерингом – искусственной вощины (1857 г.) стало основой для развития совершенно новых методов пчеловодства. Перестройке пчеловодства содействовали и успехи в изучении биологии пчелиной семьи. Все это способствовало зарождению в начале XX века пасечно-ульевого периода в пчеловодстве, продолжающегося и поныне. Заводское изготовление вощины, легкость откачки меда из сотов с помощью высокопродуктивных медогонок, искусственное размножение пчелосемей и искусственное выведение маток способствуют переводу современного пчеловодства на промышленную основу.

Первые сведения о башкирском бортничестве известны с XVII века. Сохранилось множество письменных свидетельств путешественников по Южному Уралу о старинном промысле местного населения — бортевом пчеловодстве. В «Книге Большому Чертежу» о башкирах говорится: «... кормит их мед, зверь, рыба, а пашни не имеют».[3]

Ученый-географ Н. П. Рычков писал о башкирах: «В числе лучших имуществ сего народа может быть содержание пчел, которыми он изобилует. Сей род прибыточной экономии исправляют они с таким искусством и расчетом, что едва ли сыщется такой народ, который бы мог их превзойти в пчелиных промыслах».[4]

---

[1] *Руденко С. И.* Башкиры. М.; Л.: Наука, 1955. С. 96.

[2] *Кузеев Р. Г.* Происхождение башкирского народа. М.: Наука, 1974. С. 493.

[3] Книга Большому Чертежу или древняя карта Российского государства. СПб., 1838. Изд. 2-е. С. 152.

[4] *Рычков Н. П.* Журнал и дневные записки путешествия капитана Рычкова по разным провинциям Российского государства в 1769 и 1770 гг. СПб., 1770. С. 138–139.

С 1860 по 1900 гг. в Башкортостане внедряется рамочное пчеловодство, создаются первые пасеки с рамочными ульями и мастерские по изготовлению ульев и вальцев. Основными направлениями пчеловодства являются: производство пчелиного меда, воска, прополиса, пчелиного яда, маточного молочка, пчелоопыление, разведение пчелиных семей и маток.

Основы научного пчеловодства в республике были заложены созданием в 1930 году опытной станции пчеловодства и началом подготовки в 1932 году квалифицированных специалистов в Юматовском пчеловодческом техникуме. С 1964 года при Башкирском сельскохозяйственном институте открыта кафедра пчеловодства.

Пчеловодство широко распространено по всей территории нашей республики. Передовые пчеловоды в благоприятные годы получали по 70–100 кг меда от каждой пчелосемьи. Среднегодовое производство товарного меда в Башкортостане с общественных пасек достигало 1,5–2 тысяч тонн и более.

О башкирском меде, его чудодейственной исцеляющей способности сложено много преданий. Вкусовые, питательные и лечебные качества этого изумительного дара природы высоко ценятся человеком с древних времен. Успехи пчеловодов Башкортостана широко известны в нашей стране и за рубежом. Пчеловоды нашей республики принимают участие в конгрессах, конференциях и выставках по пчеловодству, представляя на них свои экспонаты. В Париже, на Всемирной выставке 1900 г. была получена золотая медаль, на Международной выставке в Эрфурте 1961 года – золотая медаль и грамота.

Пчеловоды Башкортостана приняли участие в XXIII Международном конгрессе по пчеловодству в Москве (1971 г.). Представленные на выставке экспонаты были отмечены тремя золотыми и тремя серебряными медалями. Ежегодно в Москве на ВДНХ России в павильоне «Пчеловодство» демонстрируются достижения башкирского пчеловодства.

## ПЧЕЛОВОДЧЕСКАЯ ЛЕКСИКА БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА

Изучение пчеловодческой лексики в башкирском языке представляет большой интерес для башкирского языкознания. Лексика пчеловодства показывает, что каждое понятие, связанное с данной отраслью хозяйства, имеет свое название. Однако многие из этих наименований подверглись архаизации, многие термины выпали из активного упо-

требления. Большая часть наименований пчеловодства сохранилась в отдельных говорах или лексике некоторых деревень. Они встречаются лишь в речи старых бортевиков и пчеловодов и выявление их возможно только путем опроса.

Лексика башкирских бортевиков и пчеловодов характеризуется самобытностью и широкой распространенностью среди башкирского населения. Ценные сведения о пчеловодческой лексике башкирского языка содержатся в трудах ученых-языковедов Дж. Г. Киекбаева, Н. Х. Максютовой, У. М. Яруллиной. В статье Н. Х. Максютовой «Бурзянский говор» перечисляются названия: пчел, болезней пчел, видов меда, видов ульев и снастей бортничества[1].

В статье У. М. Яруллиной «Некоторые особенности говора демских башкир» приводится список некоторых терминов пчеловодства[2].

Затронута профессиональная лексика пчеловодов и в учебнике Дж. Г. Киекбаева «Лексика и фразеология башкирского языка»[3]. Авторы перечисленных статей ограничились простым перечислением отдельных названий пчеловодства и указанием диалектной принадлежности данных названий. Эти исследования прежде всего ценны выделением пчеловодческой лексики в отдельную тематическую группу лексики.

Вопросам изучения терминологии пчеловодства в башкирском языке посвящено исследование Л. М. Зайнуллиной[4]. В данной работе впервые предпринимается попытка монографического изучения пчеловодческой лексики башкирского языка. Ею собраны и классифицированы термины и народные названия пчеловодства. Установлены исконный и заимствованный пласты лексики и исследована мотивация данных названий.

Пчеловодческая лексика башкирского языка разделена автором исследования на 12 основных лексико-семантических групп: названия борти и ее составных частей, названия инструментов для изготовления борти, названия снастей для добычи меда из бортевого дерева, названия приспособлений для охраны борти от диких животных, названия представителей семейства пчелиных, названия болезней пчел, назва-

---

[1] *Максютова Н. Х.* Бурзянский говор // Башкирская диалектология. Говоры юго-востока Башкирии. Уфа, 1963. С. 115.

[2] *Яруллина У. М.* Некоторые лексические особенности говора демских башкир // Башкирская лексика. Уфа, 1966. С.138.

[3] *Киекбаев Дж. Г.* Лексика и фразеология башкирского языка. Уфа, 1966.

[4] *Зайнуллина Л. М.* Ономасиологическое исследование лексики пчеловодства в башкирском языке. АКД. М., 1987. С. 29.

ния продуктов пчеловодства, названия пасеки и пасечных построек, названия пасечника и пчеловода, названия приспособлений для добычи меда из ульев, названия, связанные с процессом роения пчел, названия медогонки и ее составных частей, названия посуды для меда и т. д.

В своей диссертации автор исследует пчеловодческую лексику в сравнительном плане с тюркскими, монгольскими и тунгусо-маньчжурскими языками. Наличие общих названий в башкирском и монгольском языках объясняется участием отдельных монгольских племен в этногенезе башкир.

О происхождении названия *солоҡ* «борть» выдвигаются два предположения. Возможно, это слово состоит из трех частей: со – л – оҡ. В тунгусо-маньчжурских языках слово *со /дзо/ дзю* означает «жилище, нора, логово, гнездо». В тунгусо-маньчжурских языках -л является аффиксом множественности. По мнению профессора Дж. Г. Киекбаева аффикс -л, как показатель множественного числа, в прошлом был характерен и для алтайских языков, к которым он относит и тюркские языки. Но в алтайских языках этот аффикс «с течением времени утратил свое значение множественности и вошел в состав корня»[1]. Примеры такого лексического явления: *соол* «жилище, очаг» (монг., бурят.), *сыуал* «очаг» (башк.), *солан* «сени» (башк.)[2].

Исходя из этих фактов можно допустить, что дупло, в котором жили пчелы (или гнездо/нора), могло называться аналогичным словом *со, соол, солоҡ* (-оҡ в тюркских языках является словообразовательным аффиксом).

Второе предположение о происхождении данного наименования кажется нам более достоверным. Ср. монг. *цоолх* «долбить», бурят. *соолхо* «выдалбливать», калм. *цоолох* «делать отверстие», тюрк. *йолк* «рвать». Ф. Ф. Илимбетов высказал предположение о том, что наименование *солоҡ* вошло в башкирский язык из монгольских языков[3].

В заключение можно сделать вывод, что основу пчеловодческой лексики башкирского языка составляют общенародные наименования, большая часть которых зафиксирована в трехтомном «Словаре башкирских говоров». Литературные названия пчеловодства отражены

---

[1] *Киекбаев Дж. Г.* Введение в урало-алтайское языкознание. Уфа, 1972.

[2] *Константинова О. К.* Характеристика лексического комплекса «очаг-жилище-народ» в тунгусо-маньчжурских, монгольских и тюркских языках. Проблемы общности алтайских языков. Л., 1971. С. 68.

[3] *Илимбетов Ф. Ф.* Лексические параллели в терминах пчеловодства у тюркских и финно-угорских народов Поволжья и Приуралья. Вопросы финно-угроведения. Вып. 6. Саранск, 1975. С.66.

в двухтомном «Словаре башкирского языка», в русско-башкирском и башкирско-русском словарях.

В предлагаемом читателям словаре помимо литературных названий пчеловодства представлены и широкоупотребляемые лексические единицы общенародного языка, что имеет научное и практическое значение, так как они станут достоянием как башкирской лексикографической науки, так и национального литературного языка.

## ПОСТРОЕНИЕ СЛОВАРЯ

Заглавные слова расположены в алфавитном порядке и выделены полужирным шрифтом. В необходимых случаях в скобках курсивом дается пояснение данного значения слова на русском или башкирском языках:

**падевый мед** япраҡ балы *(ҡорттарҙың япраҡ бүлеп сығарған шәрбәтле матдәләрҙе эшкәртеп йыйған балы);*

**снозы** тағара *(балауыҙҙы тотоп тороу өсөн солоҡ умарта эсенә ҡуйылған нәҙек кенә таяу сыралар);*

**кәрәҙле бал** сотовой мед;

**ҡорт тубалы** роевник.

Синонимы, диалектизмы даются на своем месте по алфавиту с отсылкой к основному слову:

**сәнсем** *диал. то же, что* **тағара**;

**улаҡ умарта** *диал. то же, что* **солоҡ.**

## УСЛОВНЫЕ СОКРАЩЕНИЯ

*анат.* — анатомия
*бот.* — ботаника
*вет.* — ветеринария
*диал.* — диалектизм
*зоол.* — зоология
*этн.* — этнографизм

# УРЫҪСА – БАШҠОРТСА УМАРТАСЫЛЫҠ ҺҮҘЛЕГЕ

## УРЫҪ АЛФАВИТЫ

| | | | | |
|---|---|---|---|---|
| Аа<br>а | Бб<br>бэ | Вв<br>вэ | Гг<br>гэ | Дд<br>дэ |
| Ее<br>е | Ёё<br>ё | Жж<br>жэ | Зз<br>зэ | Ии<br>и |
| Йй<br>и краткое | Кк<br>ка | Лл<br>эль | Мм<br>эм | Нн<br>эн |
| Оо<br>о | Пп<br>пэ | Рр<br>эр | Сс<br>эс | Тт<br>тэ |
| Уу<br>у | Фф<br>эф | Хх<br>ха | Цц<br>цэ | Чч<br>че |
| Шш<br>ша | Щщ<br>ща | ъ<br>твердый знак | Ыы<br>ы | ь<br>мягкий знак |
| Ээ<br>э | Юю<br>ю | Яя<br>я | | |




**аборигенные пчелы** урындағы бал ҡорттары (*оҙаҡ йылдар буйы билдәле бер төбәктә йәшәп, уның тәбиғәт шарттарына яраҡлашҡан ҡорттар)*

**абхазские пчелы** абхаз бал ҡорттары (*Төньяҡ Кавказдың таулы райондарында барлыҡҡа килгән һәм хәҙерге көндә ҡырҡлаған илгә таралған, тат һәм һеркә йыйырға әүәҫ бал ҡорто)*

**авитаминоз** авитаминоз *(бал ҡорттары рационында витаминдарҙың тейешле кимәлдә булмауы сәбәпле барлыҡҡа килгән ауырыу)*

**адаптация** *биол.* ҡулайлашыу *(йәшәү шарттарына ҡулайлашыу)*

**адонис весенний, горицвет** *бот.* һары умырзая (*лютиктар ғаиләһенә ингән, иртә яҙҙан сәскә ата торған тетмәкәй япраҡлы, эре сәскәле үҫемлек; бал ҡорттары уның һеркәһен яратып йыя)*

**акарапидоз** *вет.* акарапидоз (*талпандарҙан таралған бал ҡорто сире)*

**акарицид** *вет.* акарицид *(талпандарға ҡаршы ҡулланылған химик препарат)*

**акация** *бот.* акация, сәрүәр ағасы, бохар селеге *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән ваҡ япраҡлы, һары, аҡ сәскәле, ҡуҙаҡ орлоҡло, селеккә оҡшаған ағас; май–июнь айҙарында сәскә ата; бал ҡорттары уның татын яратып йыя)*

**аконит высокий** *бот.* айыутабан *(лютиктар ғаиләһенә ингән уҡ япраҡлы, төрлө төҫтәге өйкөм сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын һәм һеркәһен яратып йыя)*

**актиномикоз маток** *вет.* инә ҡорт актиномикозы *(инә ҡорттоң енси һәм башҡа ағзаларын зарарлай торған йоғошло ауырыу)*

**алиментарная диарея** *вет.* дизентерия, эс китеү *(сифатһыҙ аҙыҡ менән туҡланыуҙан барлыҡҡа килгән эс китеү ауырыуы)*

**алтей лекарственный** *бот.* бесәй борсағы *( аҡ йәки ҡыҙғылт сәскәле, һиҙәп орлоҡло, бер йәки күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын ератып йыя; шәкәрлелеге яҡынса 150 кг/га)*

**алыча** *бот.* алса *(гөлйемеш һымаҡтар ғаиләһенә ингән аҡ сәскәле, сейә һымаҡ емешле көньяҡ ағасы; март—апрель айҙарында япраҡ ярыу менән бергә сәскә лә ата; бал ҡорттары уның һеркәһен дә, татын да ератып йыя; шәкәрлелеге яҡынса 27—32 кг/га)*

**альбинизм у пчел** *биол.* ҡорттар альбинизмы *(триптофан алмашыуы арҡаһында күҙ пигменттары боҙолоуға һәм аҡ күҙле ҡорттар тыуыуға сәбәп булған тыумыштан килгән сир)*

**амебиаз** *вет.* амебиаз *(амеба микробы тараҡан ауырыу)*

**американский гнилец** *вет.* Америка сереге *(ларве микробтары тараҡан йоғошло ауырыу; ҡарышлауыҡтарҙың эсәгенә аҙыҡ менән килеп эләгә, уларҙы үлтерә һәм серетә)*

**анабиоз** *биол.* анабиоз *(ҡайһы бер йән эйәләренең уңайһыҙ шарттарға яраҡлашып, күпмелер ваҡытҡа үҫеүҙән туҡтап ҡалыуы)*

**анаксибиоз** *биол.* анаксибиоз *(бал ҡорттарының әҙ кислородлы урынға яраҡлашыуы: ҡышҡы шарттарҙа умартала кислород концентрацияһы 21%-тан 10%-ҡа тиклем төшә)*

**анализ продуктов пчеловодства** ҡортсолоҡ продукттарын анализлау *(ветеринария һәм санитария талаптарының үтәлешен тикшереү маҡсатында яһалған экспертиза)*

**анатомическая трутовка** анатомик эшсе ҡорт *(йомортҡа күҙәнәктәре өлгөрә башлаған эшсе ҡорт)*

**анатомия пчел** ҡорттарҙың анатомияһы *(бал ҡорттарының кәүҙәһе баштан, түштән, ҡорһаҡтан тора; түшенә аҫтан өс пар аяҡ, өҫтән ике пар ҡанат тоташҡан; ҡорһаҡ алты балдаҡтан тора: инә һәм эшсе ҡорт ҡорһағының һуңғы балдаҡтары аҫтында ҡаяуы урынлашҡан; ҡорһаҡта аш һеңдереү ағзалары, ҡан әйләнеше һәм нервы системалары,*

*тын алыу, үрсеү ағзалары, башында ике ҡатмарлы һәм өс ябай күҙ, мыйыҡсалар, ауыҙ, морон урынлашҡан)*

**анемофильные растения** *бот.* анемофиль үҫемлектәр *(ел ярҙамында аталана торған үҫемлектәр)*

**анис** *бот.* әнис *(сатыр сәскәлеләр ғаиләһенә ингән, эфир майы биргән хуш еҫле үлән; шәкәрлелеге 50—60 кг/га)*

**аномалии пчел** ҡорттар аномалияһы *(бал ҡорттары үҫешендә килеп тыуған тайпылыш: гинандроморфизм, альбинизм һәм шулай уҡ ҡанат, аяҡ һәм башҡа ағзаларҙағы зәғифлек)*

**аномальная кладка яиц** йомортҡа һалыуҙағы тайпылыш *(әҙер күҙәнәктәрҙең етешмәүе сәбәпле, инә ҡорттоң бер күҙәнәккә бер нисә йомортҡа һалыу күренеше)*

**анофтальмия** һуҡырлыҡ

**антибиотики** антибиотиктар *(ауырыу тыуҙырыусы микроорганизмдарҙы үлтерергә һәләтле биологик сығышлы матдәләр)*

**апископ** апископ *(ҡышын умарталағы бал ҡорттарын тыңлай торған прибор)*

**апистан** *вет.* апистан *(талпандарға ҡаршы ҡулланылған дарыу)*

**апитерапия** *мед.* апитерапия *(ауырыуҙарҙы ҡортсолоҡ продукттарынан яһалған дарыуҙар менән дауалау)*

**аппарат для чистки усиков** мыйыҡ таҙартҡыс *(бал ҡорто тәнендәге тырнаҡты хәтерләткән хәрәкәтсән үҫенте)*

**аромат меда** балдың хуш еҫе

**аскосфероз пчел, известковый расплод** *вет.* эзбизләнеп ҡатҡан үрсем *(аскосфера аписы бәшмәге таратҡан йоғошло ауырыу)*

**аскоцин** *вет.* аскоцин *(аскосфероз йәғни эзбизләнгән үрсемгә ҡаршы көрәшеүҙә ҡулланылған дарыу)*

**аспергиллез пчел, каменный расплод** *вет.* аспергиллез, таш үрсем *(аспергиллюс флавус бәшмәге таратҡан йоғошло ауырыу)*

**астра** *бот.* йондоҙ сәскә *(ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән еҫһеҙ, эре сәскәле үҫемлек; июль—сентябрь айҙарында сәскә ата; бал ҡорто өсөн иң һуңғы өҫтәмә аҙыҡ биреүсе сәскәләр рәтенә инә)*

# Б

**багульник** *бот.* һаҙанаҡ *(арсалар ғаиләһенә ингән оҙонса япраҡлы, аҡ сәскәле ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын, һеркәһен яратып йыя; шәкәрлелеге 70 кг/га)*

**бактерии** бактериялар *(бер күҙәнәкле микроскопик организмдар; бал ҡорттарында бактериоз ауырыуын барлыҡҡа килтерә)*

**бактериоз** бактериоз *(бактериялар тыуҙырған ауырыу)*

**бактериофаг** бактериофаг *(бактерияларҙы үлтерә торған матдә)*

**бактерицид** бактерицид *(бактерия ауырыуҙарына ҡаршы препарат)*

**бактерицидность меда** балдың бактерицидлығы *(балдың ауырыу тыуҙырыусы микробтарҙы үлтерә ала торған үҙсәнлеге)*

**барограф** барограф *( атмосфера баҫымы үҙгәрешен яҙып бара торған прибор)*

**барометр** барометр *(атмосфера баҫымын үлсәй торған прибор)*

**батман** *этн.* батман *(йүкә ағасынан яһалған бал күнәге)*

**бациллы** бациллалар *(бал ҡорттарында төрлө ауырыуҙар тыуҙырыусы таяҡса рәүешендәге бактериялар)*

**башкирская бортевая пчела** башҡорт солоҡ ҡорто *(урта урыҫ ҡортоноң урындағы тәбиғәт шарттарына яраҡлашҡан һәм хәҙерге көндә Бөрйән районында йәшәгән тоҡомо; уны һаҡлау, үрсетеү эше менән Башҡортостан дәүләт ҡурсаулығының Ағиҙел филиалы шөғөлләнә; ул 1986 йылда үҙ аллы «Шүлгәнташ» ҡурсаулығына әйләндерелде)*

**башкирский мед** башҡорт балы *(үҙенең сафлығы, тәме, хуш еҫе, шифалығы менән донъя күләмендә юғары баһа алып, өс алтын миҙалға лайыҡ булған бал: беренсе алтын миҙал 1900 йылда – Парижда, икенсе алтын миҙал 1961 йылда –*

*Эрфуртта, өсөнсөһө иһә умартасыларҙың 1971 йылда Мәскәүҙә үткәрелгән XXIII халыҡ-ара конгресында бирелде)*

**беглый осмотр семей** күстәрҙе өҫтән генә ҡараштырыу *(тәүге таҙарыныу осошонан һуң оялағы аҙыҡтың һәм инә ҡорттоң булыу-булмауын, рамдарҙың сифатын белеү маҡсатында башҡарыла)*

**безвзяточный период** йыйымһыҙ *(табышһыҙ)* осор

**безволосые пчелы** ялтас ҡорттар *(тәндәрендә йөндәре булмаған, ҡара төҫтәге зәғиф ҡорттар)*

**безматочная семья** инәһеҙ күс *(төрлө сәбәптәр арҡаһында инәһеҙ тороп ҡалған күс)*

**безоблетный период** осмай торған мәл

**безусловный рефлекс** шартһыҙ рефлекс *(нәҫелдән нәҫелгә күсә килгән рефлекс: мәҫәлән, ҡорт ҡарышлауыҡтарының оя эсенән балауыҙ ҡатламын кимереп килеп сығыуы, эшсе ҡорттарҙың күҙәнәктәрҙе таҙартыуы, елемләүе, ҡарышлауыҡтарҙы тәрбиәләүе, кәрәҙ ҡойоуы һ. б.)*

**белковая дистрофия** аҡһым дистрофияһы *(аҙыҡта аҡһым етешмәүҙән килеп тыуған ауырыу)*

**белковые вещества меда** балдағы аҡһым матдәләре *(бал составына 300-гә яҡын матдә инә: углевод — 70–75%, аҡһым — 0,6%, һәм һыу — 17–21%)*

**белковый корм** аҡһымлы аҙыҡ

**белоглазые трутни** аҡ күҙле ҡорттар *(пигмент матдәләре боҙолоу сәбәпле күҙҙәре аҡлаған зәғиф ҡорттар)*

**белок** *биол.* аҡһым *(тере матдәнең даими һәм иң мөһим өлөшө булып, төҙөлөш һәм функция нигеҙен тәшкил иткән ҡатмарлы органик матдә)*

**белый клевер** *бот.* аҡ туҡранбаш *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тумалаҡ сәскәле, өсәрләп торған түңәрәк япраҡлы үлән; ҡорттар уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 90–100 кг/га; һеркәлелеге 26–37 кг/га)*

**береза** *бот.* ҡайын *(аҡ ҡабыҡлы, оҙонса япраҡлы, һалынып торған һырға сәскәле ағас; бал ҡорттары уның һеркәһен яратып йыя)*

**бескрылые пчелы** ҡанатһыҙ ҡорттар *(нормаль булмаған шарттарҙа тыуған ҡанатһыҙ зәғиф ҡорттар)*

**биология медоносной пчелы** бал ҡорто биологияһы (*ҡорттарҙың тән төҙөлөшөн, ағзалар функцияһын, тышҡы факторҙар менән мөнәсәбәтен өйрәнгән ғилем*)

**блуждение пчел** ҡорттарҙың аҙашыуы *(һауа шарттарының ҡапыл үҙгәреүе, умарталарҙың дөрөҫ урынлашмауы, ҡайһы бер ҡағиҙәләрҙең үтәлмәүе төп сәбәп булып тора)*

**бодяк полевой** *бот.* баҫыу билсәне *(ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән сәнскәк япраҡлы ҡый үләне; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**болезни матки** инә ҡорт ауырыуҙары *(инә ҡорттарҙа була торған йоғошло һәм йоғошһоҙ ауырыуҙар; ғәҙәттә уларҙың енес ағзалары зарарлана)*

**болезни пчел** ҡорт ауырыуҙары *(йоғошһоҙ ауырыуҙар аҙыҡ етешмәүҙән, күсте дөрөҫ тәрбиәләмәүҙән, төрлө талпандарҙан хасил була; йоғошло ауырыуҙарҙы бактериялар, бәшмәктәр, вирустар, микробтар барлыҡҡа килтерә)*

**болезни расплода** үрсем ауырыуҙары *(эзбизләнгән үрсем, таш үрсем һәм ҡапсыҡлы үрсем ауырыуҙары)*

**болезни трутней** ата ҡорт ауырыуҙары

**бонитировка пчелиных семей** күстәрҙе баһалау *(ҡорт күстәрен сифат яғынан баһалау)*

**бортевая веревка** *этн.* эркәтәү *(солоҡ балын алғанда күнәкте бәйләп төшөрә торған яҫы бау)*

**бортевая должея** *этн.* солоҡ ауыҙы, бажым

**бортевая зарубка** *этн.* киртеп яһалған баҫҡыс *(ағасҡа бер-береһенән берәр метр араларҡта соҡоп яһалған баҫҡыс)*

**бортевая крышка, дверца** ҡапҡаҡ *(түмәр умартаның, солоҡтоң ҡапҡасы)*

**бортевая палочка, снозы** *этн.* тағара *(түмәр умарта йәки солоҡ эсенә балауыҙҙы тотоп тороу өсөн ҡуйылған нәҙек кенә таяу ағастар)*

**бортевая педаль** *эти.* солоҡ табалдырығы *(солоҡ ағасына менгәс, аяҡты ҡуя йәки баҫып тора торған ҡулайлама)*

**бортевая перекладина** *этн.* ләңге *(солоҡтан бал алғанда баҫып тора торған арҡыры ағас: кәкрерәк ағастың ике яҡ башына ҡайыш тағып, солоҡ ағасына ҡуша уратып бәйләп ҡуялар)*

**бортевая пешня** *этн.* бөрөз (*солоҡ соҡой торған ҡасау*)

**бортевая пчела** солоҡ ҡорто

**бортевик** солоҡсо

**бортевое дерево** *этн.* солоҡ ағасы, солоҡло ағас

**бортевое лезиво** *этн.* кирәм *(солоҡ ағасына менеү өсөн ҡулланылған киңлеге ус аяуындай оҙон бау)*

**бортевое пчеловодство** солоҡсолоҡ, солоҡ умартасылығы *(үҫеп ултырған ҡарағайҙы соҡоп яһаған солоҡта ҡорт аҫрау шөғөлө)*

**бортевое тесло** *этн.* бағау *(солоҡ соҡоғанда ҡулланылған арҡыры балта)*

**бортевой леток** солоҡ кейәһе

**бортевой нож** *этн.* бал бысағы *(солоҡтағы кәрәҙҙе ҡырҡып, батманға һалыр өсөн йүкә ағасынан яһалған бысаҡ: киңлеге 2 см, оҙонлоғо 25 см самаһы була)*

**бортевой скобель** *этн.* тырнаҡ йышҡы *(солоҡ эсен шымарта торған йышҡы)*

**бортевой топорик** *этн.* солоҡ балтаһы *(солоҡ юна торған оҙон һаплы бәләкәй балта)*

**борть** 1. солоҡ умарта *(урманда үҫеп ултырған ҡарағайҙы йәки башҡа ағастарҙы соҡоп яһаған умарта); 2.* түмәр умарта *(йыуан ҡарағай түмәренең эсен соҡоп яһаған ябай умарта)*

**борщевик** *бот.* балтырған *(көпшә һабаҡлы, киң киртләс япраҡлы, сатыр сәскәле күп йыллыҡ үлән; бал ҡорттары татын яратып йыя; шәкәрлелеге 120–200 кг/га)*

**ботанические сорта меда** балдың ботаник сорттары *(бер-береһенән төҫө, тәме, шифалылығы менән айырылып*

*торған һәм бер генә төрлө үҫемлек сәскәһенән йыйылған бал: йүкә балы асыҡ һары төҫтә, хуш еҫле була; көнбағыш балы ҡуйы һары төҫтә, үтә татлы була)*

**боярышник обыкновенный** *бот.* энәлек *(роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән аҡ сәскәле, һары йәки ҡыҙыл емешле, эре энәле ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары һеркәһен дә, татын да яратып йыя; шәкәрлелеге 15–17 кг/га)*

**браковка пчелосемей, маток, маточников** ҡорт ғаиләләрен, инә ҡорттарҙы, ҡорт көбөләрен браковкалау *(умартасылыҡта юғары продуктлы көслө күстәр аҫрау ниәтендә үткәрелә)*

**брачный вылет матки** инә ҡорттоң ҡауышыу осошо *(инә ҡорттоң аталаныу өсөн әре ҡорттар янына осоп сығыуы)*

**бригада пчеловодная** умартасылыҡ бригадаһы

**бродячий рой** аҙашҡан ҡорт күстәре *(урманда йәшәгән ҡырағай бал ҡорто күстәре)*

**брожение меда** балдың әсеүе *(составында 22%-тан артыҡ һыу булған, өлгөрмәгән бал тиҙ әсеүсән була)*

**брусника** *бот.* ҡыҙыл көртмәле *(ялтырап торған йәшел япраҡлы, алһыу суҡ сәскәле, ваҡ ҡына әсе ҡыҙыл емешле, ергә түшәлеп үҫкән ҡыуаҡ үҫемлек; ҡорттар уның һеркәһен дә, татын да яратып йыя, шәкәрлелеге 20–25 кг/га)*

**брюшко пчелы** ҡорт ҡорһағы *(ете быуынтыҡтан торған был ағза хитин ярыһы менән тоташҡан арҡа һәм ҡорһаҡ ярым ҡуласаларынан тора; унда тын алыу, аш һеңдереү, ҡан әйләнеше системаһы, енес ағзалары урынлашҡан)*

**брюшные полукольца** ҡорһаҡ ярым ҡуласалары *(ҡорһаҡтағы һәр бер сегмент хитин ярыһы менән тоташҡан тергит һәм стерниттан тора)*

**бузина** *бот.* өҫкат *(аҡлы-аллы ваҡ ҡына сәскә атҡан, ҡыҙыллы-һарылы ҡушар-ҡушар емеш биргән, ҡубырсып торған аҡһыл ҡабыҡлы ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның һеркәһен яратып йыя)*

**бурзянская бортевая пчела** бөрйән солоҡ ҡорто

# В

**вагоны для перевозки пчел** бал ҡорттарын ташый торған вагондар

**вайда** *бот.* кәзә һаҡалы *(ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ингән ҡыҫҡа ғына шау япраҡлы, һары суҡ сәскәле үҫемлек; бал ҡорттары уның татын яратып йыя)*

**вакцина** вакцина *(йоғошло ауырыуҙарға ҡаршы препарат)*

**вакцинация** вакцинация *(вакцина менән прививка яһау)*

**валериана лекарственная** *бот.* бесәй үләне *(оҙон һабаҡлы, ҡара-ҡаршы оҙонса япраҡлы, ваҡ суҡ сәскәле үлән; шәкәрлелеге 60—70 кг/га)*

**валовая продукция пчеловодства** ҡортсолоҡтоң тулайым продукцияһы *(ҡортсолоҡтан йыл әйләнәһенә алынған барлыҡ продукция: бал, балауыҙ, һеркә, ҡорт елеме, ҡорт һөтө һ. б.)*

**валовый сбор воска** балауыҙҙың тулайым йыйымы

**валовый сбор меда** балдың тулайым йыйымы

**варроатоз** *вет.* талпан ауырыуы

**василек синий** *бот.* арыш сәскәһе, арыш зәңгәре; зәңгәрсуҡ *(ҡатмарлы сәскәләр ғаиләһенә ингән зәңгәр сәскәле ҡый үләне; шәкәрлелеге 60—70 кг/га)*

**вегетация** *бот.* вегетация *(үҫемлектәрҙең морон төртөү, үҫеү, өлгөрөү һәм орлоҡланыу процесы)*

**вентилирование улья пчелами** умарталарҙың ҡорттар тарафынан елләтелеүе

**вентиляционные трубы** елләткес торбалар *(ҡорт баҙындағы һауа йылылығын һәм дымлылыҡты көйләй торған ҡулайламалар)*

**вентиляция зимовника** ҡорт баҙын елләтеү

**вентиляция улья** умартаны елләтеү

**венчик** *бот.* күҙ, сәскә күҙе *(сәскә уртаһындағы һеркәлек)*

**веранда летковая** кейә верандаһы *(бал ҡорттарын ҡурсалау һәм төрлө химик препараттарҙан һаҡлау өсөн умартаның кейә урынлашҡан стенаһына беркетелгән йәшник)*

**вербейник** *бот.* тал үләне *(ҡара бөрлөгәндеке һымаҡ япраҡлы, ваҡ-ваҡ ҡына һары сәскәле, нәҙек быуынтыҡ һабаҡлы сырмалсыҡ үлән; ҡорттар уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 20–25 кг/га)*

**верблюжья колючка** *бот.* дөйә тубылғыһы *(ваҡ япраҡлы, сәнскеле үлән; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 25–30 кг/га)*

**вербовочный танец** әүрәткес бейеү *(сәскәле урындарға әйҙәү өсөн шәйләк ҡорттар тарафынан башҡарылған хәрәкәттәр)*

**вереск обыкновенный** *бот.* ябай арса *(ваҡ япраҡлы, алһыу күк сәскәле ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 100–150 кг/га)*

**вересковый мед** арса балы

**вероника длиннолистая** *бот.* һолобаш юшан *(оҙонса япраҡлы, һепертке һымаҡ сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 30–35 кг/га)*

**вертикальные улья-стояки** вертикаль терәүле умарталар *(кәрәк саҡта өҫтәмә корпустар һәм магазиндар ҡуйыу ярҙамында бейегәйтеп була торған умарталар; улар ике корпуслы, өс корпуслы һәм унан да күберәк корпуслы булалар)*

**вертлуг** *анат.* вертлуг *(бал ҡортоноң тазы менән ботон тоташтырыусы бер быуынтығы)*

**верхнечелюстная железа** *анат.* өҫкө яңаҡ биҙҙәре *(инә һәм эшсе ҡорттарҙың балауыҙҙы иретерлек секрет бүлеп сығара торған ағзаһы)*

**верхние челюсти** *анат.* өҫкө яңаҡтар, «тештәр» *(ҡорттарҙың балауыҙ ҡатламын, һитәне кимереп йомшартыу өсөн хеҙмәт иткән ағзаһы)*

**верхний леток** өҫкө кейә *(ояны даими рәүештә елләтеү һәм ҡорттар инеп-сығып йөрөү өсөн эшләнелә)*

**весенние работы** яҙғы эштәр *(һауа температураһы 12°С-ҡа күтәрелгәс, умарта тышҡа сығарыла: аҙыҡ күләмен, кәрәҙ сифатын тикшереү һәм тейешле саралар күреү өсөн эшләнелә)*

**весенний облет пчел** ҡорттарҙың яҙғы осошо *(умарта тышҡа сығарылғас та, ҡорттарҙың тәүге таҙарыныу осошо)*

**весенняя ревизия** яҙғы ревизия *(умарта тышҡа сығарылғас, ояны айырым-айырым ҡарап сығыу: көсһөҙҙәренә өҫтәлмә аҙыҡ өләшеү һ. б.)*

**весы** үлсәү *(ҡорттарҙың көндәлек бал йыйымын белер өсөн контроль умарталарҙы үлсәй торған прибор)*

**ветеринарно-бактериологическая лаборатория** ветеринария-бактериология лабораторияһы

**ветеринарное обслуживание пчеловодства** ҡортсолоҡто ветеринария йәһәтенән хеҙмәтләндереү

**ветеринарное свидетельство** ветеринария таныҡлығы

**ветроопыляемые растения** *бот.* ел ярҙамында һеркәләнгән үҫемлектәр

**взаимосвязи в семье медоносных пчел** ҡорттарҙың ғаиләләге үҙ-ара бәйләнеше *(ҡорттарҙың үҙ-ара бәйләнеше күреү, еҫ һиҙеү, ишетеү ағзалары ярҙамында башҡарыла)*

**взяток** йыйым *(бер миҙгелдә йыйылған бал миҡдары)*

**взяток главный** төп йыйым

**взяток естественный** тәбиғи йыйым

**взяток летний** йәйге йыйым

**взяток осенний** көҙгө йыйым

**взяток поздний** һуңлап алынған йыйым

**взяток продолжительный** оҙайлы йыйым

**взяток пыльцевой** һеркәле йыйым

**взяток слабый** көсһөҙ йыйым

**визуальный наружный осмотр** ҡарап тикшереү *(кәрәҙҙәрҙе, ҡортсолоҡ ҡорамалдарын һәм башҡа нәмәләрҙе ҡарап тикшереү)*

**вика** *бот.* кәрешкә *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән теҙмә япраҡлы, сырмалып торған мыйыҡлы, ваҡ ҡына ирен сәскәле*

*үҫемлек; бал ҡорттары уның татын яратып йыя; шәкәрлелеге 70 кг/га)*

**виляющий танец** әүрәткес бейеү *(эшсе ҡорттарҙы сәскәле ерҙәргә әйҙәү өсөн шәйләк ҡорттар яһаған хәрәкәттәр)*

**виноградный сахар** йөҙөм шәкәре *(үҫемлек емештәрендә, тереклек организмында була торған глюкоза; бал шәкәренең 45—47%-ын йөҙөм шәкәре тәшкил итә)*

**вироза** вироз *(вирустар барлыҡҡа килтереүсе йоғошло ауырыуҙар: ҡапсыҡлы үрсем, вируслы паралич һ. б.)*

**вирусоноситель** вирус йөрөтөүсе

**вирусы** вирустар *( йоғошло ауырыуҙар тыуҙырыусы ваҡ ҡына микроорганизмдар)*

**витамины** витаминдар *(кеше һәм тереклек аҙығында йәшәү, шулай уҡ матдәләр алмашыныуы өсөн кәрәк булған төрлө химик составлы органик матдәләр)*

**вишня садовая** *бот.* баҡса сейәһе *(роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән ваҡ ҡына оҙонса шыма япраҡлы, ҡарағусҡыл ҡыҙыл емешле ағас йәки ҡыуаҡлыҡ; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 28—32% кг/га)*

**влагалище пчелы** инә ҡорт еңсәһе

**влажность** дымлылыҡ

**влажность абсолютная** абсолют дымлылыҡ

**влажность воздуха** һауа дымлылығы

**влажность воздуха в зимовнике** ҡорт баҙындағы һауа дымлылығы *(нормаль дымлылыҡ 75—85% булырға тейеш; ул елләткес системалар ҡулланыу һәм еүеш сепрәктәр ярҙамында булдырыла)*

**влажность относительная** сағыштырма дымлылыҡ

**внештатный инструктор пчеловодства** умартасылыҡтың штаттан тыш инструкторы

**внутриульевые паразиты** умарта эсендәге паразиттар *(балауыҙ көйәһе, талпандар, асағойроҡтар, сысҡандар һ. б.)*

**вода ключевая** шишмә һыуы

**вода паводковая** ташҡын һыуы

**вода сточная** йыйылма һыу

**вода талая** ҡар һыуы

**водопой** һыулау *(бал ҡорттарының һыу эсеү урыны)*

**возбудители болезни** ауырыу таратыусылар

**возврат роя** күс ҡайтарыу *(инә көбөләрен киҫеп ташлау, йәш инәне икенсе урынға күсереү юлы менән башҡарыла)*

**воздушные мешки** *анат.* һауа тоҡсайҙары *(башында — өс пар, күкрәгендә ике пар булып, үҙ-ара тын алғыстар һәм боғарлаҡтар аша тоташҡан тын алыу ағзаһының бер өлөшө)*

**возраст матки** инә ҡорттоң йәше *(инә ҡорт 5—7 йыл йәшәй ала, әммә уны һәр ике йыл һайын алмаштырып тороу тәҡдим ителә, сөнки йәше артҡан һайын продуктлылығы 15—20%-ҡа кәмей)*

**волоски** төктәр, төксәләр *(бал ҡорто тәнендәге ваҡ ҡына шырт йөндәр)*

**воровство пчелиное** бал ҡорттарының урлашыуы *(ҡайһы бер ҡорттарҙың көсһөҙ умарталағы әҙер балды йыйыуы)*

**воск валовой** балауыҙҙың тулайым йыйымы

**воск производственный** эшкәртелгән балауыҙ

**воск пчелиный** балауыҙ *(эшсе ҡорттарҙың ҡорһаҡ аҫтында урынлашҡан балауыҙ биҙҙәре бүлеп сығарған матдә; ул 200-ҙән ашыу төрлө матдәнән һәм берләшмәнән тора)*

**воск сортовой** сортлы балауыҙ

**воск топленый** иретелгән балауыҙ

**восковая моль** *зоол.* балауыҙ көйәһе

**восковое сырье** балауыҙ сеймалы *(саф балауыҙ алына торған сеймал)*

**восковой баланс** балауыҙ балансы *(составындағы балауыҙ нисбәтенең һан яғынан сағылышы)*

**восковой гриб** балауыҙ бәшмәге *(кәрәҙгә төшә торған бәшмәк; уны булдырмау өсөн кәрәҙҙе ҡоро һәм елләтелгән урында һаҡлайҙар)*

**восковыделение** балауыҙ бүлеп сығарыу *(12—18 көнлөк йәш эшсе ҡорттарҙың балауыҙ биҙҙәре тарафынан бүлеп*

*сығарыла, бер көстең уртаса 2—3 кг балауыҙ биреүе ихтимал)*

**восковые железы** *анат*. балауыҙ биҙҙәре *(ҡорт ҡорһағындағы ярымбалдаҡтар аҫтында урынлашҡан биҙҙәр; унан йоҡа ғына пластинка рәүешендә балауыҙ бүленеп сыға)*

**восковые зеркальца** *анат*. балауыҙ көҙгөләре *(эшсе ҡорттарҙың арттағы дүрт ярымбалдағы аҫтында урынлашҡан үтә күренмәле ҡатлам; ҡорттар «көҙгөләрҙән» балауыҙ пластинкаларын аяҡтары менән айырып ала һәм өҫкө яңаҡтары менән йомшартып кәрәҙгә йәбештерә бара)*

**восковые крышечки** ҡына *(бал менән тулы кәрәҙҙең өҫтөн һылап ҡуйған йоҡа ғына балауыҙ; бал айыртҡанда эҫе һыуҙа йылытылған кәкре һаплы махсус яҫы бысаҡ менән ҡырып алына)*

**восковые пластинки** балауыҙ пластинкалары *(балауыҙ көҙгөһө өҫтөндәге балауыҙ пластинкалары; бер күҙәнәк төҙөүгә — 50 пластинка, ә эре ҡорт күҙәнәге өсөн 120 пластинка сарыф ителә)*

**воскопресс** балауыҙ һыҡҡыс

**воскотопка** балауыҙ иреткес

**вощина** балауыҙ табағы *(балауыҙ заводтарында йәки оҫтаханаларында күҙәнәкләп эшләнгән яһалма кәрәҙ)*

**враги и вредители пчел** бал ҡорто дошмандары һәм ҡоротҡостары *(был төркөмгә бер күҙәнәклеләр, быуынтыҡ аяҡлылар, төрлө ҡош-ҡорт һәм кимереүселәр инә)*

**вражда маток** инә ҡорттар дошманлығы *(ғаиләлә бер генә аталанған инә ҡорт булырға тейеш, әгәр икенсе инә ҡорт килеп инһә, улар араһында үлемесле көрәш башлана)*

**вредители воска** балауыҙ ҡоротҡостары *(көйәләр, сысҡандар һәм үңәҙҙең ҡайһы бер төрҙәре инә)*

**вредители перги** һитә ҡоротҡостары *(һитә көйәһе, талпандар, сысҡандар, үңәҙ бәшмәктәре һ. б.)*

**вторак** икенсел *(бер үк ғаиләнән икенсе булып айырылған күс)*

**вшивица** *зоол*. бал ҡорто бете

**вывод маток** инә ҡорт үрсетеү *(инә ҡортто бер нисә ысул менән үрсетергә була: йомортҡанан, ҡарышлауыҡтарҙан)*

**вывозка пчел на взяток** бал ҡорттарын йыйымға сығарыу

**выделение нектара** *бот.* тат бүленеү *(татлыҡтағы махсус биҙҙәр тарафынан шәрбәтле һуттың бүленеүе)*

**выкачивание меда** бал һурҙырыу

**выкучивание пчел** ҡорттарҙың уҡмашауы *(урындың тығыҙ һәм ояլағы һауа температураһының юғары булыуы сәбәпле, ҡорттарҙың тәлгәш һымаҡ уҡмашып асылынып тороуы)*

**выращивание расплода** үрсем үҫтереү *(үрсем үҫтереү ҡыш сыҡҡан күстәргә йәш ҡорттарҙы ҡушып ишәйтеү ниәтендә башҡарыла)*

**вырезка маточника** инә ҡорт көбөһөн киҫеп алыу

**выслушивание пчелиных семей** ҡорт ғаиләләрен тыңлау *(ҡышын ҡорттарҙың хәлен тыңлап беләләр: тигеҙ генә геүләһәләр, хәлдәре һәйбәт булыуын, ә ҡыштырҙаған тауыш сығарһалар, аҙыҡ бөтөүен аңлата)*

**высокопродуктивная пчелосемья** продуктлылығы юғары ҡорт ғаиләһе

**высота полета пчел** ҡорттарҙың осоу бейеклеге *(осоу бейеклеге урындағы рельефҡа бәйле: сәскәле урындарҙы шәйләп алғас та, улар билдәле бер трасса буйынса сама менән 10 м бейеклегендә осалар)*

**выставка пчел** ҡорттарҙы ҡышлау урынынан умарталыҡҡа сығарыу *(ҡар ирер бөтөп, тәүге яҙғы сәскәләр күренә башлау менән умарталар тышҡа сығарыла: умарталыҡ таҙартыла, умарталар өсөн ҡаҙыҡтар ҡағыла, һыу эсергә һуғарғыстар әҙерләнә)*

**вытапливание воска** балауыҙ иретеү

**выход матки** инә ҡорттоң осоп сығыуы *(аталаныу өсөн инә ҡорттоң умартанан осоп сығыуы)*

**выход роя** күстең айырылып сығыуы

**вяз** *бот.* ҡарама *(ҡылалар ғаиләһенә ингән оҙонсараҡ япраҡлы, йәйенке ботаҡлы, ҡубырсып торған ҡытыршы*

*ҡабыҡлы эре ағас; бал ҡорттары уның татын, һеркәһен һәм елемен яратып йыя; шәкәрлелеге 50—70 кг/га)*

**вязкость меда** балдың ҡуйы булып һуҙылып тороуы *(был сифат балдың химик составына, ундағы һыу миҡдарына һәм температураға бәйле)*

## Г

**ганглин** ганглин *(үҙәк нервы системаһындағы нервы төйөндәре)*

**гафниоз пчел** *вет.* ҡорттар гафниозы *(өлкән ҡорттарҙа була торған йоғошло эс китеү ауырыуы)*

**гельминтозы** *вет.* гельминтоздар *(йоғошло ауырыу)*

**гемолимфа** гемолимфа *(бал ҡорто тәнендәге ҡан һәм лимфа функцияларын берҙәй башҡарған туҡыма шыйыҡсаһы)*

**генетика** генетика

**генотип** генотип *(бал ҡортоноң ниндәйҙер бер сифатын билдәләй торған күрһәткес: продуктлылығы, ғаиләнең көслө булыуы; үрсемдең сифаты инә һәм ата ҡорт генотиптары менән билдәләнә)*

**генофонд** генофонд *(эволюция барышында формалашҡан бер популяцияларғы гендар: йәшәү шарттарының төрлөсә булыуы бал ҡорттарының тоҡомдарын ишәйтә; һәр тоҡомдоң үҙенә генә хас сифаты һәм үҙенсәлеге барлыҡҡа килә)*

**гетерозис** гетерозис *(инә ҡорттоң генетик яҡтан икенсе тоҡом менән парлашыуы һөҙөмтәһендә продуктлылыҡтың артыуы)*

**гибриды** гибридтар *(генетик яҡтан төрлө тоҡом ҡорттарының парлашыуынан барлыҡҡа килгән яңы нәҫел)*

**гигиена пчеловода** умартасы гигиенаһы *(эш урынында санитария һәм гигиена нормаларының һаҡланыуы)*

**гигрометр** гигрометр *(һауаның дымлылығын үлсәй торған прибор)*

**гигроскопичность меда** балдың гигроскопик үҙенсәлеге *(балдың дым тартыу үҙенсәлеге ундағы фруктозаның күләменә бәйле; балдағы һыу миҡдары һауа дымлылығына тигеҙ)*

**гидрофильные растения** *бот.* гидрофиль үҫемлектәр *(һыу ярҙамында һеркәләнә торған һыу үҫемлектәре)*

**гинандроморфизм** гинандроморфизм *(бал ҡортоноң ике енесле булыу күренеше)*

**гипоплазия** гипоплазия *(ҡайһы бер ағза күҙәнәктәренең үҫешеп етмәүе)*

**главный медосбор** төп йыйым *(балдың йәйге айҙарҙа йыйылған тулы миҡдары)*

**глаза простые** *анат.* ябай күҙҙәр *(ябай күҙҙәре ярҙамында бал ҡорто яҡын аралағы нәмәләрҙе танып белә, үҙенә кәрәк йүнәлеште билдәләй, шулай уҡ был күҙҙәр таң атыуы, ҡараңғы төшөүе хаҡында сигнал бирә)*

**глаза пчелы** *анат.* бал ҡорто күҙҙәре *(бал ҡортоноң күреү ағзаһы бишәү: икәүһе — ҡатмарлы, өсәүһе — ябай күҙҙәр)*

**глаза сложные** *анат.* ҡатмарлы күҙҙәр *(ҡатмарлы күҙҙәре ярҙамында бал ҡорто алыҫта урынлашҡан нәмәләрҙе танып белә)*

**гнездо пчел** бал ҡорттары ояһы *(бал ҡорто ғаиләһенең ояһы вертикаль рәүештә урынлашҡан күсермәле рамдарҙағы балауыҙ кәрәҙенән тора; үрсемде үҫтереү бал һәм һитә йыйып, уны һаҡлау өсөн кәрәк; улар кейәгә ҡарата ҡабырғаһы менән урынлаштырыла; кәрәҙҙәр араһында йөрөү өсөн «урамдар» ҡалдырыла; уларҙың киңлеге 12–13 мм тәшкил итә)*

**гнилушка** сөрөк *(умарта ҡарағанда төтәткескә һалып яндыра торған серек ағас)*

**голова пчелы** *анат.* бал ҡорто башы *(бал ҡортоноң кәүҙәһе баштан, күкрәктән һәм ҡорһаҡ өлөшөнән тора. Инә ҡорттоң башы — түңәрәк, ә эшсе ҡорттоҡо өсмөйөш рәүешендә була. Баш өлөшөндә — баш мейеһе, биш күҙе, һиҙеү*

*һәм тойоу ағзаһы булған мыйыҡсалары, шулай уҡ өҫкө яңаҡ менән мороно урынлашҡан)*

**голубика** *бот.* көртмәле, ҡара көртмәле *(йылтыр ваҡ япраҡлы, алһыу сәскәле, ҡыҫҡа һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек; шәкәрлелеге 25 кг/га)*

**горбатый расплод** бөкрө үрсем *(енес ағзалары үҫеп етмәгән ҡорттарҙың йомортҡаһынан яралған зәғиф үрсем)*

**горизонтальные улья** горизонталь ятмалы умарталар

**горошек мышиный** *бот.* сысҡан кәрешкәһе *(нәҙек оҙон тарбаҡ һабаҡлы, ваҡ ҡына теҙмә япраҡлы, бөрөлөп торған ваҡ күк сәскәле, ҡара борсаҡлы, кәрешкә һымаҡ үлән; шәкәрлелеге 20–30 кг/га)*

**государственные пасеки** дәүләт умарталыҡтары

**градер** градер *(балдың төҫөн билдәләй торған прибор)*

**гречиха** *бот.* ҡарабойҙай *(ал, аҡ сәскәле, өсҡырланып торған ҡорән орлоҡло бер йыллыҡ иген үҫемлеге; вегетация осоро 70–90 көн; шәкәрлелеге 100–200 кг/га)*

**гречишный мед** ҡарабойҙай балы

**грудь пчелы** *анат.* бал ҡорто күкрәге *(ҡорт күкрәге дүрт быуынтыҡтан тора; тәүге өс быуынтыҡтың аҫ яғында – өс пар аяғы, ә ике пар ҡанаты икенсе һәм өсөнсө быуынтыҡтарының өҫтөндә урынлашҡан)*




**дадан** дадан, дадан умарта *(таҡтанан яһалған бер корпуслы, 12 рамлы дүрткел умарта. Американың күренекле ҡортсоһо Дадан Шарль хөрмәтенә уның исеме менән йөрөтөлә)*

**дальневосточная пчела** Алыҫ Көнсығыш ҡорто *(Рәсәй урта һыҙаты тоҡомло ҡорттарҙан таралып, хәҙерге көндә*

*Хабаровск крайында йәшәгән, ҡырыҫ климатҡа сыҙамлы һәм төрлө ауырыуҙарға бирешеп бармаған бал ҡорто)*

**дальность полета пчелы** ҡорттоң осоу алыҫлығы *(умартанан алып сәскәлеккә тиклемге арауыҡ; бал ҡортоноң осоу радиусы 2 км самаһы)*

**двудомные растения** *бот.* ике өйлө үҫемлектәр *(береһендә һеркәһе, икенсеһендә емшәне булған үҫемлектәр: өйәңке, ҡуҙғалаҡ, кесерткән, тирәк һ. б.)*

**двухкорпусное содержание пчел** ҡорттарҙы ике корпуслы умартала аҫрау

**двухкорпусный улей** ике корпуслы умарта

**двухкратная смена маток** инә ҡортто ике тапҡыр алмаштырыу *(саф тоҡомло ҡорттар үрсетеүҙә ҡулланылған ысул)*

**двухматочное содержание пчел** ике инәле ҡорт аҫрау

**дегистационный калориметр** дегистация калориметры *(тоҫонә, еҫенә, тәменә һ. б. ҡарап есемдең сифатын билдәләй торған прибор)*

**дезакаризация** дезакаризация *(талпандарҙы ағыулап ҡырыу саралары)*

**дезинсекция** дезинсекция *(махсус препараттар ярҙамында зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөү сараһы)*

**дезинфекция** дезинфекция *(йоғошло микробтарҙы махсус саралар ярҙамында бөтөрөү юлы)*

**дезинфицирующие вещества** дезинфекциялай торған матдәләр *(һәр төрлө зарарлы микроорганизмдарҙы, паразит бөжәктәрҙе бөтөрә торған химик матдәләр)*

**дезодорация** дезодорация *(төрлө химик матдәләр ярҙамында насар еҫтәрҙе бөтөрөү сараһы)*

**дератизация** дератизация *(зарарлы кимереүселәрҙе бөтөрөү өсөн үткәрелгән саралар)*

**диагностика болезней пчел** ҡорт ауырыуҙары диагностикаһы (*ауырыуҙарҙы билдәләү, дөрөҫ диагноз ҡуйыу алымдары һәм принциптары хаҡындағы ғилем)*

**дизентерия пчел** ҡорттарҙың эс китеүе *(сифатһыҙ аҙыҡтан була торған эсәк ауырыуы)*

**дикие пчелы** ҡырағай ҡорттар *(тәбиғи шарттарға яраҡлашып йәшәгән ҡорттар)*

**длина хоботка рабочей пчелы** эшсе ҡорттоң морон оҙонлоғо *(ҡорттарҙың тоҡомон билдәләй торған күрһәткес; иң оҙон моронлоларға Рәсәйҙең урта һыҙаты һәм Кавказдағы һоро төҫтәге тау ҡорттары инә; уларҙың мороно 5,9–6,3 һәм 6,7–7,2 мм-ға етә)*

**длинные маточники** *вет.* оҙонайған инә көбөләре *(яҙ аҙағында була торған ауырыу: инә көбөләре саманан тыш оҙонайып китә, ҡарышлауыҡтары ҡурсаҡҡа әйләнә алмай үлемгә дусар була)*

**дневник контрольного улья** контроль умарта көндәлеге

**дневник пасеки** умарталыҡ көндәлеге *(контроль умарта хаҡындағы мәғлүмәттәрҙе, һауа торошон, иртәле-кисле булған һауа температураһын, ҡорттарҙың ҡылығын, осошон, хәлен көн һайын теркәп барған яҙыу)*

**дно улья** умарта төбө

**дождемер** яуым-төшөм үлсәгесе

**дозревание меда** балдың өлгөрөп етеүе

**дом пасечный** умартасы өйө

**донник** *бот.* ҡандала үләне *(өсәре-өсәре бер һуҡтаға урынлашҡан ваҡ ҡына киртләс япраҡлы, һабаҡ буйлап сыҡҡан аҡ, һары төҫтәге ваҡ сәскәле хуш еҫле үлән; бал ҡорттары татын, һеркәһен яратып йыя; шәкәрлелеге 150–200 кг/га)*

**дрессировка пчел** бал ҡорттарын өйрәтеү *(таты менән үҙенә тартып тормаған үҫемлектәрҙе һеркәләндереү һәм уларҙың балын йыйыу өсөн ҡорттарҙың эшмәкәрлеген яһалма рәүештә көсәйтеү)*

**дрожжи меда** бал әсеткеһе *(тат менән бергә балға һауанан 25-кә яҡын әсетке килеп ҡушыла; һауа температураһы 14–20°С булғанда уның һәм ул бүлеп сығарған ферменттарҙың бал өсөн зыяны булмай)*

**дуб** *бот.* имән *(бук ағастары ғаиләһенә ингән киртләс эре япраҡлы, сәтләүеге булған ҡаты ағас; бал ҡорттары*

*уның һеркәһен, йәйгә сыҡҡас япрағы бүлеп сығарған шәрбәтле шыйыҡсаһын һәм татлы ысығын яратып йыя)*

**дуплянка** түмәр умарта

**душица обыкновенная** *бот.* мәтрүшкә *(ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ингән хуш еҫле, алһыу күк төҫтәге, өйкөм сәскәле күп йыллыҡ ялан үләне; шәкәрлелеге 100 кг/га)*

**дымарь** төтәткес *(ҡорт ҡарағанда төтөн өрҙөрә торған умарта ҡорамалы)*

**дымарь лечебный** дауалау төтәткесе *(ауырыған ҡорттарҙы кәрәкле препараттар төтөнө менән дауалау өсөн тәғәйенләнгән төтәткес)*

**дыхальца** *анат.* тын алғыстар *(һулыш ала һәм һауалағы саңды тотоп ҡала торған ваҡ ҡына тишектәр; бал ҡорттарының 10 пар тын алғысы бар; өс пары — күкрәгендә, ете пары ҡорһағында урынлашҡан)*

**дыхание пчелы** бал ҡортоноң тын алыуы *(бал ҡорто тын алғыстар ярҙамында тыныс хәлендә минутына 40 тапҡыр, осоп килгәндән һуң 120–150 тапҡыр тын ала; тыныс хәлдә 25 $мм^3$, осҡанда 460 $мм^3$ кислород сарыф итә)*

**дыхательный аппарат пчелы** *анат.* бал ҡортоноң тын алыу ағзалары *(ул өс өлөштән: боғарлаҡтан, һауа тоҡсайҙарынан һәм тын алғыстарҙан тора)*

**дягиль лекарственный** *бот.* шыма көпшә (*дымлы ерҙә үҫә торған үҫемлек; бал ҡорто татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 200 кг/га*)

## Е

**европейский гнилец** *вет.* Европа сереге *(стрептококк плютон һ. б. микробтарҙан таралған йоғошло ауырыу)*

**ежевика сизая** *бот.* ҡара бөрлөгән *(роза сәскәләләр ғаиләһенә ингән сәнскәкле үрмә һабаҡлы үҫемлек; шәкәрлелеге 20–25 кг/га)*

**естественная смена маток** инәнең тәбиғи алмашыныуы *(инә ҡорт өс осраҡта алмаштырыла: ғаилә күс айырырға әҙерләнгәндә, инә ҡапыл һәләк булғанда һәм ҡартайып йәки ауырып йомортҡа һалмай башлағанда)*

**естественные медоносные угодья** баллы үҫемлектәр үҫкән урындар

# Ж

**жалить** сағыу

**жало** *анат.* ҡаяу *(ҡорһаҡ аҫтының һуңғы быуынтығында урынлашҡан был ағза фәҡәт инә ҡорт менән эшсе ҡортта ғына була)*

**жалоносный аппарат пчелы** *анат.* ҡорттоң саҡҡыс ағзалары *(ҡаяу менән ағыу бүлеүсе ике биҙҙән торған был ағза инә ҡорт менән эшсе ҡортта ғына була)*

**жвалы, верхние челюсти** *анат.* сәйнәүестәр, өҫкө яңаҡтар *(был ағзалар ярҙамында ул күҙәнәктең өҫкө япмаһын кимерә, балауыҙ менән һитәне ышҡып йомшарта)*

**железы пчелы** *анат.* ҡорт биҙҙәре *(бер нисә төрө бар: токөрөк биҙҙәре, балауыҙ биҙҙәре, ағыу биҙҙәре, еҫ биҙҙәре һ. б.; ә эшсе ҡорттарҙа: өҫкө яңаҡ биҙҙәре, йотҡолоҡ биҙҙәре, елкә биҙҙәре һәм түш биҙҙәре)*

**жесткая вода** ҡаты һыу *(составында кальций, магний тоҙҙары булған һыу; балауыҙ сеймалын эшкәрткәндә фәҡәт йомшаҡ һыу ҡулланыла)*

**живая изгородь пасеки** йәшел кәртә *(умарталыҡты уратып алған саған, йүкә, акация, әлморон һ. б. ағастар; ел-дауылдан һаҡлау менән бергә өҫтәмә азыҡ базаһы булып та хеҙмәт итә)*

**живокость, шпорник** *бот.* таҡыябаш *(лютиктар ғаиләһенә ингән күгелйем алһыу сәскәле болон үләне; бал ҡорттары татыл да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**жизнеспособность яиц, личинок** йомортҡаның, ҡарышлауыҡтың йәшәү һәләтлелеге *(йомортҡа һәм ҡарышлауыҡ ғаиләнән башҡа өс көндән ары йәшәй алмай)*

**жимолость обыкновенная** *бот.* айыу баланы *(ҡыҙыл сәскәле, ваҡ ҡына ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары татыл да, һеркәһен дә яратып йыя, шәкәрлелеге 27–35 кг/га)*

**жировое тело** *анат.* майлы есем *(бал ҡортоноң эсәге эргәһендәге ныҡ үҫешкән кәүшәк туҡыма)*

## З

**заболевание пчел** бал ҡорто ауырыуҙары

**завод пчеловодного инвентаря** умартасылыҡ ҡорамалдары заводы

**задвижка летковая** кейә биге *(умартаның ҡорт инеп-сығып йөрөгән еген яба торған бик)*

**заднее крыло** *анат.* артҡы ҡанат *(күкрәк өҫтөндә урынлашҡан ике пар ҡанаттың арттағы икенсе пары)*

**задние ножки пчелы** *анат.* ҡорттоң артҡы аяҡтары *(күкрәк аҫтында урынлашҡан өс пар аяҡтың һеркә тултырыу өсөн ҡатлансығы булған иң арттағы өсөнсө пары)*

**задняя грудь пчелы** *анат.* ҡорттоң артҡы күкрәге *(дүрт сегменттан торған ҡорт күкрәгенең һуңғы артҡы быуынтығы)*

**закисание меда** балдың әсеүе

**закуривание пчел** ҡорттарҙы төтәҫләү *(ауырыу күстәрҙе көкөртлө газ, формалин һәм башҡа шуның һымаҡ препараттар ҡушып төтәҫләү)*

**залет пчел** ҡорттарҙың аҙашыуы

**замазка для ульев, шпаклевка** умарта замазкаһы

**замена кормового меда на сахарный сироп** аҙыҡ балын шәкәр иретмәһенә алмаштырыу *(ҡышҡы аҙыҡ япраҡ балынан йәки тиҙ ҡомоғоусан балдан торһа, уны шәкәр иретмәһенә алмаштыралар)*

**заменители естественных кормов** тәбиғи аҙыҡ алмаштырғыстар *(балды шәкәр иретмәһе, шәкәр-бал ҡамыры, составында шәкәр пудраһы һәм һеркәләр булған шәкәрле-аҡһымлы аҙыҡтар менән алмаштыралар; тәбиғи аҙыкты алмаштыра алырлыҡ аҙыҡтар менән бер рәттән саған, ҡайын, ҡарбуз, йөҙөм һутын да ҡулланырға була, әммә улар ҡышҡы аҙыҡҡа бармай)*

**заменители перги** һитә алмаштырғыстар *(һитәне икмәк сүпрәһе, айыртылған һөт, соя оно һ. б. нәмәләр менән алмаштырырға була; йәттә лә өҫтәмә аҙыҡ рәүешендә ҡулланыла)*

**заменители пыльцы** һеркә алмаштырғыстар

**занос** һырынты *(кәрәҙҙең кейәгә, йәғни умартаның алғы стенаһына, ҡарата урынлашыу рәүеше)*

**занос теплый** йылы һырынты *(кәрәҙҙе кейәгә, йәғни умартаның алғы стенаһына, ҡарата яҫы яғы менән урынлаштырыу; тәбиғи шарттарҙа көсһөҙ күстәрҙең кәрәҙҙәре ошо рәүешле урынлаша: бындай ояларҙа йылылыҡ оҙаҡ һаҡлана)*

**занос холодный** һыуыҡ һырынты *(кәрәҙҙе кейәгә, йәғни умартаның алғы стенаһына ҡарата ҡабырға яғы менән урынлаштырыу; тәбиғи шарттарҙа көслө күстәрҙең кәрәҙҙәре ошолай урынлаша: бындай ояларҙа һауа даими рәүештә алышынып тора)*

**запаривание пчел** ҡорттарҙың бешегеүе *(ҡорттарҙың умарталағы эҫелеккә һәм дымға түҙә алмай күпләп ҡырылыуы)*

**запечатанный расплод** мисәтләнгән үрсем *(өҫтө йоҡа ҡына менән мисәтләнгән эшсе һәм ата ҡорт ҡарышлауығы менән ҡурсағы)*

**заповедники** ҡурсаулыҡтар *(урындағы ҡорттарҙы һаҡлау, өйрәнеү һәм үрсетеү урыны; тәүге ҡортсолоҡ ҡурсау-*

*лығы Рәсәйҙә 1958 йылда төҙөлә, артабан ул Башҡорт дәүләт ҡурсаулығының Ағиҙел буйы филиалына әйләнеп, 1986 йылдан үҙ аллы «Шүлгәнташ» ҡурсаулығы тип атала башлай)*

**заразные болезни пчел** ҡорттарҙың йоғошло ауыырыуҙары

**зародышевые кристаллы** бәбәк кристалдар *(балды ҡомоҡтора торған глюкоза кристалы; ул тат менән бергә килеп эләгә, артабан күпләп хасил була башлай)*

**застуженная матка** һыуыҡ тейгән инә ҡорт *(ныҡ өшөүҙән йомортҡа һалмай башлаған инә ҡорт)*

**застуженный расплод** һыуыҡ тейгән үрсем *(иртә яҙын һыуыҡҡа бирешеп үлгән үрсем)*

**затенение ульев** умарталарҙы ышыҡлау *(умарталарҙы ҡояш нурҙарынан һаҡлау өсөн ышыҡ ергә урынлаштырыу)*

**зверобой** *бот.* һары мәтрүшкә *(ваҡ һары сәскәле күп йыллыҡ үлән; бал ҡорттары татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**земляника** *бот.* ҡайын еләге *(роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән өсәр япраҡлы, тәпәшәк һабаҡлы, аҡ сәскәле, алһыу төҫтәге хуш еҫле еләге булған күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**зеркальце** *анат.* көҙгө *(ҡорт ҡорһағының төкһөҙ шыма өлөшө)*

**зимне-весенние запасы корма** ҡышҡы-яҙғы аҙыҡ һаҡлығы *(ҡышҡы-яҙғы айҙарҙа ҡорттар өсөн кәрәк булған аҙыҡ: бер ғаилә ҡышҡы осорҙа уртаса 5—9 кг бал тотона)*

**зимне-весенняя гибель пчел** ҡорттарҙың ҡышлы-яҙлы һәләк булыуы *(ҡартайып көсһөҙләнеүҙән, төрлө ауыырыуҙарҙан, ҡоротҡос бөжәктәрҙең зыян итеүенән, тейешле шарттарҙың булмауынан ҡорттарҙың күпләп ҡырылыуы)*

**зимние работы** ҡышҡы эштәр *(ҡыштың тәүге яртыһында баҙҙағы ҡорттарҙың хәле айына 2—3 тапҡыр, икенсе яртыһында аҙнаһына 1—2 тапҡыр тикшерелә һәм махсус журналға теркәлә)*

**зимовка пчел** ҡорттарҙың ҡышлауы *(ҡышын ҡорттар төрлө физиологик үҙгәрештәр кисерә: ағзаларында май матдәһе күбәйә, һыуы кәмей, матдәләр алмашыныуы әкренәйә, аҙыҡ аҙ тотонола; оялағы йылылыҡ 10°С-ҡа еткәс, улар йомғаҡ булып бер ергә уҡмаша башлай)*

**зимовник** ҡорт баҙы *(ҡышын умарта ҡуя торған махсус урын; унда һауаның уртаса йылылығы 0–4°С, дымлылығы 80–85% булырға тейеш; ҙурлығы умарталар һанына ҡарап билдәләнә)*

**зимостойкость пчел** ҡорттарҙың ҡышҡа сыҙамлылығы *(ҡорттарҙың ҡырыҫ климат шарттарына ирешмәүе: тоҡомдан тоҡомға күскән был сифат тотолған аҙыҡ миҡдары, үлгән ҡорттар һаны менән яҙғыһын билдәләнә)*

**золототысячник** *бот.* һарыгүҙ *(ҡатмарлы сәскәләләр ғаиләһенә ингән алһыу сәскәле, һары һеркәле дарыу үләне; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**зольность меда** балдың көллөлөгө *(составында калий, натрий, магний, тимер, фосфор һәм башҡа минераль матдәләр барлығын билдәләй торған күрһәткес)*

**зона чистопородного разведения** саф тоҡом үрсетеү зонаһы

**зоогигиена** зоогигиена *(йәшәү шарттарының мал-тыуар, ҡош-ҡорт, бал ҡорттары һаулығына һәм продуктлылығына йоғонтоһон өйрәнгән ғилем)*

**зоотехник по пчеловодству** ҡортсолоҡ зоотехнигы

**зрелость меда** балдың өлгөрөүе *(кәрәҙҙәге балдың йоҡа ғына балауыҙ, йәғни ҡына, менән ҡапланыуы; өлгөргән балда һыу миҡдары 17–21% була)*

**зрелый расплод** өлгөргән үрсем *(мисәтләнгән үрсемдәрҙең ҡурсаҡтан ҡорт булып өлгөргән һуңғы үҫеш стадияһы)*

# И

**ива** *бот.* тал *(һыу буйында үҫә торған оҙон япраҡлы, көсөк сәскәле ҡыуаҡ ағас; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя, шәкәрлелеге 60–70 кг/га)*

**игра пчел** ҡорттарҙың уйнауы *(ҡорттарҙың күс айырыр алдынан ҡоторап осоуы )*

**известковая вода** эзбизле һыу *(бал составындағы татлылыҡты билдәләгәндә файҙаланыла)*

**известковый расплод** *вет.* эзбизләнгән үрсем; *то же, что* **аскосфероз**

**изгнание трутней** ата ҡорттарҙы умартанан ҡыуып сығарыу (*ҡорттарҙың ҡышҡылыҡҡа әҙерләнеүе ата ҡорттарҙы ҡыуыуҙан башлана: ата ҡорттар ҙур һәм көслө булыуҙарына ҡарамаҫтан, ҡаяуҙары булмау сәбәпле, эшсе ҡорттарға ҡаршы тора алмай*)

**изготовление ульев** умарта яһау

**изделия из меда** бал ҡушып яһалған әйберҙәр *(бал төрлө тәм-томдар, татлы ҡамыр аштары, һыуһын ҡандырғыс эсемлектәр, биҙәнеү-төҙәнеү нәмәләре әҙерләүҙә файҙаланыла)*

**изолятор для цветков** сәскә бөркәгес *(теге йәки был үҫемлектең тат миҡдарын билдәләгәндә ҡорт ҡунмаһын өсөн сәскәгә яба торған 35х40 см күләмендәге марля тоҡсай)*

**изолятор матки** инә ҡорт изоляторы *(инә ҡортто ваҡытлыса айырып тотоу өсөн файҙаланылған 1–2 рам һыйҙырышлы ҡулайлама)*

**изоляция лета маток и трутней** инә һәм ата ҡорт осоштарын сикләү *(был ысул ҡорттарҙың парлашыуын күҙәтеү өсөн башҡарыла)*

**изроившаяся семья** күс айырған ғаилә *(бер нисә күс айырған ғаилә нык көсһеҙләнә, ҡышҡылыҡ аҙыҡ етмәү сәбәпле һәләк булыуы ла ихтимал)*

**иммунитет** иммунитет *(организмдың йоғошло ауырыуҙарға бирешмәүе)*

**инбридинг** инбридинг *(ҡәрҙәш тоҡомдағы корттарҙың парлашыуы; был күренеш уларҙың продуктлылығын кәметә, ҡайһы бер яҡшы сифаттарының юғалыуына килтерә)*

**инвазионные болезни пчел** ҡорттарҙың йоғошло ауырыуҙары *(гельминттар һәм ҡайһы бер быуынтыҡ аяҡлыларҙан таралған йоғошло ауырыуҙар: нозематоз, акарапидоз, варроатоз, браулез, мелеоз, амебиоз һ. б.)*

**инвентарь пчеловодный** умартасылыҡ ҡорамалдары *(ҡортсолоҡта кәрәк булған нәмәләр: халат, комбинезон, битлек, төтәткес, бағау, ҡасау, түңәрәк йышҡы, бысаҡ, күҙлек, моҙға һ. б.)*

**инкубация маточников, пчелиного расплода** инә көбөләрен, үрсемдәрҙе инкубаторҙа үрсетеү *(инә ҡорттарҙы күпләп үрсетеү өсөн инә көбөләрен даими йылылығы 34–35°С, дымлылығы 70% булған инкубаторға урынлаштыралар)*

**инстинкт** инстинкт *(бал ҡортона хас инстинкттар: аҙыҡ йыйыу, һаҡланыу, ояһына ҡайта алыу, инә ҡорт тәрбиәләү, күс айырыу һ. б.)*

**интенсификация в пчеловодстве** ҡортсолоҡто көсәйтеү *(тоҡомдо яҡшыртыу, аҙыҡ базаһын нығытыу, яңы технология ҡулланыу һәм башҡа шуның һымаҡ саралар ярҙамында умартасылыҡтың үҫешен тиҙләтеү)*

**инфекционные болезни пчел** ҡорттарҙың йоғошло ауырыуҙары *(Америка серегe, Европа серегe, ҡапсыҡлы үрсем, эҙбизләнгән үрсем, паратиф һ. б.)*

**искусственное размножение пчелиных семей** ҡорт ғаиләләрен яһалма үрсетеү *(яһалма күс үрсетеү өсөн иң яҡшы ғаиләнән үрсем һәм бер ни тиклем ҡорт һайлап алып, инә менән ҡушалар)*

**искусственный вывод маток** инә ҡорттарҙы яһалма үрсетеү *(инә көбөләрен һаҡлыҡ менән киҫеп алып, ситлеккә урынлаштыралар; ситлеккә бер аҙ бал һәм 5–6 эшсе ҡорт*

*ебәрәләр, артабан улар сығып килгән инә ҡортто ҡаршы алалар, ашатып тәрбиәләйҙәр)*

**искусственный мед** яһалма бал *(ҡамыш шәкәрен һыуҙа химик юл менән тарҡатып алына; уға тәмләткестәр ҡушыла, төрлө хуш еҫтәр өҫтәлә)*

**использование воска в народном хозяйстве** балауыҙҙың халыҡ хужалығындағы ҡулланылышы *(балауыҙҙың 75—80%-ы кәрәҙ яһауға китһә, ҡалған 20—25%-ы медицинала, парфюмерияла һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә файҙаланыла)*

**использование корма** аҙыҡ тотоноу *(аҙыҡ миҙгелгә ҡарап, йыл әйләнәһенә төрлө кимәлдә тотонола: бер ғаилә йылына уртаса 90 кг-ға тиклем бал, 25—30 кг һитә тотона; үрсем ишәйгәндә, бал йыйыу осоронда аҙыҡҡа күп көс төшә: был осорҙа 30—40 кг бал сарыф ителә, ә ҡышын сама менән яҡынса 10—15 кг бал китә; әммә ҡышҡылыҡҡа аҙыҡты 20—25 кг ҡалдырыу мотлаҡ)*

**итальянские пчелы** итальян ҡорттары *(Италияла, Канадала, Америкала һәм башҡа илдәрҙә йәшәгән алтын һары төҫтәге эре бал ҡорто: был тоҡом ҡышҡы ҡырыҫ климатҡа түҙемһеҙ, аҙыҡты ла күп тотоноусан)*

## К

**кабахтапинская пчела** кабахтапин ҡорттары *(Әзербайжандың таулы райондарында йәшәгән асыҡ һоро төҫтәге, оҙон моронло бал ҡорто)*

**календарь пчеловода** умартасы календары *(умарталыҡта башҡарылған эштәрҙе даими рәүештә теркәп барған умартасы яҙмаһы)*

**календарь цветения медоносов** бал биреүсе үҫемлектәрҙең сәскә атыу ваҡытын күрһәткән календарь *(иҫәп үгәй инә үләненең сәскә атыу ваҡытынан башлана: унан ҡала баллыҡай үләне — 8 көндән һуң, туҙғанаҡ — 21, сейә — 28,*

*һары селек — 30, аҡ туҡранбаш — 38, ҡурай еләге — 50, ҡандала үләне — 63, йүкә ағасы 75 көндән һуң сәскә ата)*

**калина обыкновенная** *бот.* ябай балан *(аҡ сәскәле, ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның һеркәһен яратып йыя; шәкәрлелеге 12—15 кг/га)*

**каловая нагрузка** тиҙәк миҡдары *(ҡышын ҡорт эсәгендә йыйылған тиҙәк)*

**калорийность меда** балдың калориялылығы *(бер грамм бал иҫәбенә тере организмда барлыҡҡа килгән һәм калория менән билдәләнгән энергия миҡдары)*

**каменный мед** ҡаты бал *(Абхазияның таулы райондарындағы ҡая һәм тау-таш ярыҡтарында оялаған ҡырағай ҡорт балы)*

**каменный расплод** *вет.* таш үрсем; *то же, что* **аспергиллез пчел**

**канди** канди; шәкәр-аҡһым ҡамыры *(өҫтәмә аҙыҡ өсөн балға шәкәр ҡушып яһалған ҡамыр: бер килограмм канди әҙерләү өсөн 260 г шыйыҡ бал, 740 г шәкәр оно китә)*

**кандидамикоз** *вет.* кандидамикоз *(күкрәк алды трахеяларын зарарлаусы йоғошло ауырыу)*

**карамелизация меда** балдың карамелләшеүе *(бал составындағы һыуҙың парға әйләнеп, карамеландар хасил булыуынан ундағы шәкәрҙәрҙең тарҡалыуы)*

**карантин** *вет.* карантин *(йоғошло ауырыу таралмаһын өсөн ауырыу ҡорттарҙы ваҡытлыса айырып тотоу)*

**карболовая кислота** *вет.* карбол кислотаһы *(дезинфекция яһау өсөн ҡулланылған һары төҫтәге еҫле препарат)*

**карбофос** *вет.* карбофос *(зарарлы бөжәктәрҙе бөтөрөү өсөн ҡулланылған препарат)*

**карликовость** кәрләлек *(тейешле шарттар булмау һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында бәләкәй һәм зәғиф булып ҡалыу)*

**карликовые пчелы, матки, трутни** зәғиф ҡорттар *(тейешле шарттар булмауҙан һәм башҡа сәбәптәр арҡаһында зәғиф булып үҫешкән ҡорттар)*

**карпатские пчелы** Карпат ҡорттары *(Карпаттың таулы районларында йәшәгән һоро төҫтәге, оҙон моронло ҡорт тоҡомо)*

**кипрей, иван-чай** *бот.* боланут *(оҙон һабаҡлы, ҡарағусҡыл ҡыҙыл йәки ал төҫтәге һепертке сәскәле урман үләне; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 300 кг/га)*

**кислота меда** балдағы кислота *(бал составында алма кислотаһы, глюкон, лимон, һөт, ҡырмыҫҡа, уксус кислоталары, шулай уҡ 23 төрлө ирекле аминокислота бар)*

**кислоты в подкормках** өҫтәмә аҙыҡтағы кислоталар *(өҫтәмә аҙыҡ итеп ҡулланылған шәкәр иретмәһенә лимон, уксус һәм ҡуҙғалаҡ кислотаһы ҡушыла: бер килограмм шәкәргә өс грамм кислота етә)*

**кишечные болезни** *вет.* эсәк ауырыуҙары *(бал ҡорттарында һәм уларҙың үрсемдәрендә була торған йоғошло һәм йоғошһоҙ ауырыуҙар: нозематоз, амебиоз, паратиф, критидиоз һ. б.)*

**классификация меда** балдың бүленеше *(сығышы, составы, тәме, төҫө һәм башҡа үҙсәнлектәре буйынса бер нисә төркөмгә бүлеп йөрөтөлә; географик сығышы буйынса: башҡорт балы, Алыҫ Көнсығыш балы, Алтай балы; ботаник сығышы буйынса: сәскә балы, япраҡ балы, ҡатнаш бал; эшкәртеү буйынса: кәрәҙле бал, айыртылған бал; эшкәртеү миҙгеле буйынса: яҙғы бал, йәйге бал, көҙгө бал һ. б.)*

**классификация нектароносных растений** татлы үҫемлектәрҙең бүленеше *(сәскәләге татлыҡтарҙың төҙөлөшөнә һәм уларҙың булыу-булмауҙарына ҡарап төркөмгә бүленә; татлыҡһыҙ сәскәле үҫемлектәр: йүкә ағасы, сейә, һары сейә һәм башҡалар; татлыҡлы сәскәле үҫемлектәр: ҡарабойҙай, горчица һ. б.)*

**клевер белый** *бот.* аҡ туҡранбаш *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тумалаҡ аҡ сәскәле, өсәрләп торған түңәрәк япраҡлы күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 90—100 кг/га, һеркәлелеге 26—37 кг/га)*

**клевер красный** *бот.* ҡыҙыл туҡранбаш, ялан туҡранбашы

**клей пчелиный** прополис, ҡорт елеме *(ағастың бөрөһө менән япрағынан һәм ылыҫлы ағастарҙан йыйылған ыҫмалалы есемдәрҙе эшкәртеп яһалған ҡарағусҡыл йәшкелт төҫтәге матдә; составының 55%-ын ыҫмала һәм бәлзәм, 10%-ын эфир майы, 30%-ын балауыҙ һәм 5%-ын һеркә тәшкил итә; һәр умарта миҙгеленә 100–150 г ҡорт елеме бирә ала)*

**клен** *бот.* саған *(япрағы киртләс, сәскәһе һепертке башлы, орлоғо ҡушҡанатлы булған ағас; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя, шәкәрлелеге 100–150 кг/га)*

**клеточка для пересылки маток** инә ҡортто күсереп йөрөтә торған ситлек

**клуб пчел зимний** ҡорттарҙың ҡышҡы йомғағы, күс өйөрө *(һалҡындар башланғас, умарталағы ҡорттар бер ергә уҡмашып, йомғаҡ барлыҡҡа килтерә: өҫкө өлөшө кәрәҙҙәге емдә, урта һәм түбәнге өлөшө буш кәрәҙҙә ҡала; ул тәүҙә умартаның алғы өлөшөндә, артабан яйлап уның түбәһенә һәм артҡы яғына тиклем хәрәкәт итә, сөнки был хәл кәрәҙҙәге балдың әкренләп кәмеүенә бәйләнгән; йомғаҡ уртаһында йылылыҡ 30°С самаһы, ә тирә-яғында 10°С-ан кәм булмай; ҡорттар ҡышты тыныс үткәрәләр, матдәләр алмашыныуы ла әкрен бара, аҙыҡты ла әҙ тотоналар)*

**книжный улей** китап умарта *(кәрәҙҙәре ҡуҙғалырлыҡ итеп күгән менән тоташтырылған һәм китап һымаҡ асыпябылмалы итеп эшләнгән умарта; 1789 йылда Швейцария ҡортсоһо уйлап тапҡан)*

**коготки** *анат.* тырнаҡтар *(ҡорт аяғының осонда урынлашҡан, ҡытыршы ерҙә йөрөү өсөн ҡулайлашҡан, ә шыма урындан йөрөгәндә уның йомшаҡ табандары булышлыҡ итә)*

**кокон** ҡурсаҡ көбө, ҡуҙы *(кәрәҙ күҙәнәктәре мисәтләнгәндән һуң 10–12 көн үткәс, ҡарышлауыҡтар тарафынан үреп эшләнгән көп; ҡуҙы)*

**колибактериоз пчел** *вет.* ҡорт колибактериозы *(ҡорттарҙа ҡыш аҙағында була торған йоғошло ауырыу)*

**коллоиды меда** балдағы коллоидтар *(шыйыҡ бал составындағы кристаллашмай торған матдәләр: аҡһым, балауыҙ киҫәксәләре, органик булмаған башҡа төр компоненттар)*

**колода** түмәр умарта *(түмәрҙе соҡоп яһаған умарта)*

**колокольчик** *бот.* ҡыңғырау сәскә *(ҡыңғырауға оҡшап торған күк, зәңгәр сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек; бал ҡорттары татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 17–19 кг/га)*

**конструкция ульев** умарта төҙөлөшө *(рамлы умарта ике төрлө була: вертикаль терәүле һәм горизонталь ятмалы)*

**контроль спаривания маток** инә ҡорттар парлашыуын тикшереү *(селекция эшен яҡшыртыу маҡсатында алып барыла)*

**контрольная рамка** контроль рам *(инә ҡорттоң булыу-булмауын билдәләү өсөн умартаға ҡуйылған, йәш ҡарышлауыҡтарҙан торған рам)*

**контрольный улей** контроль умарта *(көндәлек бал миҡдарын билдәләү өсөн махсус үлсәүгә урынлаштырылған умарта)*

**корзиночки** *анат.* ҡорт ҡалтаһы, кәрзинкә *(эшсе ҡорттоң арт аяғына кеҫә рәүешендә ҡатлансыҡ булып йәбешеп үҫкән ағза; ҡорт уға алғы аяҡтары менән һеркә тултыра һәм умартаға алып ҡайтып, кәрәҙ күҙәнәктәренә бушата)*

**корма пчел** бал ҡорто аҙыҡтары *(бал ҡортоноң төп аҙығы тат һәм һеркә: татты балға әйләндерәләр, ә һеркәне бал менән ҡатнаштырып, һитә яһайҙар; бал менән һитә эшсе һәм ата ҡорт ҡарышлауыҡтарының төп аҙығы, ә инә ҡорт ҡарышлауығы фәҡәт ҡорт һөтө менән туҡлана)*

**кормление пчел в улье** умартаны емләү, умартаға өҫтәмә аҙыҡ биреү

**кормовая база пчеловодства** умартасылыҡтың аҙыҡ базаһы *(бал ҡортоноң төп аҙыҡ сығанағы – баллы һәм һеркәле үҫемлектәр; аҙыҡ базаһы үҙ эсенә культуралы һәм ҡырағай*

*үҫемлектәрҙе ала; культуралы үҫемлектәргә урманда, ҡырҙа, яланда үҫкән сәскәле үләндәр ҡарай)*

**кормовые запасы** аҙыҡ һаҡлығы*(ҡорт ғаиләһенә йыл әйләнәһенә кәрәк булған аҙыҡ: бер ғаилә йылына уртаса 90 кг бал, 25 кг һитә тотона)*

**коровяк** *бот.* һыйырғойроҡ *(һары суҡ сәскәле, алмаш япраҡлы үлән; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**корпус улья** умарта корпусы *(35 мм ҡалынлығындағы таҡталарҙан төпһөҙ һәм ҡапҡасһыҙ итеп яһалған йәшник: унда умартаның ҙур рамдары менән бал ҡорттарының оялары урынлаштырыла)*

**кочевое пчеловодство** күсмә умартасылыҡ *(мул сәскәле яландарҙа· күсеп йөрөп бал йыйыу һәм культуралы үҫемлектәрҙе һеркәләндереү маҡсатында аҫралған умартасылыҡ)*

**кочевой улей** күсмә умарта *(күсмә шарттарға ҡулайлаштырылған умарта)*

**кристаллизация меда** балдың ҡомоғоуы *(күпмелер ваҡыттан һуң балдың ҡуйырып ярма хәленә инеүе: был күренеш уның химик һәм физик үҙсәнлегенә бәйле)*

**кровохлебка лекарственная** *бот.* ҡарабаш *(роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән күп йыллыҡ шифалы үлән; сәскәһе тәүҙә йәшел була, аҙаҡ ҡыҙғылт төҫкә инә; бал ҡорттары татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 48–50 кг/га)*

**крушина** *бот.* эт муйылы *(аҡ, күгелйем сәскәле, сәнскеле ҡара ҡабыҡлы, йомшаҡ ҡына ҡара емешле туғай ҡыуағы; бал ҡорттары татын да, һеркәһен дә яратып йыя)*

**крыжовник** *бот.* крыжовник *(иртә яҙын аҡ, алһыу сәскә атҡан һәм көрәнһыу йәшел төҫтәге әскелтем емеш биргән сәнскеле ҡыуаҡ; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 40–45 кг/га)*

**крымская пчела** Ҡырым ҡорто *(ҡасандыр Ҡырым татарҙары тотҡан бал ҡорто; хәҙер ул тоҡом осрамай)*

**крыша улья** умарта ҡапҡасы *(умартаны яуым-төшөмдән, һыуыҡтан һәм башҡа бәлә-ҡазаларҙан һаҡлау өсөн корпус йәки магазин өҫтөнә кейҙерелә торған яҫы таҡта)*

**куколка** ҡурсаҡ; көплө ҡорт *(үҫеш осороноң иң һуңғы мәлендә ашамай, ҡуҙғалмай, көпкә төрөнөп ятҡан бал ҡорто: ул ап-аҡ төҫтәге өлкән бал ҡортон хәтерләтә, әммә ҡанаты булмай, фәҡәт мороно һәм аяҡтары ғына формалашҡан була; ун көн эсендә эске ағзалары тамам үҫешә, ҡанаттары хасил була, кәүҙәһе ҡаты ҡатлам менән ҡаплана)*

**кукурузно-донниковая смесь** кукуруз менән ҡандала үләне ҡатышмаһы *(корттарға – бал йыйыу өсөн, мал-тыуарға йәшел аҙыҡ өсөн сәсеп үҫтерелгән кукуруз һәм ҡандала үләне сәсеүлеге; бал ҡорттары уларҙың татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 40–60 кг/га)*

**кулисы** үҫемлек һыҙаттары *( йәйге ҡоролоҡта сәсеүлекте ҡыуан елдәрҙән, ҡышҡы бурандарҙа ел-дауылдан һаҡлау, дым тотоу өсөн баҫыу буйлап ултыртылған эре һабаҡлы бейек үҫемлектәр; көнбағыш, кукуруз, горчица һымаҡ баллы үҫемлектәрҙе сәсеү ҡортсолоҡтоң аҙыҡ базаһын яҡшыртыуға ярҙам итә)*

**купажирование меда** балдарҙы ҡушып бутау *(тәмен, еҫен, төҫөн яҡшыртыу маҡсатында төрлө сорттағы балдарҙы бергә ҡушып бутау)*

**кутикула** кутикула *(корттарҙың иң тышҡы тире ҡатламы)*

## Л

**лаборатория походная по борьбе с болезнями** күсмә лаборатория *(ветеринария ҡорамалдары менән йыһазландырылған автомашинанан һәм тәжрибәле белгестәрҙән торған лаборатория)*

**лесной медосбор** урман үҫемлектәренән йыйылған бал

**лесные медоносы** урмандағы баллы үҫемлектәр *(ағастарҙан: тал, саған, йүкә, аҡ акация, уҫаҡ, ҡайын, ерек, имән һ. б.; ҡыуаҡ үҫемлектәрҙән: миләш, һары акация, ҡарағат, эт муйылы, айыу баланы һ. б,; ярым ҡыуаҡ үҫемлектәрҙән: ҡурай еләге, күк еләк, күк көртмәле, ҡыҙыл көртмәле, ҡара көртмәле һ. б.; үлән үҫемлектәрҙән: боланут, шыма көпшә, еҫле балтырған, ике япраҡлы яҙ нуры, яҙ сәскәһе, бесәй тармаһы һ. б. инә)*

**летковая задвижка** кейә шыуҙырмаһы *(кейәне кәрәгенсә асып, ябып йәки ҡыҫып тотоу өсөн шыуып йөрөмәле итеп эшләнгән ҡулайлама)*

**летная деятельность пчел** ҡорттарҙың осошо *(бал ҡорттары 3–5 көнлөк сағынан оса башлай: тәүге осоштар таҙарыныу маҡсатында башҡарыла; 5–15 көнлөк ваҡыттарынан улар бал йыйырға тотоналар; аяҙ көндәрҙә бал ҡорттары 14-әр сәғәт һауала булып, көнөнә 10–26 осош яһай һәм 0,5–1,0 г тат, йәки 100–150 мг сәскә һеркәһе ташый ала)*

**летние работы** йәйге эштәр *(йәйге осорҙа башҡарыла торған эштәргә ҡорт үрсетеү, умарталарҙы яланға күсереп йөрөтөү, даими рәүештә елләтеү, ҡоротҡостар менән көрәшеү, бал айырыу һ. б. инә)*

**летные пчелы** осар ҡорттар *(осар ҡорттарға күҙәнәктән сығып, умартала бер ни тиклем ныңынған һәр бер ҡорт һәм бигерәк тә эшсе ҡорттар инә; уларҙың ғүмер оҙонлоғо 2 айҙан да артмай, ҡайһы саҡта 6 аҙна ғына йәшәгәндәре лә бар)*

**летный аппарат пчел** ҡорттарҙың осоу ағзалары *(бал ҡорттарының осоу ағзалары күкрәк мускулдары ярҙамында хәрәкәтләнгән ике пар ҡанаттан тора: ул секундына 400 тапҡыр ҡаға; эшсе ҡорттар йөкһөҙ саҡта сәғәтенә 60–65 км, ә йөк менән 20–30 км-ға тиклем, ҡорт күсе 20–25 км-ға тиклем осоп китә ала)*

**летняя гибель пчел** ҡорттарҙың йәйен ҡырылыуы *(йәйге осорҙа ҡорттар ҡартайып, шулай уҡ йыртҡыс бөжәктәр, ҡош-ҡорттар тарафынан һәләк була)*

**леток** кейә *(бал ҡорттары инеп-сығып йөрөһөн өсөн, шулай уҡ умартаны елләтеү, уны ваҡ-тойаҡ сүп-сарҙан таҙартыу маҡсатында ҡалдырылған ек)*

**лечебные препараты воска** балауыҙлы дауалау препараттары *(дауалау пластырҙары, ыуына торған майҙар, витаминлы кәнфиттәр, шулай уҡ косметик кремдар, ирен буяғыстар, дезодоранттар яһауҙа ҡулланыла)*

**лечебные препараты маточного молочка** инә ҡорт һөтөнән яһалған дауалау препараттары *(неврастения, аҙ ҡанлылыҡ, ҡурылдай быумаһын дауалауҙа, косметик кремдар, лосьондар яһауҙа файҙаланыла)*

**лечебные препараты меда** баллы дауалау препараттары *(халыҡ медицинаһында төрлө ауырыуҙарҙы дауалауҙа киң ҡулланыла)*

**лечебные препараты прополиса** ҡорт елеме ҡушып яһалған препараттар *(тамаҡ, бронхит, тире ауырыуҙарын дауалауҙа киң файҙаланыла)*

**лечебные препараты пчелиного яда** ҡорт ағыуы ҡушып яһалған препараттар *(быуындар һыҙлағанда, невралгияла киң ҡулланыла)*

**лечебные препараты пчелиных обножек** ҡорт йәттәһе ҡушып яһалған препараттар *(ашҡаҙан, бауыр, йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы ауырыуҙарын дауалауҙа, косметик препараттар яһауҙа файҙаланыла)*

**лечебные свойства воска** балауыҙҙың дауалау үҙенсәлектәре *(әүәлдән уны төрлө шештәрҙе, йәрәхәттәрҙе дауалауҙа, дауалау шәмдәре, ыуына торған майҙар, пластырҙар, кремдар яһауҙа файҙаланғандар)*

**лечебные свойства маточного молочка** инә ҡорт һөтөнөң дауалау үҙсәнлеге *(матдәләр алмашыныуын яҡшырта, үҙәк һәм периферия нервы системаһын стимуллай, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡан баҫымын нормаллаштерә, күреү, ишетеү, хәтерләү һәләтен нығыта)*

**лечебные свойства меда** балдың дауалау үҙсәнлеге *(йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы тонусын күтәрә, организмдың инфекцияларға ҡаршы тороусанлығын арттыра;*

*төрлө йәрәхәттәрҙе уңалта, ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлеген яҡшырта, матдәләр алмашыныуын нормалләштерә, тире, күҙ ауырыуҙарын дауалай)*

**лечебные свойства прополиса** ҡорт елеменең дауалау үҙсәнлеге *(туберкулезды, тын юлдарын, тире ауырыуҙарын дауалауҙа киң ҡулланыла)*

**лечебные свойства пчелиного яда** ҡорт ағыуының дауалау үҙсәнлеге *(үҙәк һәм периферия нервы системаһын, бөйөр һәм бауыр, йөрәк-ҡан тамыры системаһы эшмәкәрлектәрен яҡшырта; ревматик ауырыуҙарҙы, остеохондроз, невралгия һ. б. дауалағанда ҡулланыла)*

**лечебные свойства пчелиных обножек** йәттәнең дауалау үҙсәнлеге *(организмды витаминдар, ферменттар, аҡһым, углевод һәм башҡа минераль матдәләр менән тәьмин итеүгә, бауыр менән бөйөр эшмәкәрлеген яҡшыртыуға, матдәләр алмашыныуын нормалләштереүгә ярҙам итә; унан эшләнгән һығынтылар ыуыныу майҙары, кремдар яһауҙа файҙаланыла)*

**липа крупнолистая** *бот.* эре япраҡлы йүкә *( бал ҡорттары унын татын яратып йыя; шәкәрлелеге 700 кг/га)*

**липа мелколистая** *бот.* ваҡ япраҡлы йүкә *(бал ҡорттары унын татын яратып йыя; шәкәрлелеге 300–500 кг/га)*

**листовой воск** дадан балауыҙы *(табаҡлы әҙер балауыҙ)*

**лицевая сетка** битлек *(умарта ҡарағанда биткә кейә торған селтәр)*

**личинка** ҡарышлауыҡ

**личиночный корм** ҡарышлауыҡ аҙығы *(ҡарышлауыҡтар тәүге өс көндә ҡорт һөтө менән туҡлана; артабан ата һәм эшсе ҡорт ҡарышлауыҡтары – һөт, һеркә, бал ҡатышмаһы менән, ә инә ҡорт ҡарышлауығы фәҡәт инә ҡорт һөтө менән ризыҡлана)*

**луговой медосбор** туғай балы *(ҡорттар өсөн аҙыҡ сифатында файҙаланыла; йыйыу осоро ғәҙәттә май аҙағынан бесән осорона тиклем дауам итә)*

**лысые пчелы** ялтас ҡорттар *( ҡартая бара хитин ҡатламы ҡатып, тәндәрендәге төктәре ҡойола башлаған яланғас ҡорттар)*

**льнянка обыкновенная** *бот.* етен үләне *(һабағынан – сүс, орлоғонан май алына торған үҫемлек; иңкеш һәм бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 90–100 кг/га)*

**люпин** *бот.* әсе борсаҡ *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән был үҫемлектең 400-гә яҡын төрө бар; сәскәһе татһыҙ була; бал ҡорттары уның һеркәһен генә йыя)*

**люцерна посевная** *бот.* сәсеү люцернаһы *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән тарбаҡ һабаҡлы, һәр һабағында өсәр оҙонса япрағы булған күп йыллыҡ үлән; ҡорттар уның татын яратып йыя; шәкәрлелеге 90–150 кг/га)*




**магазин** магазин *(даданға өҫтәп ҡуйыла торған төпһөҙ йәшник; унда* 435x145 *мм ҙурлығында рамдар ҡуйыла һәм фәҡәт бал йыйыу өсөн файҙаланыла)*

**малина обыкновенная, лесная** *бот.* ҡырағай ҡурай еләге *(роза сәскәләләр ғаиләһенә ингән сәнскәк һабаҡлы ҡыуаҡ үҫемлек; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 70–95 кг/га)*

**малоголовые трутни** зәғиф башлы әрә ҡорттар *(насар шарттарҙа йәшәгән инә ҡорттан яралған зәғиф әрә ҡорттар)*

**мальва** *бот.* бесәй тырнағы *(күкһел көрән йәки алһыу төҫтәге эре сәскәле, бейек һабаҡлы дарыу үләне; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 50–60 кг/га)*

**маркировка пчел и маток** ҡорттарға тамға һуғыу *(ҡорттарҙың йәшен, тоҡомон билдәләү маҡсатында башҡарыла: тиҙ кибә торған буяу файҙаланыла; сәғәтенә меңгә яҡын ҡортҡа тамға һалырға була)*

**масса матки, трутня, рабочих пчел** ҡорттарҙың ауырлығы *(инә ҡорттоң оҙонлоғо 20—25 мм, ауырлығы 190—300 мг самаһы, әре ҡорттоң оҙонлоғо 15—17 мм, ауырлығы 200—220 мг, эшсе ҡорттоң оҙонлоғо 12—14 мм, ауырлығы уртаса 100—110 мг самаһы)*

**массовая доля воды в продуктах пчеловодства** ҡортсолоҡ продукттарындағы һыу миҡдары *(балда —21%, умарта балауыҙында —0,5%, яһалма балауыҙҙа —1,5%, экстракция балауыҙында —3%, ҡорт йәттәһендә —10%, инә һөтөндә — 65—70%)*

**массовый отбор, отбор по фенотипу** фенотип буйынса һайлау *(тоҡомсолоҡ эшенең иң ябай һәм киң таралған ысулы: ҡырыҫ климатҡа ярашлы, ауырыуҙарға сыҙамлы, көслө ҡорттар үрсетеү маҡсатында эшләнелә)*

**материнская семья** инәлек ғаилә *(йомортҡаһы, ҡарышлауығы инә ҡорт үрсетеү өсөн файҙаланылған ҡорт ғаиләһе; һәр бер инәлек ғаиләһе миҙгеленә бер нисә мең ҡарышлауыҡ бирә ала)*

**матка запасная** һаҡлыҡтағы инә ҡорт

**матка неплодная** аталанмаған инә ҡорт *(7 көнлөк инә ҡорт парлашыу өсөн умартанан осоп сыға; ә аталанмаған йомортҡанан фәҡәт әре ҡорттар ғына ярала)*

**матка племенная** тоҡомло инә ҡорт *(тоҡомло инә ҡорттоң төп эше йомортҡа һалыуҙан һәм эшсе ҡорттар үрсетеүҙән ғибәрәт)*

**матка плодная** аталанған инә ҡорт *(аталанған инә ҡорт өс-дүрт көндән һуң йомортҡа һала башлай, ә башҡа ҡорттар уны тәрбиәләйҙәр, ашаталар һ. б.)*

**матка-помощница** ярҙамсы инә ҡорт *(төп ғаиләнән ваҡытлыса айырым аҫралған икенсе инә ҡорт; бал йыйыу миҙгеленең уңышлылығына ҡарап уны төп ғаиләгә ҡушыуҙары ла, эшсе ҡорттар үрсетеүҙә файҙаланыуҙары ла ихтимал)*

**матка пчелиная** ҡорт инәһе *(ғаиләлә бер инә ҡорт, бер нисә йөҙ әре ҡорт, 10—80 мең самаһы эшсе ҡорт була; инә ҡорт башҡа ҡорттарҙан үҙенең ҙурлығы, ауырлығы менән*

*айырылып тора: уның оҙонлоғо 20—25 мм, ауырлығы 190—300 мг, көнөнә 1500—2000 йомортҡа һала, ә миҙгеленә 150—200 меңгә еткереүе лә ихтимал; 5 йыл йәшәй, тәүге ике йыл иң һөҙөмтәле йылдары һанала)*

**матка-рекордистка** рекордсы инә ҡорт *(тоҡомдоң биологик мөмкинлегенә ярашлы рәүештә иң күп йомортҡа һалған инә ҡорт)*

**матка роевая** күс инәһе *(ғаиләлә тәрбиәләнеп үҫкән һәм төп оянан айырылып сығыу дәрәжәһенә еткән инә ҡорт)*

**матка свищевая** юғалған инә ҡорт урынына яралған яңы инә ҡорт

**матка-трутовка** енес ағзалары үҫешмәгән инә ҡорт *(фәҡәт аталанмаған йомортҡа һала торған инә ҡорт)*

**матка-улучшательница** тоҡом яҡшыртҡыс инә ҡорт *(үҙенең көслөлөгө, сыҙамлылығы һәм эшсәнлеге менән айырылып торған инә ҡорт)*

**матковод** инә ҡорт үрсетеүсе белгес *(яһалма юл менән инә ҡорт үрсетеүсе умартасы)*

**матковыводная пасека** инә ҡорт үрсетеүсе умарталыҡ

**маткоуловитель** кейә ҡаплауыс *(оялағы күсте, шулай уҡ аталанмаған инә ҡортто ваҡытлыса сығармай тотоу өсөн кейәне ҡаплап торған ҡулайлама)*

**маточная клеточка** инә ҡорт ситлеге *(инә ҡортто ваҡытлыса күстән айырып тотоу өсөн ҡулайлаштырылған ситлек)*

**маточник** инә көбө

**маточник зрелый** өлгөргән инә көбө *(эсенән бер-ике көндән инә ҡорт сыға торған күҙәнәк; мисәтләнгәндән һуң 7—8 көн үткәс тә, оялағы ҡорттар күҙәнәктең балауыҙ ҡатламын кимереп, инә ҡортҡа юл асалар)*

**маточник роевый** күстәге инә көбө *(күс айырыр алдынан кәрәҙ ҡабырғаһына төҙөлгән, имән сәтләүеге рәүешендәге инә ҡорт көбө)*

**маточное вещество** инә ҡорт матдәһе *(инә ҡорттоң өҫкө яңағы менән ҡорһаҡ биҙҙәре бүлеп сығарған феромандар һәм биологик әүҙем есемдәрҙән торған матдә; хәҙерге көндә был*

*матдәнең 32 компоненты асыҡланған: береһе — инә ҡорттоң барлығы хаҡында, икенсеһе теге йәки был ҡорттоң ошо ғаиләгә ҡарағанлығы тураһында мәғлүмәт бирә)*

**маточное молочко** инә ҡорт һөтө *(бал ҡортоноң өҫкө яңаҡ менән йотҡолоҡ биҙҙәренән бүленеп сыҡҡан матдә: аҡһым — 40–45%, шәкәр — 20%, май — 15%; ул микроэлементтарға һәм төрлө витаминдарға, аминокислоталарға ла бай)*

**маточный корм, маточное молочко** инә ҡорт аҙығы, инә ҡорт һөтө *(ашатыусы ҡорттарҙың йотҡолоҡ һәм өҫкө яңаҡ биҙҙәренән инә ҡорт ҡарышлауығын туҡландырыу өсөн бүленеп сыҡҡан туҡлыҡлы матдә)*

**маты утеплительные** йылытҡыс септәләр *(умарталарҙы өҫтән һәм ҡабырғаларҙан ябып йылытыу өсөн һаламдан, ҡамыштан, екәндән махсус станоктарҙа һуғып эшләнгән септә: йылы һаҡлай, дым тотмай)*

**мать-и-мачеха обыкновенная** *бот.* ябай үгәй инә үләне *(ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән яңғыҙ һары сәскәле, түңәрәк япраҡлы, дымлы урында үҫә торған шифалы үҫемлек; ҡорттар уның һеркәһен дә, татын да яратып йыя; шәкәрлелеге 25–30 кг/га)*

**машина для производства вощины** балауыҙ яһай торған машина

**машина для распечатывания сотов** ҡына ҡыра торған машина *(эҫе быуҙа ҡыҙҙырылған үткер яҫы бысаҡ менән кәрәҙ ҡынаһын ҡырып, уны махсус транспортер ярҙамында бал ҡыуғысҡа оҙата торған ҡорамал; ул эре умартасылыҡ комплекстарында күпләп бал ҡыуғанда файҙаланыла)*

**мед пчелиный** ҡорт балы *(ҡорт бөрләтәүендә йыйылып, кәрәҙ күҙәнәктәренә бөркөп бушатылған тат 4–8 көндән балға әйләнә; бал менән тулған күҙәнәктәр йоҡа ғына ҡына менән ҡаплана; өлгөргән бал ҡуйы, үтә күренмәле, хуш еҫле, татлы була; составында 300-гә яҡын төрлө матдә: углевод — 70–75%, һыу — 17,5–21%, аҡһым — 0,6%; шулай уҡ 23 аминокислота, 40-тан ашыу микроэлемент бар; калийға,*

*фосфорға бай; медицинала, кондитер сәнәғәтендә, косметикала киң ҡулланыла)*

**медвяная роса** татлы ысыҡ *(ҡайһы бер үҫемлектәрҙең япрағы бүлеп сығарған татлы тамсылар; сәскәле үҫемлектәр булмағанда ҡорттар уны йыйырға мәжбүр булалар, балы сифат яғынан түбән булғанға ҡышҡы аҙыҡ булараҡ ҡулланылмай)*

**медовая продуктивность пчелиных семей** ҡорт ғаиләһенең бал йыйыу продуктлылығы *(ғаилә йыл миҙгелендә йыйған бал миҡдары; ул тәбиғәт шарттарына, ғаиләнең көсөнә, умартасының тәжрибәһенә бәйле: йүкә сәскә атҡан мәлдә Алыҫ Көнсығыш ҡорттарының һәр бер ғаиләһе көнөнә 25 кг тат йыйып, миҙгеленә 400 кг бал йыйған осраҡтары ла бар)*

**медовый баланс пасеки** умарталыҡтағы бал балансы *(ҡорт ғаиләһенең баллы үҫемлектәр менән тәьмин ителеү-ителмәүен белеү өсөн сәскәләрҙең тат миҡдарын һәм майҙан күләмен билдәләйҙәр: ҡорт ғаиләһенең йыллыҡ аҙығын (уртаса 90 кг бал) һәм планлаштырылған йыйымды ( уртаса 15 кг бал) бергә ҡушып, дөйөм тат миҡдарын 105-кә бүлгәндән һуң, ошо майҙандағы үҫемлектәрҙең нисә баш ҡорт ғаиләһен тәьмин итә алыуы асыҡлана)*

**медовый зобик** *анат.* бал бөрләтәүе *(үңәстең алғы эсәккә киңәйеп барып тоташҡан урыны, бөрләтәүгә ҡорттар тат, һыу йыялар, оялағы балды бер урындан икенсеһенә ташыйҙар; формаһы менән ул һуҙылып, бөрөлөп торған муҡсаны хәтерләтә; ас ҡорттоң бөрләтәүе 14–16 мм³ булһа, туйғандан һуң уның күләме 55–60 мм³-ға тиклем киңәйә; уға 60–65 мг бал һыя)*

**медогонка** бал ҡыуғыс *(балды кәрәҙҙән һурҙырта торған ҡорамал)*

**медоносные растения** баллы үҫемлектәр *(сәскәһендә татлы һуты булған үҫемлектәр; Ер йөҙөндә меңдән ашыу баллы үҫемлек төрө бар, әммә бал ҡорттары уларҙың ҡырҡ-иллеһенән генә тат йыя; баллы үҫемлектәргә ҡарабойҙай, көнбағыш, люцерна, туҡранбаш, рапс, ҡандала*

*үләне, аҡ акация, ҡурай еләге, ҡара көртмәле, эт муйылы, йүкә һ. б. керә)*

**медоносные угодья** баллы үҫемлектәр үҫкән урындар *(сәсеп үҫтерелгән йәки ҡырағай баллы үҫемлектәре булған ер; иң тотороҡло аҙыҡ сығанағы булып йәшелсә, емеш-еләк ултыртылған ерҙәр иҫәпләнә, ә урманда, ҡырҙа, сабынлыҡта, һаҙлыҡта, йылға-күл буйҙарында үҫкән баллы үҫемлектәр ҡорттарға өҫтәлмә аҙыҡ ҡына булып һанала)*

**медосбор** йыйылған бал *(1) ҡорт ғаиләһенең ниндәйҙер осорҙа, бер көн эсендә йәки билдәле бер миҙгел араһында йыйған балы; уны иртә яҙын йыйылған балға, яҙ йыйылған балға, йәйен йыйылған балға бүлеп йөрөтәләр; 2) хужалыҡтағы барлыҡ умарталарҙан билдәле бер миҙгелдә йыйылған бал; уны тулайым йыйылған балға һәм тотонола торған балға бүлеп йөрөтәләр)*

**медуница** *бот.* кәкүк емеше; кәкүкбаш *(йөнтәҫ һабаҡлы, ваҡ ҡына алһыу йәки күк сәскәле баллы ҡыр үләне; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 70 кг/га)*

**мелеоз** *вет.* мелеоз *(паразит ҡуңыҙ ҡарышлауыҡтары тараҡҡан бал ҡорто ауырыуы)*

**меловый расплод** эзбизләнгән үрсем; *то же, что* **аскосфероз пчел**

**мелоноз** *вет.* мелоноз *(инә ҡорттарҙа була торған йоғошло ауырыу)*

**мерва пасечная** балауыҙ сеймалы

**место сбора трутней** әре ҡорттар тупланған урын *(умарталыҡтан 3—4 км алыҫлыҡта үҙенең аныҡ сиге булған әре ҡорттар йыйыла торған урын; ғалимдарҙың күҙәтеүе буйынса, инә ҡорттарҙың да ошо ерҙе һайлап, әре ҡорттар менән парлашыу урынына әйләнеүе ихтимал)*

**метилсалицилат** *вет.* метилсалицилат *(үҙенә генә хас еҫе булған, төҫһөҙ йәки һары төҫтәге майлы шыйыҡса; акарапидоз ауырыуын дауалауҙа ҡулланыла)*

**методы определения нектаропродуктивности растений** үҫемлектең татлылығын билдәләй торған алымдар

*(билдәле бер хужалыҡ шарттарында теге йәки был биләмәнең бал биреү мөмкинлеген билдәләү өсөн ҡулланыла)*

**методы разведения пчел** ҡорт үрсетеү алымдары*(ҡорт үрсетеүҙә ҡулланылған алымдар: бер тоҡомдағы инә һәм ата ҡортто ҡушыу юлы менән саф тоҡомло, ике төрлө тоҡомдағы ҡорттарҙы ҡушыу юлы менән ҡатнаш тоҡомло ҡорттар үрсетелә)*

**мешотчатый расплод** *вет.* ҡапсыҡлы үрсем *(был ауырыу менән 6–10 көнлөк көпләнгән үрсем зарарлана)*

**миазы** *вет.* миаз *(ҡайһы бер себен ҡарышлауыҡтары таратҡан ҡорт ауырыуы)*

**микроклимат улья** умарталағы микроклимат *(ҡорт ғаиләһенең нормаль йәшәүе һәм үрсеүе өсөн кәрәк булған шарттар)*

**микроорганизмы** микроорганизмдар *(бактериялар, микроплазмалар, ылымыҡтар, вирустар һәм төрлө бәшмәктәр)*

**микроспоридоз** *вет.* микроспоридоз *(бал ҡорттарында була торған эсәк ауырыуы)*

**микроцефалия** микроцефалия *(бәләкәй генә башлы зәғиф инә ҡорт)*

**миндаль обыкновенный** *бот.* ябай миндаль *(гөлйемеш сәскәләләр ғаиләһенә ингән тал япраҡлы, аҡ, алһыу сәскәле, сәтләүек һымаҡ емеш биргән көньяҡ ағасы; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 25–30 кг/га)*

**минеральные соли** минераль тоҙҙар *(ҡорт аҙығының иң мөһим өлөшө: бал һәм һитә минераль тоҙҙар сығанағы булып иҫәпләнә)*

**минеральный воск** минераль балауыҙ *(тау балауыҙын, нефтте эшкәртеүҙән алынған матдәләр: парафин, церезин, стеарин һ. б.)*

**мисочка искусственная** яһалма инә көбө *( инә ҡортон яһалма юл менән үрсеткәндә ҡулланыла)*

**мисочка роевая** күс көбөһө *(инә ҡорт күҙәнәгенең нигеҙе йәки төбө)*

**многокорпусный улей** күп корпуслы умарта

**многоматочная семья** күп инәле ғаилә *(енси яҡтан өлгөргән бер нисә инәһе булған ҡорт ғаиләһе)*

**многоножка** *зоол.* күбаяҡ *(бал ҡорто ҡарышлауыҡтары менән туҡланған быуынтыҡ аяҡлы төнгө бөжәк)*

**мозг пчелы** *анат.* ҡорт мейеһе *(нервы системаһының бер өлөшөн тәшкил итә; йотҡолоҡтоң өҫкө һәм аҫҡы төйөндәрен үҙ эсенә алған был ағза үҙенең эшмәкәрлеген күреү һәм еҫ һиҙеү рецепторҙарынан килгән сигналдар ярҙамында башҡара; иң үҫешкән мейе эшсе һәм инә ҡорттарҙыҡы, шуға күрә улар төрлө эш башҡарыуға һәләтле, әре ҡорттоң, күҙҙәһе ҙур булһа ла, мейеһе үҫешмәгән)*

**моль большая восковая** *зоол.* ҙур балауыҙ көйәһе *(ҡортсолоҡҡа ҙур зыян килтереүсе ҡоротҡос бөжәк)*

**моль малая восковая** бәләкәй балауыҙ көйәһе *(ҡортсолоҡҡа төрлө яҡлап зыян килтереүсе ҡоротҡос бөжәк)*

**монофлерный мед** монофлер бал *(бер генә төр үҫемлек татынан йыйылған бал)*

**мордовник** *бот.* терпекәй үлән *(аҡһыл миләүшә төҫөндәге йөҙләгән ваҡ сәскә өйкөмөнән торған тумалаҡ башлы, баллы үҫемлек; 35—40 көн буйына шау сәскәлә ултыра; ҡорттар уның татын һәм һеркәһен яратып йыялар; шәкәрлелеге 100 кг/га)*

**морестан** *вет.* морестан *(зарарлы талпандарға ҡаршы ҡулланылған һары төҫтәге онтаҡ дарыу)*

**морфология** морфология *(бал ҡорто ағзаларының үҫеш барышында формалашыу законлылығын һәм уларҙың үҙенсәлеген, төҙөлөшөн башҡа төр бөжәктәр менән сағыштырып өйрәнә торған фән)*

**мукормикоз пчел** *вет.* ҡорт мукормикозы *(бал ҡорттарында була торған йоғошло ауырыу)*

**муравьи** *зоол.* ҡырмыҫҡалар *(умарта эсенә оялап, ҡорттарҙың ҡарышлауығы, ҡурсағы, хатта өлкән ҡорттарҙың үҙе һәм кәрәҙ эсендәге балы менән туҡланған бөжәк)*

**мускулатура** мускулдар *(ҡыҫҡарыу үҙенсәлеге арҡаһында айырым ағзаларҙы һәм тән өлөштәрен хәрәкәткә килтерә торған туҡыма; төҙөлөштәренә ҡарап уларҙы ҡанат мус-*

*кулдарына һәм тән менән эсәк мускулдарына бүлеп йөрөтәләр)*

**мутагены** мутагендар *(нәҫелдә ниндәйҙер үҙгәреш булдырыу өсөн организмға йәки енес күҙәнәктәренә тәьҫир итеүсе физик һәм химик факторҙар: нурландырыу, ультратауыш, температура һ. б.)*

**мутация** мутация *(бал ҡорто тоҡомонда ҡапыл ниндәйҙер яңы сифат барлыҡҡа килеү күренеше: үҙгәреш кисергән ҡорт мутант тип йөрөтөлә)*

**мутиллоз** *вет.* мутиллоз *(бал ҡорттарында була торған йоғошло ауырыу)*

**мыши** *зоол.* сысҡандар *(умарта эсенә оялап, уға ҙур зыян килтергән кимереүсе йәнлектәр)*

**мята** *бот.* бөтнөк *(ирен сәскәлеләр ғаиләһенә ингән тарбаҡ һабаҡлы, ҡуйы япраҡлы, ваҡ ҡына алһыу сәскәле, хуш еҫле күп йыллыҡ дарыу үләне; шәкәрлелеге 150–200 кг/га)*

# Н

**наблюдательный улей** күҙәтеү умартаһы *(бал ҡорттарының тәбиғәтен өйрәнер өсөн тәғәйенләнгән махсус умарта)*

**навашивание рамок** рамдарҙы балауыҙлау *(сым тарттырылған рамдарға балауыҙ табағын беркетеү)*

**навесы** лапаҫ,япма *(күҙәтеү умарталарын, шулай уҡ ҡортсолоҡ ҡорамалдарын ел-ямғырҙан, ҡояш нурҙарынан һаҡлау өсөн яһалған япма)*

**нагревание меда** балды эҫетеү *(өлгөрмәгән балды әсемәһен өсөн эҫетеп алалар: эҫелек 57°С булһа – 60 мин, эҫелек 65°С булһа – 30 мин, ә 70°С булһа, 10 мин утта торалар)*

**нагревание ножа** бысаҡты эҫетеү *(бал һурҙыртыр алдынан кәрәҙ өҫтөндәге ҡынаны ҡырҡыу өсөн бысаҡты эҫе һыуға тығып алыу)*

**нагрузка медового зобика** бал бөрләтәүенең эшмәкәрлеге

**надрамочное пространство** рам өҫтөндәге арауыҡ *(умарталағы рамдарҙың өҫкө яғы менән ҡапҡас түшәме араһындағы буш урын)*

**надставки, магазины** өҫтәмәләр, магазиндар *(күпләп бал йыйыу йәки әүҙем кәрәҙ төҙөү осоронда умартаның күләмен арттырыу маҡсатында ҡулланыла)*

**налет, перелет, блуждение пчел** ҡорттарҙың аҙашыуы *(умартаның урынын алмаштырғанда ҡайһы бер ҡорттарҙың аҙашып китеп, икенсе ғаиләгә барып ҡушылыуҙары)*

**налет пчел на матку** инә ҡортҡа эйәреү *(яңы умартаға инә ҡорто булған рам урынлаштырып, уның янына мисәтләнгән үрсеме, кәрәҙе, балы булған рамдар өҫтәп яңы ғаилә алыу юлы)*

**напад пчел, воровство** ҡорттарҙың урлашыуы *(ҡайһы бер ҡорттарҙың сит умарта эсенә инеп уның балын урлауҙары)*

**наперстянка крупноцветковая** *бот.* уймаҡ сәскә *(ваҡ ҡына ҡыңғырау сәскәле, оҙонса япраҡлы дарыу үләне; ҡорттар уның татын яратып йыя; шәкәрлелеге 200 кг/га)*

**напитки медовые** баллы эсемлектәр *(баллы һыра, баллы шарап, баллы кеүәҫ, бал шәрбәте һәм һәр төрлө баллы емеш эсемлектәре)*

**напрыск** бөркөм *(ҡорт бөрләтәүенән кәрәҙ күҙәнәгенә бөркөп сығарылған тат тамсыһы)*

**наружный осмотр пчелиной семьи** ҡорт ғаиләһен тыш яҡлап тикшереү *(умартаны асмайынса ғына ҡорттарҙың торошон күҙәтеү)*

**насекомые-опылители** *зоол.* һеркәләндереүсе бөжәктәр *(сәскәнән сәскәгә ҡунып, тат һәм һеркә йыйғанда бер юлы уларҙы һеркәләндереп йөрөгән бөжәктәр: бал ҡорто, ҡырағай ҡорттар, иңкештәр)*

**наследственность** тоҡомдан килеү

**нафталин** *вет.* нафталин *(ҡорт ауырыуҙарына ҡаршы көрәшкәндә ҡулланыла)*

**незаразные болезни пчел** ҡорттарҙың йоғошло булмаған ауырыуҙары *(йәшәү шарттары насарайыуҙан килеп тыуған ауырыуҙар)*

**незрелый мед** сей бал *(составында 21% һыуы булған, кәрәҙҙә мисәтләнмәгән бал)*

**нектар** *бот.* тат *(сәскә татлыҡтары бүлеп сығарған шәрбәт һут; составына глюкоза, фруктоза, сахароза, аҡһым, аминокислоталар инә)*

**нектарик** *бот.* татлыҡ *(сәскәнең эпидерма менән ҡапланған биҙ күҙәнәктәренән торған тат бүлеүсе өлөшө)*

**нектарно-кормовая смесь** баллы үҫемлек менән мал аҙығы ҡатышмаһы *(малдарҙы — аҙыҡ, бал ҡорттарын тат менән тәьмин итеү өсөн сәселгән ҡатнаш үҫемлектәр: борсаҡ менән фацелия, кәрешкә менән горчица, кәрешкә, арпа һәм фацелия)*

**нектарный токсикоз** тат токсикозы *(бал ҡорттарының ҡайһы бер зәһәрле үҫемлектәрҙең таты менән ағыуланыуы)*

**нектаропродуктивность растений** үҫемлектәрҙең татлылығы *(бер сәскәнән йәки бер төрлө үҫемлек сәскәләренән, йә булмаһа билдәле майҙандағы сәскәләрҙән бүленеп сыҡҡан тат миҡдары)*

**нелетные пчелы** оса алмаған ҡорттар *(төрлө ауырыуҙар һ. б. сәбәпле осоу һәләтенән бөтөнләй мәхрүм зәғиф ҡорттар)*

**нематодозы** *вет.* нематодоз *(ҡорт ауырыуы)*

**нервная система пчелы** ҡорттоң нервы системаһы (*ағзаларҙың функцияһын көйләй, тышҡы мөхит менән бәйләнеште үҙ-ара яраштыра һ. б.)*

**новарсенол** *вет.* новарсенол *(ауырыу ҡорттарҙы дауалау өсөн ҡулланыла)*

**ножи пчеловодные** умарта бысағы *(мисәтләнгән кәрәҙҙең өҫтөн — ҡынаны ҡырып алыу өсөн ҡулланылған яҫы бысаҡ)*

**ножки пчелы** *анат.* ҡорттоң аяҡтары *(бал ҡорто кәүҙәһенең күкрәк өлөшөндә өс пар аяғы урынлашҡан: улар осоп килеп ҡунған ерҙә атлап йөрөү, һеркә йыйып умартаға ташыу, кәүҙәне сүп-сарҙан таҙартыу өсөн хеҙмәт итә)*

**нозема** *вет.* нозема *(нозематоз ауырыуын таратыусы микроб)*

**нозематоз** *вет.* нозематоз *(ҡыш аҙағында — яҙ башында ҡорттарҙа була торған йоғошло эсәк ауырыуы)*

**норма зимних запасов меда** ҡышлыҡ бал һаҡлығы нормаһы *(ҡышын ҡорт ғаиләһен тейешле кимәлдә туҡландырыу өсөн кәрәк булған бал миҡдары; бер ғаиләгә кәмендә 2–2,5 кг бал китә)*

**нормы пчелиных семей** *(необходимые для опыления энтомофильных сельскохозяйственных растений)* билдәле майҙандағы ауыл хужалығы үҫемлектәрен һеркәләндереү өсөн кәрәк булған күс һаны *(1 га ҡарабойҙайҙы һеркәләндереү өсөн — 1–2 баш умарта; горчица өсөн — 2–4 баш; ялан туҡранбашы өсөн — 2–3 баш ҡорт кәрәклеге иҫәпләп сығарылған)*

**нуклеус** нуклеус *(аталаныу һәм йомортҡа һалыу осоронда инә ҡортто ваҡытлыса хеҙмәтләндергән ҙур булмаған ғаилә; унда инә ҡорт көбөнән үҫеп сығып, енси яҡтан өлгөргәндән һуң осоп аталана һәм йомортҡа һала башлай)*

## О

**облепиха** *бот.* һырғанаҡ *(иртә яҙын сәскә ата торған ваҡ сәскәле, һарғылт емешле дарыу үҫемлеге; бал ҡорттары уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 38–40 кг/га)*

**облеты пчел** бал ҡорттарының осоштары *(йыл миҙгеленә, урынына һәм маҡсатына ҡарап бал ҡорто осоштарын юҫыҡланыу һәм яҙғы таҙарыныу осоштарына бүлеп йөрөтәләр)*

**обновление гнезда** ояны яңыртыу *(иҫкергән кәрәҙҙәрҙе ташлап, уларҙы яңыһы менән алмаштырыу)*

**обножка пчелиная** ҡорт йәттәһе *(эшсе ҡорттарҙың артҡы аяҡтағы ҡалтаһына, кәрзиненә йыйып тултырған сәскә һеркәләре; йәттәнең ауырлығы яҡынса 10–15 мг була, йәғни 100 мең бөртөк һеркәне үҙ эсенә һыйҙыра ала)*

**обоеполый цветок** *бот.* ике енесле сәскә *(һеркә япрағы ла, емешлеге лә булған ике енесле сәскә: йүкә, ҡурай еләге, һуҡыр кесерткән сәскәләре)*

**обоняние пчел** ҡорттарҙың еҫ һиҙеүе *(еҫ һиҙеү ағзалары мыйыҡсаларҙа урынлашҡан; һаҡсы ҡорттарға сит ҡорттарҙы танырға, ә шәйләк ҡорттарға сәскәле урындарҙы табырға ярҙам итә)*

**обработка меда** балды эшкәртеү *(мисәтләнгән кәрәҙ өҫтөндәге ҡынаны бысаҡ менән ҡырҡып алалар, бал ҡыуғысҡа һалып айырталар, айыртылған балды фильтрлайҙар, өлгөрмәгән булһа, тондоралар, артабан таҙа һауыттарға һалып һаҡлайҙар)*

**обрыв сотов** кәрәҙҙәрҙең һыныуы *(бер урындан икенсе урынға күсергәндә ҡорттар мыжғып китә һәм оялағы температура күтәрелә, ә йылыға кәрәҙ йомшара һәм бүлгеләнеп һынып төшә башлай)*

**объединение семей** ҡорт ғаиләләрен берләштереү *(күпләп бал йыйыу мәлендә ғаиләне көсәйтеү маҡсатында башҡарыла)*

**объем маточника** инә көбө күләме

**ограничение выращивания трутней** ата ҡорттар үрсетеүҙе сикләү *(инә ҡорттарҙы тоҡомһоҙ ата ҡорттар менән ҡушылыуҙан һаҡлау маҡсатында башҡарыла)*

**ограничение гнезда** өяны сикләү *(үрсеме, инә ҡорто булған рамды башҡаларынан таҡта менән айырып ҡуйыу)*

**ограничение мероприятия** сараларҙы сикләү *(йоғошло ауырыуҙарҙы алдан иҫкәртеү йәки уларҙың таралып китеүен булдырмау өсөн башҡарылған ветеринария саралары)*

**ограничение яйцекладки маток** инә ҡорттарҙың йомортҡа һалыуын сикләү *(күстең бал йыйыу көсөн арттырыу маҡсатында эшләнелә)*

**огурец** *бот.* ҡыяр *(баҡсала үҫкән йәшелсә; бал ҡорттары уның татын яратып йыя; шәкәрлелеге 30 кг/га)*

**одежда пчеловода** умартасы кейеме *(санитария һәм гигиена талаптарына яуап бирерлек булырға тейеш)*

**одиночные пчелы** яңғыҙаҡ ҡорттар *(ҡорттар төркөмөнә ҡараған бөжәктәрҙең 80%-ын яңғыҙаҡ бал ҡорттары тәшкил итә: уларҙың инәләре яңғыҙ оя ҡора)*

**одноглазые пчелы** һыңар күҙле ҡорттар *(бындай зәғиф ҡорттар тыумаһын өсөн, инә ҡортто алмаштырырға һәм умартала кәрәкле шарттар булдырырға кәрәк)*

**однодомные растения** *бот.* бер өйлө үҫемлектәр *(һеркә япрағы ла, емешлеге лә бер һабаҡта урынлашҡан үҫемлектәр: ҡабаҡ, ҡыяр, кукуруз, имән, сәтләүек ағасы һ. б.)*

**одуванчик лекарственный** *бот.* дарыу бәпембәһе (*ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән ҡыуыш һабаҡлы, һары суҡ сәскәле, туҙғаҡ орлоҡло үҫемлек;ҡорттар уның һеркәһен дә, татын да яратып йыя; шәкәрлелеге 45—50 кг/га)*

**озеленение пасеки** умарталыҡты йәшелләндереү *(умарталыҡты ел-дауылдан, ҡояш нурҙарынан һаҡлау өсөн уны ҡыуаҡ үҫемлектәр һәм эре ағастар менән уратып алыу)*

**окопник** *бот.* эткоḷаҡ *(күгәрсен күҙе һымаҡтар ғаиләһенә ингән яҫы япраҡлы, ҡытыршы йөнтәҫ һабаҡлы, күк, ҡыҙыл йәки алһыу, аҡ сәскәле күп йыллыҡ эре үлән; шәкәрлелеге 140—300 кг/га)*

**окраска пчел** ҡорттарҙың төҫө *(тоҡомдо билдәләүсе күрһәткес: һары төҫ — итальян ҡорттарына, асыҡ һоро төҫ Украина ҡорттарына хас һ. б.)*

**окраска ульев** умарта төҫө *(умартаны аҡ, күк, һары төҫтәргә буяу маҡсатҡа ярашлы: был төҫтәрҙе ҡорттар яҡшы айыра, ә аҡ төҫ умартаны эҫенән һаҡлай)*

**окуривание пчел** ҡорттарҙы төтәҫләү *(ҡорт ҡарағанда йәки дауалағанда уларға төтәткес менән төтөн бөркөү)*

**ольха черная** *бот.* ҡара ерек *(ҡайындар ғаиләһенә ингән, дымлы урында, яр буйҙарында үҫә торған мурт ағас; ҡорттар иртә яҙын уның һеркәһен йыялар, артабан йәш япрағындағы елемен йыйып, прополисҡа әйләндерәләр)*

**оплодотворение растений** *бот.* үҫемлектәрҙе аталандырыу

**определение количества сахара в нектаре** таттағы шәкәр миҡдарын билдәләү

**опрыскивание** *вет.* бөркөү *(ҡоротҡос бөжәктәргә ҡаршы көрәштең химик ысулы)*

**оптимальный период выращивания расплода** үрсем үрсетеүҙәге иң яйлы мәл

**опыление растений** *бот.* үҫемлектәрҙе һеркәләндереү

**опыление садов** *бот.* баҡса үҫемлектәрен һеркәләндереү

**опыление сельскохозяйственных культур** *бот.* ауыл хужалығы культураларын һеркәләндереү *(ауыл хужалығы культураларының күбеһе бөжәктәр ярҙамында һеркәләнә: бал ҡорттары ярҙамында һеркәләнгән ҡарабойҙайҙың уңышы 40–45%-ҡа, көнбағыштың уңышы 20–30%-ҡа, емешеләктең уңышы 45–50%-ҡа күтәрелә)*

**опытные пасеки** тәжрибә умарталыҡтары

**опытные станции пчеловодства** умартасылыҡтың тәжрибә станциялары *(ҡортсолоҡ мәсьәләләре менән шөғөлләнгән ғилми-тикшеренеү учреждениелары)*

**организация труда** хеҙмәтте ойоштороу *(юғары уңыш алыу өсөн тейешле шарттар булдырыуға йүнәлтелгән саралар: умарта һаны 100–110 баш булһа, умарталыҡтағы эште ҡортсо бер үҙе башҡара; 120–130 башҡа етһә, ул ваҡытлыса ярҙамсы кешене йәлеп итә, әгәр уларҙың һаны 300–600 башҡа етһә, ундағы эште 3–5 кешенән торған төркөм башҡара)*

**органы выделения** *анат.* бүлеп сығарыу ағзалары *(организмдағы аҡһым, майҙар, углеводтар тарҡалыуҙан хасил булған ҡалдыҡтарҙы бүлеп сығара торған ағза)*

**органы пищеварения** *анат.* аш һеңдереү ағзалары *(аҙыҡты эшкәртеү һәм һеңдереү эсәктәрҙә башҡарыла; ул алғы, урта һәм артҡы бүлектәрҙән тора; алғы бүлеккә йотҡолоҡ, үңәс, бөрләтәү инә; аш һеңдереү урта бүлектә башҡарыла; артҡы бүлек нәҙек һәм йыуан эсәктәрҙән тора)*

**органы размножения** *анат.* үрсеү ағзалары *(әре ҡортта – сперматозоид, инә ҡортта инә күҙәнәктәр хасил итеп, уларҙы үҙ-ара ҡауыштыра торған енес ағзалары; улар фәҡәт инә һәм әре ҡорттарҙа ғына нык үҫешкән була)*

**органы чувств** *анат.* тойоу ағзалары *(ҡортто тирә-яҡ мөхит менән бәйләй һәм мейегә организм хаҡында тейешле мәғлүмәт бирә торған ағзалар: күреү ағзалары ике ҙур ҡатмарлы һәм өс ябай күҙҙән тора; еҫ тойоу ағзалары мыйыҡсаларҙа урынлашҡан; тәм тойоу ағзалары ауыҙ осонда, мыйыҡсаларында һәм аяҡтарында урынлашҡан)*

**ориентация пчел на местности** ҡорттарҙың тирә-йүнгә юҫыҡлана алыуы *(йәшәгән ояһын, аталанасаҡ ишен, ҡунасаҡ сәскәһен тиҙ генә таба алыу һәләте: эшсе ҡорттар аҙыҡ эҙләп 2–3 километрға, ә инә ҡорттар аталаныу өсөн 5–7 километрға осалар, әммә ҡояшҡа, тирә-яҡтағы нәмәләрҙең төҫөнә, еҫенә, рәүешенә ҡарап тиҙ генә ояларына кире ҡайта алалар)*

**орнитофильные растения** *бот.* орнитофиль үҫемлектәр *(ҡоштар ярҙамында һеркәләнгән үҫемлектәр)*

**осенняя ревизия** көҙгө тикшереү *(үрсемдең көсөн, сифатын, аҙыҡ миҡдарын асыҡлау маҡсатында башҡарыла; тикшереү һөҙөмтәләре акт ҡағыҙына теркәлә)*

**осиротение семьи** ғаиләнең инәһеҙ ҡалыуы *(инәһеҙ, әммә ҡарышлауыҡтары булған ҡорттар тиҙ генә йәш инә үҫтереп ала алалар, ә инәһеҙ һәм үрсемһеҙ ҡорттар һәләкәткә дусар булалар; бындай хәлдән ҡотолоу өсөн һаҡлыҡтағы инә ҡорттарҙы яһалма юл менән күпләп үрсетәләр)*

**основная семья** төп ғаилә *(ҡышлаған һәм бал йыйыуға һәләтле ҡорт ғаиләһе)*

**осот полевой** *бот.* ҡыр билсәне *(ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән сәнскәк япраҡлы ҡый үләне; шәкәрлелеге 60–70 кг/га)*

**острый паралич пчел** *вет.* ҡорт параличы *(йәйен бал ҡорттарында була торған йоғошло ауырыу)*

**осы, осовидные** *зоол.* һағыҙаҡ, һағыҙаҡ һымаҡтар *(ярыҡанатлылар ғаиләһенә ингән буй-буй һары һыҙатлы,*

*ҡара төçтәге саға торған бөжәктәр; улар күмәкләшеп умартаға һөжүм итә, унан бал һәм ҡорттар урлай)*

**отбор естественный** тәбиғи һайланыш *(йәнле тәбиғәттә үҙгәреп торған тормош шарттарына ныҡыраҡ яраҡлашҡан организмдың һайланып ҡалып артабан үçеш процесы)*

**отбор искусственный** яһалма һайланыш *(ҡорт тоҡомдарының кеше тарафынан һайланып алыныуы)*

**отбор маточников** инә көбөн һайлау *(инә көбөн ҙур һаҡлыҡ менән киçеп алып, ситлеккә урынлаштыралар; унда бер аҙ бал һалып, 5—6 эшсе ҡорт ебәрәләр; эшсе ҡорттар йәш инә ҡортто ашатып, тәрбиәләп үçтерәләр)*

**отбор перги из сотов** кәрәҙҙәге һитәне айырып алыу *(кәрәҙҙәге артыҡ һитәне махсус ҡулайлама йәки ҡул менән сүпләп айырып алалар; артабан аҙыҡ продукттары әҙерләүҙә ҡулланалар)*

**отбор пчелиного яда** ҡорт ағыуын бүлдереп сығартыу *(уны бер нисә юл менән алырға мөмкин: иң башта ҡортто ҡуҙғыталар, йәғни берәй нәмәне сағырға мәжбүр итеп, ағыуын бүлдереп сығарталар; йыйылған ағыуҙы зарарһыҙлайҙар һәм, быяла һауытҡа һалып, өçтөн балауыҙ йәки парафин менән ҡаплайҙар)*

**отводок** яңы ғаилә *(ҡорттары, үрсеме һәм етерлек аҙығы булған, ояға аталанған инә йәки өлгөргән инә көбө ҡушыуҙан барлыҡҡа килгән яңы ғаилә)*

**отдых пчел** ҡорттарҙың ялы *(ҡорт организмы эшмәкәрлегенең ваҡытлыса туҡтап тороуы; улар кәрәҙ күҙәнәгендә ял итә)*

**откачка меда** бал айыртыу *(рамдағы балды бал ҡыуғыстан үткәреп алыу)*

**открытый расплод** асыҡ үрсем *(асыҡ күҙәнәк эсендә йомортҡа йәки ҡарышлауыҡ хәлендә йәшәгән үрсем: ҡарышлауыҡтың — көп үргән, ҡорттарҙың күҙәнәк ауыҙын мисәтләгән мәленә тап килә)*

**отравление пчел** ҡорттарҙың ағыуланыуы *(ҡорттарҙың төрлө химикаттар, зәһәрле үҫемлек таты йәки һеркәһе менән ағыуланыуы)*

**отцовская семья** әре ҡорттар үрсетеүсе ғаилә *(нәҫелдән нәҫелгә бирелә килгән яҡшы сифаттарҙың 75 проценты әре ҡорттарға бәйле, әммә ҡушыласаҡ инә ҡорттоң улар менән бер тоҡомдан булыуы ла мөһим)*

**охрана летка** кейә һаҡлау *(кейәне сит ҡорттарҙан һаҡлау)*

**очистка продуктов пчеловодства** умартасылыҡ продукттарын таҙартыу *(балды фильтр аша үткәреп йәки тондороп таҙарталар, ә ҡорт елемен, ҡорт йәттәһен үҙенә башҡа механик юл менән таҙарталар)*

**очиток едкий** *бот.* зәһәр сүл боросо *(ике өйләләр ғаиләһенә ингән йыуан итләс һабаҡлы, һутлы япраҡлы, ҡыҙыл йәки аҡ сәскәле үҫемлек; шәкәрлелеге 114 кг/га)*

# П

**падевый мед** япраҡ балы *(япраҡ бүлеп сығарған шәрбәтле матдәләрҙең ҡорттар тарафынан эшкәртелеүенән йыйылған бал)*

**падевый токсикоз** япраҡ балынан ағыуланыу

**падь** татлыҡай *(япраҡтар, үҫемлек һабаҡтары, үлән беттәре бүлеп сығарған шәрбәтле шыйыҡса; ҡорттар уны йыйып, балға әйләндерә; уны япраҡ балы тиҙәр)*

**паразиты пчел** ҡорт паразиттары *(ҡорттарҙың тәненә йәки эске ағзаларына урынлашып, улар иҫәбенә йәшәгән ваҡ ҡына ҡоротҡостар, бөжәктәр, кимереүсе йәнлектәр һ. б.)*

**пасечная диагностика** умарта диагностикаһы *(ауырыған йәки үлгән ҡорттарҙың, үрсемдәрҙең тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап, уларҙың ниндәй сир менән ауырыуын билдәләү һәм уларҙы дауалау)*

**пасечная мастерская** умарталыҡ оҫтахана̇һы *(умартасылыҡ кораммалдарын яһау, йүнәтеү, шулай уҡ балауыҙ эшкәртеү, бал һурҙырыу өсөн тәғәйенләнгән махсус урын)*

**пасечный пастбищный участок** умарталыҡ майҙаны *(баллы үҫемлектәре етерлек кимәлдә булып, ҡорттарҙың осош радиусы яҡынса 2 километрҙан торған 1250 га ерҙе үҙ эсенә алған майҙан)*

**паспортизация пасек** умарталыҡтарҙы паспортлаштырыу *(умарталыҡ хаҡындағы барлыҡ мәғлүмәттәре булған һәм районның ветеринар табибы, хужалыҡ етәкселегe йәки умарталыҡ хужаһы тарафынан раҫланған документ)*

**паук** *зоол.* үрмәксе *(умарта ҡапҡасы аҫтында йәки төбөндә урынлашып, ауҙарына ҡорттарҙы эләктереп, зыян килтергән бөжәк)*

**пахучий орган** еҫ бүлеүсе ағза *(һәр ғаиләнең үҙ еҫе була, улар бер-береһен ошо еҫ буйынса таный)*

**певчий первак** тәүге тауыш биреүсе инә *(тәүге күс ҡарт инә менән бергә айырылып сығыусан, ул һәләк булған саҡта, аталанмаған йәш инә уның вазифаһын башҡара; сығыр алдынан ул тәү тапҡыр көйлө тауыш бирә)*

**пение маток** инә ҡорттарҙың тауыш биреүе *(инә ҡорттарҙың үҙ-ара аралашыу формаһы: ул күкрәк өлөшөндәге ҡанат мускулатураһы тирбәлеүенән хасил була һәм күстең тиҙҙән айырылып сығыуын белдерә)*

**первак** тәүге күс *(һуңғыларына ҡарағанда ҙурыраҡ та, күслөрәк тә була; сөнки уның менән оялағы ҡорттарҙың яртыһы бүленеп сыға; айырылып сығыр алдынан 15—18 көн самаһы эштән туҡтап, күс йыялар)*

**первый вылет** тәүге осош *(йылы көндәрҙең береһендә әҙ генә ваҡытҡа һауаға осоп сығалар; умартанан алыҫ китмәйенсә таҙарынып, ояларына ҡабаттан осоп инәләр)*

**перга** һитә *(кәрәҙ күҙәнәктәренә тултырылып, бал менән һылап ҡуйылған ҡорт йәттәһе)*

**перговые клещи** *зоол.* һитә талпандары

**перговые моли** һитә көйәләре *(ҡарышлауыҡтары он эсендә, кипкән емештәрҙә үрсеп, фәҡәт һитә менән генә туҡланыусы көйә)*

**переваривание кормов** аҙыҡтарҙы эшкәртеү *(ҡорттар аҙыҡты, йәғни һитә менән балды, йотҡолоҡ биҙҙәре бүлеп сығарған ферменттар ярҙамында эшкәртә; аҙыҡ ҡорттарҙың урта эсәгендә үҙләштерелә)*

**перегон семей в новый улей** ҡорттарҙы яңы умарталарға күсереү

**перегревание гнезда** ояларҙың эҫегә ҡыҙып китеүе *(саф һауа етмәүҙән оялағы ҡорттар ҡуҙғып китеп, умарта эсен ныҡ ҡыҙҙырып ебәрәләр, хатта кәрәҙҙәге бал һәм балауыҙ ирей башлай, ә ҡорттар бешегеп ҡара төҫкә инеп шешенәләр, шуға күрә умарталарҙы күсергәндә өҫтәмә корпустар ҡуйырға, уларҙы елләткестәр менән тәьмин итергә кәрәк)*

**передвижение пчел** ҡорттарҙың хәрәкәтләнеүе *(бал ҡорттарының аяҡтары һәм ҡанаттары ярҙамында бер урындан икенсе урынға ҡуҙғалып йөрөүе)*

**переключение пчел с одних растений на другие** ҡорттарҙың бер төр сәскәнән икенсеһенә күсеүе *(ҡорттарҙы бер төр сәскәнән икенсеһенә әүрәтеү өсөн умартаға яңы сәскә менән тәмләндерелгән 50 %-лы шәкәр иретмәһе ҡуялар)*

**период роста пчелиной семьи** ҡорт ғаиләһенең үҫеү осоро *(ҡорт ғаиләһенең күпләп үрсеүе умарталағы ҡорттар һанының артыуы менән билдәләнә; ул июль айына тура килә; артабан уның көсө әкренләп кәмей башлай)*

**пестик** *бот.* емешлек *(сәскәнең инәлек ағзаһы; ул үҙе өс өлөштән: ауыҙсанан, еңсәнән һәм емшәндән тора)*

**печатка меда** бал мисәтләү *(бал менән тулған кәрәҙ өҫтөн балауыҙ менән һылап ҡуйыу)*

**печатный расплод** мисәтләнгән үрсем *(мисәтләнгән кәрәҙ күҙәнәгендәге ҡарышлауыҡтар һәм көплө ҡорттар; ҡынаның ҡарайыуы ҡарышлауыҡтарҙың ҡортҡа әйләнә башлауын белдерә; артабан был күҙәнәктән йәш ҡорт ярала)*

**пешая локомация** аяҡтар ярҙамында йөрөү *(бал ҡорттарының сәскә, кәрәҙ өҫтөндә, умарта эсендә аяҡтары ярҙамында йөрөүе)*

**пешие пчелы** йәйәүле ҡорттар *(ҡанаттары нығынып етмәгән йәш ҡорттар һәм төрлө ауырыуҙан ҡанаттары зарарланған зәғиф ҡорттар)*

**питательность кормов** аҙыҡтың туҡлыҡлылығы *(аҡһымы, майҙары, углеводтары, минераль тоҙҙары, витаминдары булған аҙыҡ; уларҙы бал ҡорттары тат менән һеркәнән алалар)*

**племенная работа** тоҡомсолоҡ эше *(яҡшы тоҡомло ҡорттарҙы алыу һәм уларҙы артабан үрсетеү эше)*

**племенная семья** тоҡом ғаиләһе

**племенной завод** тоҡомсолоҡ заводы

**племенной совхоз** тоҡомсолоҡ совхозы

**плодовитость матки** инә ҡорттоң үрсеүсәнлеге *(инә ҡорттоң үрсеүсәнлеге йомортҡалары һанына ҡарап билдәләнә: ул тәүлегенә 1800–2000 дана йомортҡа һала; эре кәүҙәле, ҙур ҡорһаҡлы була; уның тоҡомлолоғо шулай уҡ оялағы үрсемдәр һанына ҡарап та баһалана)*

**плотность воска, меда, прополиса** балауыҙ, бал, ҡорт елеменең тығыҙлығы *(уларҙың ауырлыҡ һәм күләм нисбәттәре менән билдәләнгән физик характеристикаһы (г/см³); балауыҙҙыҡы – 0,956–0,970 г/см³; ҡорт елеменең – 1,120–1,187 г/см³ тәшкил итә, ә балдың тығыҙлығы составындағы һыуға һәм температураға бәйле)*

**подмаренник** *бот.* бөрмәкәй *(һәр быуынынан уратып сыҡҡан ваҡ япраҡлы, аҡ, ал, һары өйкөм сәскәле, йөнтәҫ ҡуш орлоҡло болон үләне; ҡорттар уның татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге яҡынса 20–25 кг/га)*

**подмор** үле ҡорттар

**подрезка крыльев у матки** инә ҡорттоң ҡанаттарын киҫеп ҡыҫҡартыу *(күс айырылып сыҡмаһын өсөн һәм инә ҡорттоң йәшен билдәләү өсөн башҡарыла)*

**подсадка маток** инә ҡорт ебәреү *(ғаиләгә йәш инә ебәреү өсөн ҡарт инәне айырып алырға кәрәк; артабан уның ҡабул*

*ителеү-ителмәүе һауа шарттарына, аҙыктың муллығына бәйле)*

**подсиливание семей** ғаиләләрҙе көсәйтеү *(көсһөҙ ғаиләләрҙе өлгөргән үрсемдәре булған өҫтәлмә рамдар ҡуйыу юлы менән көсәйтәләр)*

**подснежник обыкновенный** *бот.* ябай умырзая *(лютиктар ғаиләһенә ингән, иртә яҙын сәскә ата торған тетмәкәй япраҡлы, эре сәскәле үҫемлек)*

**подсолнечник** *бот.* көнбағыш *(ҡатмарлы сәскәлеләр ғаиләһенә ингән оҙон һабаҡлы, таҡыя башлы, һары сәскәле бер йыллыҡ культуралы үҫемлек; шәкәрлелеге яҡынса 75–112 кг/га)*

**подставка под улей** умарта таҫтағы *(дүрткел таҡтанан тояҡлап умарта ултыртырлыҡ итеп яһалған 40–60 см бейеклегендәге йәйланма)*

**подушечка** *анат.* ҡорт тәпәйе *(ҡорт аяғының һуңғы быуынында урынлашҡан йомшаҡ табаны)*

**пожарный инвентарь** янғын һүндереү ҡорамалдары *(ут һүндергес, көрәк, биҙрә, ҡом, һыу тултырылған мискә)*

**поилки для пчел** ҡорт улағы *(ҡорттар эсһен өсөн һыу һалып ҡуя торған ике метр оҙонлоғондағы улаҡ)*

**полевые пчелы** ҡыр ҡорттары *(улар бал йыйыусы һәм шәйләк ҡорттарға бүлеп йөрөтөлә: бер төркөмө, йәғни 58%-ты, фәҡәт тат, икенсеһе, йәғни 25%-ты, – һеркә, өсөнсөһө, йәғни 17%-ты, тат та, һеркә лә йыя)*

**полет пчелы** ҡорт осошо *(ҡанаттар ике төрлө функция үтәй: кәүҙәне һауала тотоп торорға һәм атлап йөрөргә ярҙам итә; бал ҡорто осҡанда секундына 250 тапҡыр ҡанат ҡаға; осоу тиҙлеге сәғәтенә 60 км-ға етә)*

**полиморфизм** полиморфизм *(бал ҡорттарының енескә ҡарап өскә бүлеп йөрөтөлөүе; инә ҡорттар үҙҙәре генә лә ике төркөмгә: инә ҡорттарға һәм эшсе ҡорттарға бүлеп йөрөтөлә; инә ҡорт фәҡәт йомортҡа һала; эшсе ҡорт аҙыҡ хәстәрләй, кәрәҙ ҡоя, бала тәрбиәләй һ. б., әммә енес ағзалары үҫешмәгән була, ә эре ҡорттар иһә фәҡәт инә ҡортто аталандырыу вазифаһын үтәй)*

**полировка ячеек** күҙәнәктәрҙе шымартып ялтыратыу *(инә ҡорт йомортҡа һалыр алдынан, эшсе ҡорттар күҙәнәкте аҫҡы яңаҡтарынан бүленеп сыҡҡан шыйыҡса менән шымартып ялтыраталар; бер күҙәнәкте эшкәртеү өсөн яҡынса 40 мин ваҡыт китә)*

**полифлерный мед** йыйылма (ҡатнаш) бал *(төрлө үсемлек татынан йыйылған бал)*

**половая зрелость трутней и маток** әре ҡорт менән инә ҡорттарҙың енси яҡтан өлгөрөүе *(әре ҡорттар — 12–14 тәүлектән, инә ҡорттар 7—8 тәүлектән олгөрөп етә)*

**поляриметрическая оценка меда** балдың поляриметрик баһаһы *(сәскә балы менән япраҡ балының айырмаһын билдәләгәндә ҡулланыла)*

**понос пчел** ҡорттарҙың эсе китеү

**популяция пчел** ҡорттар популяцияһы

**породная группа** тоҡом төркөмө *(селекция юлы менән бер тоҡомдағы ҡорттарҙы йәки бер нисә тоҡомдо ҡушыу ысулы менән алынған ҡорттар ғаиләһе)*

**породоотличительные признаки** тоҡомдоң айырмалыҡлы билдәләре *(уларға ҡорттарҙың төҫө, томшоҡ оҙонлоғо, балды мисәтләүҙәге айырмалыҡтар һ. б. инә)*

**породы пчел** ҡорт тоҡомдары *(ҡорт тоҡомдарына итальян ҡорттары, украин ҡорттары, башҡорт ҡорттары һ. б. инә)*

**посадка медоносов** баллы үсемлектәр ултыртыу *(баҫыуҙарҙы һәм баҡсаларҙы ел-дауылдан ышыҡлау, шулай уҡ тирә-йүнде йәшелләндереү маҡсатында йүкә, сәрүәр, саған ағастарын ултыртыу икеләтә отошло: улар ҡорттар өсөн аҙыҡ базаһы булып та тора)*

**постановка магазинов** магазиндар ҡуйыу *(күпләп тат йыйыр алдынан, ояларҙы киңәйтеү өсөн, умартаға өҫтәп магазиндар ҡуйыу)*

**постэмбриональное развитие** ҡорт яралғыһының үсеше *(ҡарышлауыҡтар йомортҡанан сыҡҡанға тиклем һөт эсендә йәшәй; көбөн һалыр алдынан ашауҙан туҡтай; көбөн һалғандан һуң ҡурсаҡҡа әйләнә һәм эске, тышҡы ағзалары*

*үсешә башлай; артабан һыланған балауыҙҙы кимерә-кимерә күҙәнәк эсенән асыҡ һары төҫтәге ҡорт булып килеп сыға)*

**потолок улья** умарта түшәме *(төрлө бәрелеү-һуғылыуҙарҙан һаҡлау һәм умарта эсендә микроклимат булдырыу өсөн хеҙмәт итә; рам менән түшәм араһы 8 мм була; елләтеү өсөн 3х3 мм ҙурлығындағы тимер селтәр ҡуйыла)*

**потребность пчел в пыльце** ҡорттарҙың һеркәгә булған ихтыяжы *(ҡорттарҙың һеркәгә булған ихтыяжы йылына яҡынса 35 кг тәшкил итә: ул 130 мең ҡорттан торған ғаиләне ашатыуға, татты балға әйләндереүгә, ҡышын 25 мең ҡортто аҫрауға һәм артабан ғаиләне ишәйтеүгә сарыф ителә)*

**прибыль** табыш *(бал һатып кергән аҡсанан үҙкиммәтен алып ташлағандан һуң ҡалған өлөш)*

**прививка личинок** ҡарышлауыҡ күсереп ултыртыу *(яһалма көбөләргә тоҡомло ғаилә ҡарышлауығы күсереп ултыртыу)*

**прививочная рама** ҡарышлауыҡ күсереп ултырта торған рам *(инә ҡортто яһалма юл менән үрсеткәндә ҡулланыла)*

**приемы повышения нектаропродуктивности медоносных растений** баллы үҫемлектәрҙең татлылығын арттырыу юлдары *(тупраҡҡа фосфор, калий һәм башҡа микроэлементтар индереү юлы менән ғәмәлгә ашырыла)*

**прилетная доска** ҡунаҡка *(ҡорттар ҡунһын өсөн кейәгә беркетеп ҡуйылған буй таҡта)*

**припасечный участок** умарта алды майҙансығы *(һәр 100 баш умартаға 8–10 га ер иҫәбенән ҡалдырылған майҙан)*

**продолжительность жизни матки, трутня и рабочей пчелы** инә, әре һәм эшсе ҡорттарҙың ғүмер оҙонлоғо *(инә ҡорттар — 5 йыл; әре ҡорттар — 3–6 ай, эшсе ҡорттар 20–30 көн йәшәй)*

**продуктивность пчелиной семьи** ҡорт ғаиләһенең продуктлылығы *(һәр умарта башынан алынған продукция миҡдары; ғәҙәттә уны аҡсалата иҫәпләйҙәр)*

**промышленное выведение маток** инә ҡорттарҙы күпләп үрсетеү *(тоҡомло инә ҡорттарҙы йыл әйләнәһенә күпләп*

*үрсетеү махсуслаштырылған эре хужалыктарҙа алып барыла: был эш ҡарышлауыҡтарҙы күсереп ултыртыу ярҙамында башҡарыла)*

**прополис** ҡорт елеме *(ҡорттар ағас бөрөләренән, япраҡтарынан йыйылған ыҫмалалы есемдәрҙе эшкәртеп яһаған ҡарағусҡыл йәшел төҫтәге йәбешеүсән матдә; унда 55% ыҫмала һәм бәлзәм, 10% эфир майы, 30% балауыҙ һәм 5% һеркә бар; һәр ғаилә миҙгеленә 100–150 г прополис йыя; ул медицинала киң ҡулланыла)*

**прополисование гнезда** ояны елемләү *(ҡорттарҙың умарта стеналарын, рамдағы тишек-тошоҡтарҙы ҡорт елеме менән һылап шымартыуы)*

**противороевые меры** күсте айыртмау саралары *(селекция юлы менән күстең айырылып сығыуға булған инстинктын туҡтатыу алымдары)*

**профилактика** профилактика *(ҡорттарҙың ауырыуҙарын иҫкәртеү өсөн алдан күрелгән саралар)*

**психометр** психометр *(һауаның сағыштырма дымлылығын билдәләй торған прибор)*

**пустырник обыкновенный** *бот.* арыҫлан ҡойроғо *(июнь–август айҙарында сәскә ата торған үҫемлек; шәкәрлелеге 50–70 кг/га)*

**пути лета пчел** ҡорттарҙың осоу юлы *(елһеҙ аяҙ көндә ҡорттар 3–5 м бейеклегендә оса; осоу тиҙлеге секундына 8–12 м)*

**пчела медоносная** бал ҡорто *(ярыҡанатлылар төркөмөнә ҡараған нәҙек билле, бал йыя торған бөжәк: улар ғаилә булып йәшәй; ғаиләлә бер инә ҡорт, бер нисә йөҙ әре ҡорт һәм 10–80 мең самаһы эшсе ҡорт була)*

**пчелиный расплод** ҡорт үрсеме *(аталанған йомортҡалар, ҡарышлауыҡтар, көплө ҡорттар, күҙәнәктән сығып өлгөрмәгән бала ҡорттар)*

**пчеловод** умартасы, ҡортсо

**пчеловодство** умартасылыҡ, ҡортсолоҡ

**пчелоед, осоед** *зоол.* һағыҙаҡ ыласыны *(һағыҙаҡ, бал ҡорто һ. б. ярыҡанатлылар менән туҡланған йыртҡыс ҡош)*

**пчелы, вентилирующие гнездо** елпеүсе ҡорттар *(ҡанаттарын елпеп, ояла даими микроклимат һәм буш күҙәнәктәргә һыу ташып, даими дымлылыҡ булдырыусы ҡорттар)*

**пчелы-приемщицы** ҡабул итеүсе ҡорттар *(йыйыусы ҡорттар килтергән татты мороно менән ҡабул итеп, буш күҙәнәктәргә тултырыусы йәш ҡорттар)*

**пчелы-разведчицы** шәйләк ҡорттар *(сәскәле урынды эҙләп табып, шул ергә әйҙәүсе ҡорттар)*

**пчелы-сборщицы** йыйыусы ҡорттар *(сәскәнән сәскәгә ҡунып тат йыйыусы, үрсемдәрҙе тәрбиәләүсе төп эшсе ҡорттар)*

**пчелы сторожевые** һаҡсы ҡорттар *(кейә янында йөрөп, оялағыларҙы короҡкос бөжәктәрҙән, һурнаҡтарҙан һаҡлай торған йәш ҡорттар)*

**пчелы-трутовики** эшсе ҡорттар *(билдәле шарттарҙа йомортҡа һалырға һәләтле эшсе ҡорттар)*

**пыльца, цветень** *бот.* һеркә *(сәскәле үҫемлектәрҙең саң кеүек ваҡ ҡына аталыҡ орлоғо; аҡһымға, майҙарға, углеводҡа, ферменттарға, витаминдарға һәм башҡа биологик әүҙем матдәләргә бай)*

**пыльцевой токсикоз** һеркә токсикозы *(ҡорттарҙың зәһәрле сәскә һеркәһе менән ағыуланыуы; ундай сәскәләргә таҡыябаш үләне, тәмәке сәскәһе, бүре сейәһе һ. б. инә)*

**пыльценосные растения** *бот.* һеркәле үҫемлектәр *(һеркәһе булған ябыҡ орлоҡло үҫемлектәр: ҡайын, имән, ҡарама һ. б. инә; уларҙың күбеһе ел ярҙамында аталана)*

**пыльцеуловитель** һеркә йыйғыс

# Р

**работа пчел** ҡорттар башҡарған эштәр *(ҡорттар умарта эсендә лә, яланда ла эш менән мәшғүл; умарталағы эшкә: инә ҡортто, үрсемде тәрбиәләү, кәрәҙ ҡойоу, буш күҙә-*

*нәктәрҙе бал һәм һитә менән тултырыу, ояла даими йылылыҡ, дымлылыҡ булдырыу, уны сүп-сарҙан таҙартыу, күҙәнәктәрҙе мисәтләү, ғаиләне короткос бөжәктәрҙән һаҡлау һ. б. инә; яландағы эшкә: тат, һеркә йыйыу, ғаиләне һыу менән тәьмин итеү һ. б. керә)*

**рабочая нагрузка пчелы** ҡорттоң эш күләме *(ҡорттоң умартаға алып килгән тат миҡдарын белеү өсөн, осоп сыҡкан 30 ҡорт менән осоп килгән 30 ҡортто үлсәп, айырмаһын билдәләйҙәр; килеп сыҡкан һанды ҡорттар һанына бүлеп, һәр береһе алып ҡайтҡан тат миҡдарын иҫәпләп сығаралар; аяҙ көндө һәр ҡорт үҙенең бөрләтәүендә 30—50 мг тат алып ҡайта)*

**рабочее состояние семьи** ғаиләнең эшсән хәле *(ҡорттарҙың эшсән хәлен умарта эсендәге һәм тышындағы торошонан сығып билдәләйҙәр: улар күмәкләшеп үрсем тәрбиәләйҙәр, кәрәҙ ҡоялар, аҙыҡ һаҡлығы йыйып, уны эшкәртәләр; инәһеҙ күстә кәрәҙ ҡороу, тат һәм һеркә ташыу бөтөнләй кәмей; күс айырыр алдынан улар йомғаҡ-йомғаҡ булып кейә янына туплана башлай һ. б.)*

**рабочий день пчел** ҡорттарҙың эш көнө *(ҡорттарҙың тәүлек эсендәге эш ваҡыты уларҙың тоҡомона, биологик хәленә, һауа торошона бәйле: уларҙың эш көнө иртәнге 4-тән киске 21 сәғәт 30 минутҡа тиклем дауам итә; ә умарта эсендәгеләре көнөн-төнөн эшләй)*

**рабочий день семьи** ғаиләнең эш көнө *(ҡорттар ысыҡ кибеп, сәскәләр татты ныҡлап бүлеп сығарған мәлдә әүҙемләшәләр; аяҙ йылы көндәрҙә иртәнге 4-тән киске 21 сәғәт 30 минутҡа тиклем тат һәм һеркә йыйыу менән мәшғүлдәр)*

**радиус лета пчел** ҡорттарҙың осоу радиусы *(ҡорттарҙың тат, һеркә, һыу эҙләп осҡандағы аралыҡ оҙонлоғо уларҙың биологик мөмкинлегенә, тоҡомона, урындың үҙенсәлегенә бәйле: умарталыҡ сәскәле яланда урынлашһа, улар 500—1000 м-ға тиклем оса; сәскәләрҙең булыу-булмауына ҡарап, 2—5 км-ға тиклем осоуҙары ихтимал)*

**развитие пчелы** ҡорттоң үҫеше *(ҡорттоң үҫеше түбәндәге осорҙарҙы үҙ эсенә ала: йомортҡалағы яралғы — ҡарышлауыҡҡа, ҡарышлауыҡ — көплө ҡортҡа, көплө ҡорт бала ҡортҡа әйләнә)*

**раздражимость пчел** ҡорттарҙың ҡуҙғыуы *(һауа шарттарының насарайыуы, ризыҡтың наҡыҫ булыуы һ. б. сәбәптәрҙән ҡорттарҙың мыж килеп, тыныҫһыҙлана башлауы)*

**размещение пасек** умарталарҙы урынлаштырыу *(умарталарҙы баҫыуҙан 500—700 м, еләк-емеш баҡсаһынан 200–250 м йыраҡлыҡта урынлаштырыу маҡсатҡа ярашлы була)*

**районирование пчел** ҡорттарҙы районлаштырыу *(билдәле район шарттарына ҡулайлаштырылған юғары продуктлы ҡорттар үрсетеү)*

**районная племенная пасека** район тоҡомсолоҡ умарталығы *(йөҙ баш умартаһы булған юғары продуктлы алдынғы умарталыҡ: ул тоҡом материалдарын үрсетеү менән шөғөлләнеп, районды инә ҡорт һ. б. менән тәьмин итеп тора ала)*

**рамка-кормушка** ялғаш рам *(ҡорттарға шәкәр сиробы һалып ҡуя торған дүрткел һауыт)*

**рамка-питомник** питомник рам *(өлгөргән инә көбө йәки аталанған инә ҡорттары булған ҡорт ситлеген ваҡытлыса һаҡлау өсөн ҡулайлаштырылған рам)*

**рамка-поилка** улаҡ рам *(ҡорттарға һыу һалып ҡуя торған махсус рам)*

**рамки ульевые** умарта рамдары *(умарта эсенә балауыҙ беркетеп ҡуя торған дүрткел ағас тирәс)*

**рамочный улей** рамлы умарта

**ранний облет пчел** ҡорттарҙы ваҡытынан алда осортоп ҡарау *(насар ҡышлаған ҡорттарға ярҙам итеү маҡсатында эшләнелә: һауа температураһы 12–14°С-ҡа күтәрелһә, умартаны тышҡа сығаралар; уның өҫкө ҡапҡасын асҡандан һуң ҡорттар тышҡа йылыға осоп сығалар; шул арала оялағы ҡарайған кәрәҙҙәр яҡшылары*

*менән алмаштырыла, ә кисен умарта ҡабаттан эскә индереп ултыртыла)*

**рапс** *бот.* рапс *(әүернә сәскәлеләр ғаиләһенә ингән майлы үҫемлек; 28–30 көн буйы сәскәлә ултырған был үҫемлектең татын да, һеркәһен дә ҡорттар яратып йыя; шәкәрлелеге 80–100 кг/га, һеркәһе 90–180 кг/га)*

**распечатывание сотов** кәрәҙ ҡынаһын асыу *(мисәтләнгән кәрәҙ ҡынаһын бал айыртыу алдынан эҫе һыуҙа йылытылған махсус яҫы бысаҡ менән ҡырҡып алыу)*

**расплод** үрсем *(күҙәнәк эсендәге аталанған йомортҡалар, ҡарышлауыҡтар, көплө ҡорттар)*

**расплод трутневый** әре ҡорт үрсеме *(күҙәнәк эсендәге аталанмаған йомортҡалар, ҡарышлауыҡтар, көплө ҡорттар: әре ҡорт ҡарышлауығы йомортҡанан 3–5 тәүлек эсендә сыға, 7 көн асыҡ күҙәнәктә, 14 көн ябыҡ күҙәнәктә йәшәй; ояла бер үк ваҡытта 3 мең әре ҡорт күҙәнәге булыуы ихтимал)*

**резеда душистая** *бот.* хуш еҫле резеда *(ҡәнәфер һымаҡтар ғаиләһенә ингән, башаҡланып торған аҡ, һары йәки йәшкелт һары сәскәле түшәлеп үҫкән үҫемлек; шәкәрлелеге 120–130 кг/га)*

**рентабельность** рентабеллек *(балды һатҡандан һәм ҡорт аҫрау өсөн тотонолған аҡсанан ҡалған керем; ҡортсолоҡта ул 10% тәшкил итә)*

**рефлекс безусловный** *см.* **безусловный рефлекс**

**рефлекс условный** *см.* **условный рефлекс**

**рефлексы** рефлекстар *(тере организмдың тышҡы тәьҫиргә үҙәк нервы системаһы ҡатнашлығында яһаған яуап реакцияһы)*

**роевая горячка** күстең ҡотороноуы *(күстәрҙең тәртипһеҙ рәүештә айырылып сығыу күренеше)*

**роевая пора** күс айырыу мәле *(күстәрҙең айырылыу мәле ғаилә көсәйгәндән һуң башланып, 30–40 көн дауамында бара; ул тат йыйыуҙы, кәрәҙ ҡойоуҙы кәметә)*

**роевая свобода** ирекле күс айырыу *(корттарҙың ирекле рәүештә күс айырыуы солоҡ умартала һәм ағас ҡыуышлығына ойлаған ҡорттарҙа күҙәтелә)*

**роевая энергия** күс ҡеүәте *(айырылып сыҡҡан күстең ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә яңы оя ҡороп, ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ туплай алыу һәләте: һәр бер ҡорт үҙе менән 2—3 көнгә етерлек аҙыҡ алып сыға; был инстинкт быуаттар буйы дауам итеп, нәҫел һаҡлауҙа ҙур роль уйнай)*

**роевня** моҙға, ҡорт тубалы *(айырылған күсте ябып тороу өсөн ҡабыҡтан, туҙҙан һәм башҡа нәмәнән эшләнгән һауыт)*

**роевое состояние** күстең айырылыр алдынан булған торошо *(шәйләк ҡорттар яңы урын эҙләй, умарта эсендәгеләре йомғаҡ булып укмаша; ояла йылылыҡ 35—36°С-ҡа күтәрелә; тат, һеркә йыйыу тиҙлеге кәмей)*

**роение** күс айырыу *(күс айырыуҙың нигеҙендә үрсеүгә, ишәйеүгә булған инстинкт тора: ғаиләнең бер өлөшө инә ҡорт менән бергә бүленеп сыға һәм яңы ғаилә барлыҡҡа килә)*

**рой** күс *(төп оянан айырылып сыҡҡан яңы ғаилә; күс ҡарт инәнән йәки йәш инәнән, бер нисә тиҫтә мең эшсе ҡорттан һәм бер нисә йөҙ әре ҡорттан тора; уның менән бергә ояләғы ҡорттарҙың 50—60%-ы бүленеп сыға; тәүге күс һан яғынан ҙур була, күләме 2,5—3 кг-ға етә; күстәге ҡорттар тиҙ генә сағып бармай: уларҙың бөрләтәүҙәре 2—3 көнгә етерлек бал менән тулған була)*

**рой свалочный** ойошҡан күс *(күстәрҙең бер юлы бер ергә килеп һарығыуынан барлыҡҡа килгән яңы күс: ауырлығы 10—15 кг-ға етә, шуға күрә уны тиҙ генә күстәргә айыралар һәм ояларға ябалар)*

**рой «ссыпчак»** тупланма күс *(күстәре айырылып сыҡҡан ғаиләне бер ояға туплау юлы менән яһалған яңы ғаилә: бер генә инә ҡорт ҡалдырыла; быңдай ғаиләлә үрсем артмай, ҡорттар фәҡәт тат йыйыу менән мәшғүл була)*

**ройливость семьи** ғаиләнең күс айырыуға булған ихтыяжы *(ҡорттарҙың үрсеүгә, нәҫел ҡалдырыуға ҡарата булған инстинкты уларҙың тоҡомона, ояләғы һәм тирә-яҡтағы тәбиғәт шарттарына бәйле)*

**ростовые вещества** үҫтереү матдәләре *(үҫемлек күҙәнәктәрендә хасил булған был матдә түбән концентрацияла үҫеүҙе тиҙләтә, ә юғары концентрацияла үҫеүҙе тотҡарлай; ҡортсолоҡ продукттарына тат һәм һеркә аша килеп инә)*

**ротовые органы** *анат.* ауыҙ ағзалары *(бал ҡортоноң ауыҙ ағзалары өҫкө һәм аҫҡы яңаҡтан, йәғни аҫҡы ирен менән моронлан тора: өҫкө яңаҡ ярҙамында балауыҙҙы кимереп йомшарта, һитәне ышҡып ашай, дошмандан һаҡлана; мороно ярҙамында сәскәнең татын һура һ. б.)*

**рябина обыкновенная** *бот.* миләш *(гөлйемеш сәскәлеләр ғаиләһенә ингән абаға япраҡлы, һарғылт ҡыҙыл төҫтәге әскелтем емешле ағас; бал ҡорттары уның һеркәһен дә, татын да яратып йыя; шәкәрлелеге 30—45 кг/га)*

## С

**сальмонеллез** *вет.* сальмонеллез *(сальмонелла бактерияһынан таралып бал ҡорттарының эске ағзаларын зарарлай торған йоғошло ауырыу; уны булдырмаҫ өсөн умарталыҡты мал-тыуар фермаһынан алыҫ урынлаштыралар)*

**самоопыление** *бот.* үҙен-үҙе һеркәләндереү

**санитария** санитария *(ҡорттарҙың таҙалығын һаҡлауҙы, төрлө ауырыуҙарҙан ҡурсалауҙы һ. б. үҙ эсенә алған ғәмәли саралар)*

**сахарный мед** шәкәр балы *(ҡорттарҙың шәкәр иретмәһенән йыйған балы; яңы айыртылғаны асыҡ һары төҫтә, шыйыҡ һәм еҫһеҙ була)*

**сахарный сироп** шәкәр иретмәһе *(1:1; 1:1,5; 1:2 нисбәтендә ҡайнаған һыуға шәкәр һалып иретелгән шыйыҡлыҡ: ҡортсолоҡта өҫтәмә аҙыҡ сифатында ҡулланыла)*

**сбор цветочной пыльцы пчелами** ҡорттарҙың һеркә йыйыуы *(эшсе ҡорттарҙың 30%-ы ике аҙна буйы һеркә йыйыу менән мәшғүл: көнөнә 3–5 тапҡыр осош яһап, һәр осошҡа 35 минуттан 1 сәғәт 55 минутҡа тиклем ваҡыт сарыф итәләр)*

**сборка гнезд на зимовку** ҡышҡылыҡҡа оя әҙерләү *(көҙгө эштәр тамамланыу менән ҡышҡа әҙерлек башлана: умарталағы сифатһыҙ рамдар 2 кг-дан кәм булмаған баллы кәрәҙҙәр менән алмаштырыла һ. б.)*

**свита матки** инә ҡортто тәрбиәләүселәр *(инә ҡорт йомортҡа һалған мәлдә уны даими рәүештә ашатып, тәрбиәләп торған ҡорттар)*

**свищевой маточник** көбөлө инә ҡорт *(юғалған йәки ҡапыл үлгән инә ҡорт урынына төҙөлгән яңы инә көбө)*

**сезонная изменчивость пчел** ҡорттарҙың миҙгелгә бәйле үҙгәрештәре *(миҙгелгә ҡарап ҡорттарҙа була торған күс айырыу, уҫаллашыу, урлашыу, аҙашыу һ. б. һымаҡ үҙгәрештәр)*

**сезонные работы** миҙгелле эштәр *(умарталыҡтағы мәшәҡәттәр миҙгеленә ҡарап яҙғы, йәйге, көҙгө һәм ҡышҡы эштәргә бүлеп йөрөтөлә: яҙын ҡорттарға тейешле шарттар булдырыла, төрлө профилактик саралар үткәрелә; йәйен табыш алыу өсөн көрәш дауам итә; көҙөн ҡышҡа әҙерлек башлана; аҙыҡтың сифаты тикшерелә, оя йылытыла һ. б.)*

**секционная рама** секция рамы *(кәрәҙле бал алыуға тәғәйенләнгән рам: тышҡы үлсәме 110×103 мм, киңлеге 42 мм, ҡалынлығы 3 мм була)*

**селекция пчел** ҡорттарҙы селекциялау *(фәнни ысулдар ярҙамында тоҡомло ҡорттар үрсетеү)*

**семья-воспитательница** тәрбиәсе ғаилә *(яһалма юл менән инә ҡорт үрсеткәндә уның ҡарышлауығын тәрбиәләп үҫтергән ғаилә: төрлө йәштәге үрсемдәре, балы, һитәһе булған көслө ғаилә һайлап алына)*

**семья-медовик** балсы ғаилә *(бал йыйыу маҡсатында эшсе ҡорттарҙы ла индереп яһалған ғаилә)*

**семья-стартер** стартер ғаилә *(инә көбөнә ихтыяж булғанда файҙаланыла торған ысул: көслө ғаиләнең инәһен, барлыҡ үрсемен айырып алалар, унда фәҡәт 3–4 дана баллы, һитәле кәрәҙ генә ҡалдырыла; 100 бөртөк тоҡомло ҡарышлауыҡ килтереп ҡушыла һәм, 24 сәғәт үткәс тә, тәрбиәсе ғаиләләргә бүлеп сығарыла)*

**семяприемник матки** *анат.* инә ҡорттоң орлоҡ һаҡлағысы *(инә ҡорттоң сперматозоидтарҙы үҙендә һаҡлай торған йомро ҡыуыҡ рәүешендәге ағзаһы)*

**септицемия** *вет.* септицемия *(ҡорттарҙы күпләп ҡыра торған йоғошло ауырыу)*

**сераделла** *бот.* сераделла *(бер йыллыҡ ҡуҙаҡлы үҫемлек; көҙ буйы сәскә ата; шәкәрлелеге 40 кг/га)*

**серая горная кавказская пчела** кавказдағы һоро төҫтәге тау ҡорто *(оҙон моронло, һоро төҫтәге ваҡ ҡорт; һыуыҡҡа, төрлө ауырыуҙарға бирешеп барыусан)*

**сернистый газ** көкөртлө газ *(ҡортсолоҡта балауыҙ көйәһе менән көрәшкәндә ҡулланыла)*

**сетка лицевая** битлек *(умарта ҡарағанда биткә кейә торған селтәр)*

**сигнализация у пчел** ҡорттарҙың сигнал биреүе *(күреү, еҫ тойоу, ишетеү ҡуҙғытҡыстары ярҙамында ғәмәлгә ашырыла)*

**сила семьи** ғаилә көсө *(кәрәҙҙе һырып алған ҡорттар менән рамдар араһындағы ҡорттар иҫәбенән сығып билдәләнә: ғаиләнең иң көслө сағы бал йыйыу мәленә тура килә)*

**сильная семья** көслө ғаилә *(көслө ғаиләнең ҡышлау алдынан 2 кг, ҡышлау үткәс 1,5–1,8 кг, бал йыйыу алдынан 4,5–6 кг ауырлығындағы ҡорто була: ундай ғаилә ҡышҡы һыуыҡҡа, төрлө ауырыуҙарға бирешмәй, табышты мул бирә)*

**сильфия пронзеннолистная** *бот.* иләк япраҡлы сильфия *(һары сәскәле, күп йыллыҡ мал аҙығы культураһы; бал ҡорттары татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 100–150 кг/га)*

**синица** *зоол.* ҡарабаш турғай *(умарталыҡтарға эйәләшә һәм, ҡорттарға һөжүм итеп, ҙур зыян килтерә)*

**синюха голубая** *бот.* фаягөл *(июнь—июль айҙарында сәскәлә ултырған күп йыллыҡ үҫемлек; шәкәрлелеге 60—70 кг/га)*

**сироп лечебный** дауалау сиробы *(ҡорттарҙы дауалау өсөн антибиотиктар ҡушып яһалған шәкәр иретмәһе)*

**ситечко** һөҙгөс *(балды һөҙөп таҙарта торған иләк һымаҡ нәмә)*

**скворец** сыйырсыҡ *(тәбиғәткә, умарталыҡҡа зыян килтереүсе бөжәктәр менән туҡланыусы ҡош)*

**скелет пчелы** ҡорт һөлдәһе *(ҡорт кәүҙәһенең кутикуланан торған тышҡы ҡаты; эске ағзаларҙы һаҡлау һәм тәндәге шыйыҡсаны киптермәй тотоу өсөн хеҙмәт итә)*

**слабая семья** көсһөҙ ғаилә *(көҙөн — 1,2 кг, яҙын — 1 кг ауырлығындағы ҡорттары булған ғаилә: йәйен фәҡәт үҙенә аҙыҡ өсөн генә бал йыя; ҡышҡы һалҡындарға, төрлө ауырыуҙарға бирешеүсән)*

**слеты пчел** ҡорттарҙың үҙ ояһын ташлап сығыуы *(ояла тейешле шарттар булмағанда ҡорттарҙың яңы урынға осоп китеүе)*

**слива домашняя** *бот.* йорт сливаһы *(роза сәскәлеләр ғаиләһенә ингән емеш ағасы; шәкәрлелеге 25 кг/га)*

**слух пчелы** ҡорттоң ишетеү һәләте *(ҡорттар ишетмәй: тауышты тойоу ағзалары ярҙамында ҡабул итә; улар алғы аяҡ балтырында, мыйыҡсаның икенсе быуынтығында урынлашҡан)*

**случной пункт** ҡорттарҙың аталаныу урыны

**смена маток** инә ҡорттарҙы алмаштырыу *(был эш планлы рәүештә лә, мәжбүри хәлдә лә башҡарыла: инә ҡорт ғаиләне ике миҙгел бер рәттән хеҙмәтләндерһә, уны планлы рәүештә йәш һәм тоҡомло инә менән алмаштыралар, әгәр инә ҡорт көтмәгәндә имгәнһә, уны шунда уҡ алмаштырырға мәжбүр булалар)*

**смешанный посев** ҡатнаш сәсеү *(бер үк ваҡытта бер үк ергә ике йәки унан да күп культуралар сәсеү)*

**смешанный расплод** ҡатнаш үрсем *(үҫеш стадияларының бер-бер артлы килеү күренеше: йомортҡанан–ҡарышлауыҡ, ҡарышлауыҡтан–көплө ҡорт, көплө ҡорттан бала ҡорт яралыу)*

**смородина красная** *бот.* ҡыҙыл ҡарағат *(әскелтем ҡыҙыл емешле ҡыуаҡ үҫемлек; май аҙағында сәскә ата; шәкәрлелеге 25 кг/га)*

**смородина черная** *бот.* ҡара ҡарағат *(әскелтем ҡара емешле ҡыуаҡ үҫемлек; шәкәрлелеге 30 кг/га)*

**снозы** тағара *(балауыҙҙы тотоп тороу өсөн түмәр умарта йәки солоҡ эсенә ҡуйылған нәҙек кенә таяу сыралар)*

**сныть обыкновенная** *бот.* еҫле балтырған *(көпшә һабаҡлы, киң киртләс япраҡлы, сатыр сәскәле күп йыллыҡ үҫемлек; шәкәрлелеге 30 кг/га)*

**снятие магазинов** магазиндарҙы умартанан алыу *(бал йыйыу миҙгеле тамамланғас, ҡорт ғаиләһен кәметеү маҡсатында эшләнә)*

**снятие роя** һарыған күсте һоҫоп алыу *(һарыған күсте моҙғаға йыйып алыу)*

**созревание матки** инә ҡорттоң өлгөрөүе *(инә ҡорт 7–10 көнлөк сағында енси яҡтан өлгөрә һәм аталаныу өсөн осоп сыға)*

**сокращение гнезда** ояны кәметеү *(ҡыш сығыу менән, умарталағы ҡорттар һанына ҡарап, кәрәҙ рамдары кәметелә)*

**солевой токсикоз** тоҙ токсикозы *(аҙыҡ составындағы тоҙ 2%-тан артып китһә, ҡорттар ағыуланып ҡырыла башлай)*

**сотохранилище** кәрәҙҙәр һаҡлау бүлмәһе

**соты** кәрәҙҙәр *(кәрәҙ күҙәнәктәренә ҡорттар йомортҡа һала, унда бала тәрбиәләй; бал, һитә туплай; 8 мең күҙәнәктән торған кәрәҙҙә 10–12 быуын тәрбиәләнә ала, артабан ул ҡарая, кесерәйә һәм яңыһы менән алмаштырыла)*

**соты для зимних пчел** ҡышлыҡ кәрәҙҙәр *(ҡышлыҡ өсөн аҙыҡ һаҡлана торған кәрәҙҙәр)*

**сперматозоиды трутня** әре ҡорт сперматозоидтары *(әре корттоң курсаҡ дәүерендә ук үҫешкән енес күҙәнәктәре; өлгөргән әре ҡортта 10–11 млн сперматозоид була)*

**сплошной расплод** тотош үрсем *(үрсемле күҙәнәктәрҙән генә торған кәрәҙ; ул көслө ғаиләләрҙә генә осрай)*

**способы выведения маток** инә ҡорт үрсетеү ысулдары *(инә ҡорттарҙы тәрбиәсе ҡорттарҙың ояһына тоҡомло ғаилә карышлауыктарын күсереү юлы менән дә үрсетәләр)*

**способы очистки воска** балауыҙ таҙартыу ысулдары *(85–95°С-лы һыуҙа ирегән балауыҙҙы тондоралар ҙа өҫтәге таҙа өлөшөн тиҙ генә һөҙөп алып таҙарталар)*

**среднерусская пчела** Рәсәй урта һыҙаты ҡорто *(Урта Рәсәйҙә аҫралған ҡарағусҡыл төҫтәге әре ҡорт; кышка сыҙамлы, ауырыуҙарға бирешмәүсән, күс айырыуға әүәҫ һәм уҫал булыуы менән айырыла)*

**сроки выведения маток** инә ҡортто үрсетеү ваҡыты *(инә ҡортто көндәр йылынғас, яландар сәскәгә күмелгәс, ғаиләлә эшсе ҡорттар ишәйгәс үрсетә башлайҙар)*

**стамеска пчеловодная** борош ҡасау

**старение сота** кәрәҙҙең иҫкереүе *(йәш кәрәҙ асыҡ һары төҫтә була; 10–12 быуын үрсемдән һуң ул ҡарая, балауыҙы кәмей, күҙәнәге тарая; яңы кәрәҙҙең ауырлығы 140–150 г булһа, иҫкергәне 300 г-ға етә)*

**стол для распечатывания сотов** ҡына ҡырка торған өҫтәл

**стрекоза** *зоол.* энәғараҡ *(осоп барышлай бал ҡортон тотоп ашап, ҡортсолоҡҡа ҙур зыян килтерә)*

**строительный инстинкт пчел** ҡорттарҙың оя ҡороу инстинкты *(балауыҙҙан кәрәҙ ҡойоу бал ҡорттарының тыумыштан булған һәләте; балауыҙҙы эшсе ҡорттар махсус биҙҙәре ярҙамында бүлеп сығара; 100 балауыҙ тәңкәһе ни бары 25 мг тарта, һәр ғаилә йылына 2 кг-ға тиклем балауыҙ йыя)*

**стряхивание пчел** ҡорттарҙы һелкеп төшөрөү *(рамдағы ҡорттарҙы төшөрөү өсөн аҫҡа табан киҫкен хәрәкәт яһап һелкәләр: бал айыртҡанда, ояны ҡыҫҡартҡанда, профилактик саралар үткәргәндә эшләнелә)*

**сурепа обыкновенная** *бот.* тиле шалкан *(әүернә сәскәләләр ғаиләһенә ингән һары сәскәле ҡый үләне; корттар уның татын да, һеркәһен дә ярата; шәкәрлелеге 35–40 кг/га)*

**сырость** дымлылыҡ *(умартала, умарта баҙында дымдың юғары булыуы балдың сифатын төшөрә; шуға күрә уларҙы даими рәүештә елләтеп торорға кәрәк)*

**сыта медовая** һыуҙа иретелгән бал *(корттарға өҫтәмә аҙыҡ итеп бирелә)*

# Т

**«танцы» пчел** корттарҙың «бейеүе» *(мул сәскәле урынға әйҙәү ниәтендә эшсе корттар тарафынан яһалған ритмлы хәрәкәттәр)*

**тара для меда** бал һауыттары

**татарник колючий** *бот.* шайтан таяғы *(ойошма сәскәләләр ғаиләһенә ингән сәнскәк япраҡлы, алһыу йомро сәскәле ҡый үләне, шәкәрлелеге 90–100 кг/га)*

**тележка пасечная** умарта арбаһы

**температура воздуха** һауа температураһы *(ҡышын умарта баҙында даими температура 0°С–4°С булһа, корттар аҙыҡты аҙ тотоналар, ауырыуға ла бирешмәйҙәр; йәйен корттар өсөн йылылыҡтың 12–35°С булыуы хәйерле)*

**температура и вентиляция в зимовнике** умарта баҙындағы температура һәм вентиляция *(умарта баҙында температура нормаль булыу менән бергә ул даими рәүештә елләтелергә тейеш)*

**тепличное пчеловодство** теплица умартасылығы *(теплицалағы йәшелсә-емештәрҙе һеркәләндереү маҡсатында аҫралған корттар; уңыш арта, сифат яҡшыра)*

**тепловая обработка пчел** корттарҙы йылылыҡ ярҙамында дауалау *(варроатоз менән ауырығанда корттарҙы 12–15 минут самаһы 47°С эҫелектә термокамерала тотоп алалар)*

**теплотворная способность пчел** ҡорттарҙың йылылыҡ бүлеп сығарыу һәләте *(ҡорттарҙың йылылыҡ бүлеп сығарыуы мускулдарының әүҙемлегенә, бигерәк тә күкрәк мускулдарының микровибрацияһына бәйле)*

**термометр** термометр *(умарталыҡта, ҡорт баҙында һауа температураһын үлсәү өсөн ҡулланыла)*

**терморегуляция групповая** йылылыҡты күмәкләп көйләү *(ҡорттарҙың ояла даими йылылыҡ булдырыуы: йәйен йылылыҡ даими рәүештә 34–36°С булһа, ҡышын күс йомғағының эсендә ул 28–32°С-ҡа етә)*

**терморегуляция индивидуальная** йылылыҡты берәмләп көйләү *(күкрәк йылыһының тейешле кимәлдә һаҡланыуы физиологик механизмдарға бәйле: һауа температураһы 25°С булһа, осҡан ҡорттоң температураһы 15°С-ҡа артыҡ була)*

**терносливa** *бот.* күк сейә *(апрель–май айҙарында сәскә ата, ҡорттар татын да, һеркәһен дә яратып йыя; шәкәрлелеге 20–22 кг/га)*

**техника безопасности** хәүефһеҙлек техникаһы

**технический воск** техник балауыҙ *(төрлө сәнәғәт тармағында ҡулланылған минераль балауыҙҙар ҡатышмаһы)*

**тимьян ползучий, чабрец** *бот.* кейәү үләне *(таулы урындарҙа өйкөм-өйкөм булып үҫкән ваҡ япраҡлы, алһыу ваҡ сәскәле, хуш еҫле дарыу үләне; шәкәрлелеге 50–70 кг/га)*

**тихая смена маток** инәне алмаштырыу *(инә ҡорт ҡартайып йәки ауырып үлһә, эшсе ҡорттар тиҙ генә 1–2 көнлөк ҡарышлауыҡты һайлап алып, унан инә ҡорт тәрбиәләп үҫтерәләр)*

**тля** *зоол.* үлән бете, кебләә *(үҫемлектәрҙең һутын ҡорота торған йәшел төҫтәге ваҡ ҡына ҡанатһыҙ бөжәк, аҙыҡ наҡыҫ саҡта ҡорттар уның тиҙәген йыйып эшкәртә)*

**товарная продукция пчеловодства** ҡортсолоҡтоң тауар продукцияһы *(ҡортсолоҡ хужалығы етештергән тулайым продукцияның һатылған өлөшө; уны тауарлата ла, аҡсалата ла иҫәпләргә була)*

**товарный воск** тауар балауыҙы *(балауыҙҙың йәки балауыҙ сеймалының ҡортсолоҡтан артып ҡалған өлөшө)*

**товарный мед** тауар балы *(һәр ғаиләнән алынып, аҙык һаҡлығынан артып ҡалған бал; ҡышҡы-яҙғы осорға һәр ғаилә өсөн 18–22 кг бал китһә, ҡалғанын һәр хужалыҡ үҙенсә тотона)*

**тополь белый** *бот.* аҡ тирәк *(аҡһыл йәшел ҡабыҡлы, түңәрәк оҙонса япраҡлы эре ағас; ҡорттар уның йәбешкәк матдәһен йыйып, прополис итеп эшкәртә)*

**точок** умарталыҡ урын *(умарталар урынлашҡан майҙан; уны станционар умарталыҡҡа һәм күсмә умарталыҡҡа бүлеп йөрөтәләр)*

**транспортировка пакетов** ҡорттарҙы күсереп йөрөтөү *(ҡорттарҙы алыҫҡа күсергәндә рамдарҙы ҡап йәки йәшниктәргә һалып автомобилгә, һауа һәм тимер юл транспортына тейәп ташыйҙар; уларҙы һыу, аҙыҡ менән тәьмин итеп, махсус белгес оҙата барырға тейеш)*

**транспортировка пчел** умарталарҙы күсереү *(умарталарҙы күсергәндә рамдар өҫтөндә 15–20 см буш урын, ә умарталар араһында 50х60 нисбәтендә саф һауа өсөн урын ҡалырға тейеш)*

**трахейная система** *анат.* трахея системаһы *(ҡорттарҙың трахея системаһы тын алыу көпшәһенән, һауа тоҡсайҙарынан, тын алғыстарҙан һ. б. тишексәләрҙән тора)*

**трутень** ата ҡорт *(кәрәҙ күҙәнәктәрендә 24 көн эсендә үҫеп сыға; оҙонлоғо 15–17 мм, ауырлығы 200–220 мг самаһы була; төп вазифаһы: инә ҡорттарҙы аталандырыу; тат йыйыу тамамланғас та, эшсе ҡорттар уларҙың үрсемен юҡ итә, ә үҙҙәрен ҡыуып сығара)*

**трутнеуловитель** ата ҡорт аулағыс *(ата ҡорттарҙы аулау инә ҡорттарҙы инструменталь юл менән аталандырғанда ҡулланыла)*

**трутовочный расплод** ата ҡорттар үрсеме *(күҙәнәктәге ата ҡорт ҡарышлауыҡтары һәм ҡурсаҡтары)*

**тыква обыкновенная** *бот.* ҡабаҡ (*баҡса үҫемлеге; ҡорттар уның татын яратып йыя; шәкәрлелеге 30–35 кг/га)*

**тычинка** *бот.* һеркә япрағы, һеркәс *(сәскәлә аталыҡ органы)*

# У

**углеводы меда** балдағы углеводтар *(углеводтарҙан глюкоза менән фруктоза балдың барлыҡ сорттарының төп өлөшөн тәшкил итә: йүкә балында – 36,05% глюкоза, 39,27% фруктоза, ҡарабойҙай балында – 36,75% глюкоза, 40,29% фруктоза бар; балда тағы 3% ҡатмарлы шәкәр, сахарозалар; 0,3%–3,3%-ка тиклем аҡһым матдәләр; 0,05–05% самаһы минераль матдәләр була)*

**углекислый газ** углекислый газ *(умарта эсендә углекислый газ 1–2%-ҡа тиклем күтәрелә, әммә ҡорттар уны тынс ҡабул итәләр)*

**удалитель пчел** ҡорт ҡыуҙырғыс *(умарталағы баллы рамдарҙы алғанда ҡорттарҙы ҡыуҙыра торған ҡулайлама)*

**ужаление пчел** ҡорттарҙың сағыуы *(ҡорт саҡҡас та тиҙ генә ҡаяуын тартып сығарып, ауыртҡан урынға һыуыҡ һыуға мансылған сепрәк ябырға һәм уны алмаштырып торорға кәрәк; тәүге ярҙам: яраға нишатырлы спирт йәки календуланың спирттағы төнәтмәһен һөртәләр; күпләп һыу эсеү һәм демидрол, анальгин, супрастин, тавегил, валокордин, кордиамин һ. б. тәкдим ителә)*

**уксусная кислота** һеркә кислотаһы *(ҡырҡыу еҫле, әскелтем тәмле, үтә күренмәле шыйыҡса; умартасылыҡта дезинфекция яһау өсөн ҡулланыла)*

**улей** умарта *(бал ҡорттары өсөн таҡтанан йәки түмәрҙе соҡоп яһаған оя, умарталарҙың ике төрө була: вертикаль терәүлеһе һәм горизонталь ятмалыһы)*

**улей нуклеусный** нуклеус умартаһы

**улочка, межрамочное пространство** рамдар араһы *(бал ҡорттарының рамдар араһында йөрөй торған урыны; улар бушлыҡты яратмағанлыҡтан кәрәҙҙәр араһындағы аралыҡ–12 мм; ҡабырғалағыһы – 7,5 мм; рам өҫтөндәгеһе – 8 мм, рам аҫтындағы аралыҡ 20 мм булырға тейеш)*

**ульевая поилка** умарта тағарағы *(бал ҡорттары өсөн тәғәйенләнгән һыу эскес)*

**уродство куколок** ҡорт ҡурсактарының зәғифләнеүе

**усики** *анат.* мыйыҡсалар *(ҡорттарҙың ауыҙ-мороно тирәһендә үҫкән шырт йөн: инә ҡорт менән эшсе ҡорттоң мыйыҡсаһы — 10 быуынтыҡтан, ата ҡорттоҡо 11 быуынтыҡтан тора; мыйыҡсалар ярҙамында ҡорттар йылылыҡты, дымлылыҡты, һауа баҫымын һ. б. тоя)*

**ускоренное воспроизводство пчелиных семей** ҡорт ғаиләләрен тиҙләтеп ишәйтеү *(иң көслө ғаиләнең $^1/_3$ өлөшөн алып уға 2 рам үрсем килтереп ҡуялар; бер аҙнанан көслө ғаиләнән инәһе булған 1 кг бал ҡортон килтереп ҡушалар һәм мисәтләнгән үрсеме, аҙығы булған рам өҫтәйҙәр; йомортҡа һалыу өсөн кәрәҙле бал һәм яһалма балауыҙ ҡуялар һ. б.)*

**установка ульев** умарталарҙы урынлаштырыу *(2–3 ояны эсенә алған төркөмдәрҙе сатраш тәртибендә урынлаштыралар: рәттәр араһын 4–5 м, төркөмдәр рәтен 3–4 м, төркөмдәге умарта араһын 0,5–1 м самаһы ҡалдырып, уларҙы 30–40 см бейеклегендәге аҫлыҡтарға ултырталар, ә кейәләрен фәҡәт бер яҡҡа, йәғни көньяҡ-көнсығышҡа, ҡаратала р)*

**устройство точка** умарталыҡтарҙың төҙөлөшө *(умарталыҡ өсөн дүрткел урын һайланыла; уның майҙаны умарта һанына ҡарай; һәр умартаға 1 м² майҙан ҡалдырыла; унда һәр төрлө емеш-еләк ағастары ултыртыла)*

**утепление гнезд и ульев** ояларҙы һәм умарталарҙы йылытыу *(яҙғы һыуыҡтарҙа ояларҙы йылыталар, кейәләрҙе тарайталар; был ояны — һыуыҡтан, ғаиләне бур ҡорттарҙың һөжүменән һаҡлай)*

**утепление зимовников** ҡорт баҙын йылытыу *(ҡышын ҡорт баҙының түшәмен йылыталар: уға 3–4 см ҡалынлығында балсыҡ түшәйҙәр, уның өҫтөнә 5 см ҡалынлығында ҡом һалалар, артабан уны 50–70 см ҡалынлығында һалам йәки ҡипкән япраҡ менән ҡүмәләр)*

**уховертка** *зоол.* асағойроҡ *(еүеш ерҙәрҙә йәшәй торған оҙон ҡойроҡло, көрән төҫтәге бөжәк; бал, һитә һәм бал*

*ҡорттары менән туҡлана; уны булдырмау өсөн умартаны ҡоро тоторға, умарта тояғын автол, салидол менән майлап торорға кәрәк)*

**уход за пчелами** ҡорттарҙы тәрбиәләү *(яҙ башланыу менән умарталыҡ — ҡарҙан, кейәләр — үлгән ҡорттарҙан, кәрәҙҙәр сифатһыҙ балауыҙҙан таҙартыла; ҡорттарҙың тәүге таҙарыныу осошонан һуң аҙығы һәм инә ҡорто булмаған оялар асыҡланып, тейешле саралар күрелә)*

**учебная пасека** уҡыу умарталығы *(ҡортсолоҡ буйынса юғары квалификациялы белгестәр әҙерләү өсөн тәғәйенләнгән умарталыҡ)*

**учет медоносных растений** баллы үҫемлектәрҙе иҫәпкә алыу *(баллы үҫемлектәр ҡорттарҙың төп аҙығы: улар татты — балға, һеркәне һитәгә әйләндерә; майҙандағы бал һаҡлығын белеү өсөн умарта тирәләй 2-шәр км оҙонлоғондағы урын үлсәп алына һәм 1 га-нан алынған бал миҡдарына ҡабатлана)*

# Ф

**фальсификация продуктов пчеловодства** ҡортсолоҡ продукттарын яһау *(ҡортсолоҡ продукттарын төрлө механик ҡушылдыҡтар өҫтәп яһау: ҡорт елемен — пластилинға ыҫмала ҡушып, балды ҡорттарға шәкәр ашатып яһайҙар)*

**фасоль многоцветковая** *бот.* күп сәскәле фасоль *(ҡуҙаҡлылар ғаиләһенә ингән баҡса үҫемлеге; июлдән сентябргә тиклем сәскә ата; шәкәрлелеге 25–30 кг/га)*

**фацелия** *бот.* фацелия *(ваҡ ҡына алһыу һәм зәңгәр сәскәле бер йыллыҡ үҫемлек; шәкәрлелеге 100–250 кг/га)*

**фенологические наблюдения** фенологик күҙәтеүҙәр *(үҫемлектәрҙең, бал ҡорттарының йәшәү үҙенсәлектәрен күҙәтеү: баллы үҫемлектәрҙең сәскә атыу осорон, ҡорттарҙың миҙгелгә ҡарап үҙгәреүҙәрен, тәүге осоштарын, кәрәҙ ҡойоу мәлен, күс айырыу, күс ябыу һ. б. күренештәрҙе һәм һауа торошон күҙәтеп, теркәп барыу)*

**фенотип пчел** ҡорттар фенотибы *(йәшәү даирәһенең үҙгәреүенән ҡорттарҙа барлыҡҡа килгән яңы билдәләр: бер нәҫелдәге ҡарышлауыҡтарҙың ашау шарттарын үҙгәртеү менән йә эшсе ҡорт, йә инә ҡорт үҫеп сыға; тоҡомло инә ҡорт көсһөҙ ғаиләлә үҙенә хас яҡшы сифаттарҙы юғалта)*

**фенотипическая изменчивость** фенотипик үҙгәреүсәнлек *(ҡайһы бер ҡорттарҙың, ҡорт күстәренең сифаттарындағы төрлөлөк: морон оҙонлоғо, ҡанаттарҙың ҙурлығы, бал биреү һәләте һ. б.)*

**фильтры для меда** бал һөҙгөс *(балды төрлө механик ҡушымталарҙан таҙарта торған ҡулайлама)*

**флоромиграция пчел** ҡорттарҙың флоромиграцияһы *(тат һәм һерҡә йыйыу мәлендә ҡорттарҙың бер төр сәскәнән икенсе төр сәскәгә күсеүе: ҡарабойҙай һәм горчица сәскәһе татты иртәнсәк бүлеп сығарғанға күрә ҡорттар уларҙан фәҡәт иртәнге осорҙа, ә башҡа үҫемлектәрҙән төштән һуң һерҡә һәм тат йыя ала)*

**фруктоза** фруктоза

# Х

**химический токсикоз** химик матдәләр менән ағыуланыу *(ҡорттарҙың химикаттар менән эшкәртелгән үҫемлек сәскәләренән тат һәм һерҡә йыйып ағыуланыуы)*

**хищники пчел** бал ҡортоноң ҡороҡҡостары, дошмандары *(был төркөмгә бөжәктәр, ҡоштар һәм ҡайһы бер йәнлектәр инә)*

**хлорамин** хлорамин *(ҡорттарҙа була торған Европа серегे, нозематоз һымаҡ ауырыуҙарға ҡаршы көрәштә ҡулланыла)*

**хоботок пчелы** *анат.* бал ҡорто мороно *(сәскәләрҙән — тат, кәрәҙҙәрҙән бал һәм кәрәк саҡта һыу һура торған ҡаяу рәүешендәге ағза: ул аҫҡы ике яңаҡ менән ирендән тора)*

**холодный занос** һыуыҡ һырынты *(кәрәҙҙәрҙе кейәгә ҡабырғалары менән урынлаштырыу: унда үрсемле рам кейә эргәһенә, һитәле һәм баллы рамдар ике яҡ ситкә урынлаш-*

*тырыла, сөнки был һауа алмашыныуын яҡшырта һәм күс айырыуҙы кәмета)*

**холстик ульевой** киндер япма *(рамдар өҫтөнә ябыла торған киндер; ҡорттар уны тиҙ генә елемгә ҡатырып бөтә, ә ҡорт елеме ошо япманан сүпләп алына)*

**хранение продуктов пчеловодства** умартасылыҡ продукттарын һаҡлау *(продукттарҙың сифаты дөрөҫ һаҡлауға бәйле: 23–28°С-та һаҡланған балдың ике йылдан һуң фруктозаһы 5%-ҡа, глюкозаһы 13%-ҡа кәмей; ҡорт елемен шулай уҡ ҡоро, таҙа, һалҡын урында һаҡларға кәрәк һ. б.)*

**хронический вирусный паралич** *вет.* дауамлы вируслы паралич *(төкөрөк аша таралған йоғошло ауырыу; һитәнең сифатһыҙ булыуы, һауаның киҫкен үҙгәреүе төп сәбәп булып тора)*

# Ц

**цвет воска** балауыҙ төҫө *(балауыҙҙың төҫө аҡһыл, яңы ғына төҙөлгән кәрәҙҙең төҫө аҡһыл һары була; ул ҡорттоң тоҡомона, сәскәнең төҫөнә, һауа торошона ла бәйле)*

**цветение** *бот.* сәскә атыу *(үҫемлектәрҙең һеркәләнеүгә әҙер булған үҫеш осоро; сәскә ата башлауы, уның дауамлылығы тәбиғәт шарттарына бәйле: азот ашламаларын ҡулланыу сәскә атыу ваҡытын оҙайта; тупраҡты калий, фосфор, марганец менән ашлау сәскә атыу осорон ҡыҫҡарта)*

**цветковое зрение пчел** ҡорттарҙың төҫтәрҙе айыра белеүе *(бал ҡортоноң биш күҙе бар: икәүһе — ҡатмарлы, өсәүһе — ябай; ябай күҙҙәре 1–2 см алыҫлығындағы нәмәләрҙе, ә ҡатмарлы күҙҙәре алыҫтағы нәмәләрҙе күрергә ярҙам итә; ҡорттар аҡ, зәңгәр, күк, йәшел, миләүшә төҫөн яҡшы айыра)*

**цветочно-нектарный конвейер** сәскә-тат конвейеры *(ҡорттарҙы яҙҙан алып көҙгә тиклем тат, һеркә менән тәьмин итеү системаһы; ул тәбиғи байлыҡҡа нигеҙләнә һәм өҫтәмә рәүештә үҫемлектәр сәсеү менән ғәмәлгә ашырыла)*

# Ч

**чертополох, татарник** *бот.* шайтан таяғы *(ойошма сәскәләләр ғаиләһенә ингән сәнскәк япраҡлы, алһыу йомро сәскәле ҡый үләне; яҙҙан көҙгә тиклем сәскә ата; ҡорттар унының һеркәһен дә, татын да яратып йыя; шәкәрлелеге 60—80 кг/га)*

**чина** *бот.* сырмалсыҡ *(үрмәләп үҫкән оҙон һабаҡлы ҡый үләне; шәкәрлелеге 50—70 кг/га)*

**чистец** *бот.* иренсәскә *(сәскәһе аҫлы-өҫлө ике таж япрағынан торған бер йыллыҡ үҫемлек; яҙҙан алып көҙгә тиклем сәскә ата; шәкәрлелеге 70—80 кг/га)*

**чистка гнезда** ояны таҙартыу *(ҡорттар тейешле шарттарҙа йәшәһен өсөн уларҙың оялары даими рәүештә таҙартыла: ҡыш сыҡҡас та, бысраҡ рамдар таҙалары менән алмаштырыла)*

**чистка доньев** умарта төбөн таҙартыу *(ҡышлауҙан һуң умарта төбө төрлө сүп-сарҙан, үлгән ҡорттарҙан таҙартыла)*

**чистопородное разведение пчел** саф тоҡомло ҡорттар үрсетеү *(бер тоҡомдағы инә ҡорт менән ата ҡорт ҡушылыуынан барлыҡҡа килә)*

**чувство времени у пчел** ҡорттарҙың ваҡытты һиҙемләүе *(ваҡытты һиҙеү ҡорттарҙа ныҡ үҫешкән: үҙҙәренең эш-хәрәкәтен улар ваҡытҡа ҡарап көйләй)*

# Ш

**шаблон** ҡалып *(инә ҡорттарҙың ҡарышлауыҡтарын күсереү юлы менән үрсеткәндә балауыҙ көбө яһай торған ҡулайлама)*

**шалфей** *бот.* шалфей, йылан тамыры *(ирен сәскәләләр ғаиләһенә ингән аҡһыл йәшел төҫтәге, киртләс япраҡлы, хуш еҫле тау үләне; үҙенең татып йылылыҡ 24–25°С, дымлылыҡ 60–65% булғанда ғына бүлеп сығара; шәкәрлелеге 100–130 кг/га)*

**шафран** *бот.* зәғферән *(һуған төплө, ҡыяҡ япраҡлы, ҡыҙғылт күк төҫтәге ҡыңғырау сәскәле үҫемлек; бал ҡорттары уның һеркәһен яратып йыя)*

**шершень** тыраж *(ҡараһыу йәки һарғылт төҫтәге ярыҡанатлы, саға торған эре бөжәк; оҙонлоғо 26–30 мм самаһы, бал ҡорттарына ныҡ зыян килтерә)*

**шиповник обыкновенный** *бот.* ябай гөлйемеш *(роза сәскәләләр ғаиләһенә ингән сәнскеле ҡыуаҡ үҫемлек; май–июль айҙарында сәскә ата; шәкәрлелеге 27–30 кг/га)*

**шлейф матки** *анат.* инә ҡорт шлейфы *(ата ҡорттоң аталандырғандан һуң инә ҡортта тороп ҡалған енес ағзаһының бер өлөшө)*

**шмель** иңкеш *(бал ҡорттары ғаиләһенә ҡараған йомро йөнтәҫ эре бөжәк: аталанған инә иңкеш ҡышын йоҡоға тала; яҙын ышыҡ урындарға йәки ер аҫтына оя яһап, балауыҙ менән һеркәнән күҙәнәктәр төҙөй)*

**шпатель** шпатель *(инә ҡорттарҙы яһалма юл менән үрсеткәндә ҡарышлауыҡтарҙы бер күҙәнәктән икенсеһенә күсереү өсөн бәләкәй көрәк һымаҡ ҡулайлама)*

# Щ

**щавель** ҡуҙғалаҡ

**щавелевая кислота** ҡуҙғалаҡ кислотаһы

**щетинник сизый** бесәйғойроҡ

**щетка** щетка *(бал айыртҡанда кәрәҙҙәге ҡорттарҙы һыпырып төшөрөү өсөн ҡулланыла)*

**щик снять** солоҡ ағасының осон ҡырҡыу

**щурка золотистая** *зоол.* ҡарағай турғайы (бал ҡорттарын ҡороткос ҡош)

# Э

**эволюция пчел** ҡорттар эволюцияһы *(бал ҡорттарында тәбиғи һәм яһалма һайланыш нигеҙендә барған үҫеш)*

**экзоакарапидоз** *вет.* экзоакарапидоз *(ҡорттарҙың тәнендә йәшәй торған паразит талпан)*

**экскременты** тиҙәк, бәүел *(ҡышлау дәүерендә ҡорттарҙың тура эсәгенә йыйыла)*

**экстерьер пчел** ҡорттар экстерьеры *(бал ҡорттарының тоҡомға һәм йәшәү шарттарына бәйле рәүештә барлыҡҡа килгән тышҡы үҙенсәлектәре)*

**эмбриональное развитие пчел** ҡорт яралғыһы үҫеше *(яралғынан ҡарышлауыҡ үҫеп сыҡҡанға тиклем булған осор: инә, ата һәм эшсе ҡорттарҙың был үҫеше өс тәүлеккә һуҙыла)*

**эмульсия воска** балауыҙ эмульсияһы *(береһе эсендә икенсеһе иремәй, фәҡәт өлөшсәләре һыуға тигеҙ таралған балауыҙ менән һыу ҡатышмаһы)*

**энтомозы** *вет.* энтомоздар *(паразит бөжәктәр тараҡан йоғошло ауырыу)*

**энтомофильные растения** энтомофиль үҫемлектәр *(бөжәктәр ярҙамында аталана торған үҫемлектәр; үҫемлектәр менән бөжәктәрҙең эволюцион үҫеше һәр ваҡыт үҙ-ара бәйләнештә бара: морон оҙонлоғо тат һурыуға, тәндәге төктәрҙең булыуы һеркәләр һырырға, сәскәләрҙең сағыу төҫтә булыуы ҡорттарҙы үҙенә йәлеп итеүгә яраҡлашҡан)*

**эспарцет** *бот.* ат борсағы *(ҡыяҡ япраҡлы, аҡ сәскәле, оҙонса эре орлоҡло үҫемлек; май–июль айҙарында сәскә ата; шәкәрлелеге 70–250 кг/га)*

# Я

**яблоня домашняя** өй алмағасы *(алһыу, аҡ сәскәле, оҙонса япраҡлы, итләс мурт емешле ағас; шәкәрлелеге 25–30 кг/га)*

**яд пчелиный** ҡорт ағыуы *(эшсе һәм инә ҡорттарҙың ағыу биҙҙәренән бүленеп сыҡҡан үтә күренмәле ҡуйы шыйыҡса; ҡорт саҡҡанда ҡаяу тәндә тороп ҡала, ә барлыҡ ағыу йәрәхәткә ағып төшә)*

**ядовитые растения** ағыулы үҫемлектәр *(ер йөҙөндә 10 меңгә яҡын ағыулы үҫемлек иҫәпләнә, шуларҙың 400 төрө Рәсәйҙә үҫә; уларҙың ағыуы нервы системаһына, тын юлдарына, ашҡаҙан-эсәк системаһына зыян килтерә; ағыулы тат бүлеүсе үҫемлектәргә аҡһырғаҡ, тәмәке, һаҙанаҡ, һөтлөкәй, бүре еләге һ. б. инә)*

**ядовитый мед** ағыулы бал *(зәһәрле үҫемлек татынан йыйылған бал)*

**ядохимикаты** ағыулы химикаттар

**яичники матки** *анат.* инә ҡорт күкәйлеге *(груша рәүешендәге был ағза бик күп күкәйлектәрҙән тора һәм унда яралғы үҫеп сыға)*

**яйцевые трубочки** *анат.* күкәйлек көпшәләре *(инә ҡорт күкәйлегендә 120–250 күкәйлек көпшәһе бар)*

**яйцекладка рабочих пчел** эшсе ҡорттарҙың йомортҡа һалыуы *(ҡайһы бер шарттарҙа эшсе ҡорттарҙың күкәйлеге үҫешеп китеп, йомортҡа һалған саҡтары ла була, әммә уларҙың йомортҡалары аталанмай)*

**яйцеклетка** *анат.* күкәй күҙәнәге *(оҙонса формалағы енес күҙәнәге, уның аша сперматозоид үтеп инә)*

**ячейки сотовые** кәрәҙ күҙәнәктәре *(435х300 мм ҙурлығындағы кәрәҙле рам 8000–9000 күҙәнәкте һыйҙыра; һәр күҙәнәк бал ҡорто өсөн ял итеү, туҡланыу, бал һәм һитә һаҡлау, бала тәрбиәләү урыны)*

**ящик пасечный** умарта йәшниге

# БАШҠОРТСА – УРЫҪСА УМАРТАСЫЛЫҠ ҺҮҘЛЕГЕ

# БАШҠОРТ АЛФАВИТЫ

| | | | | | |
|---|---|---|---|---|---|
| **Аа**<br>а | **Бб**<br>бэ | **Вв**<br>вэ | **Гг**<br>гэ | **Ғғ**<br>ғы | **Дд**<br>дэ |
| **Ҙҙ**<br>ҙы | **Ее**<br>е (йе) | **Ёё**<br>ё (йо) | **Жж**<br>жэ | **Зз**<br>зэ | **Ии**<br>и |
| **Йй**<br>ҡыҫҡа и | **Кк**<br>ка | **Ҡҡ**<br>ҡы | **Лл**<br>эл | **Мм**<br>эм | **Нн**<br>эн |
| **Ң**<br>эң | **Оо**<br>о | **Өө**<br>о | **Пп**<br>пэ | **Рр**<br>эр | **Сс**<br>эс |
| **Ҫ**<br>ҫэ | **Тт**<br>тэ | **Уу**<br>у | **Үү**<br>ү | **Фф**<br>эф | **Хх**<br>ха |
| **Һһ**<br>һа | **Цц**<br>цэ | **Чч**<br>че | **Шш**<br>ша | **Щщ**<br>ща | **ъ**<br>ҡалын айырыу билдәһе |
| **Ыы**<br>ы | **ь**<br>нәҙеклек һәм нәҙек айырыу билдәһе | **Ээ**<br>э | **Әә**<br>ә | **Юю**<br>ю (йу) | **Яя**<br>я (йа) |

# А

**абориген (урындағы) ҡорттар** аборигенные пчелы
**абсолют дымлылыҡ** абсолютная влажность
**абхаз ҡорттары** абхазские пчелы
**ағас умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**
**ағыҙған бал** мед, процеженный через сито
**ағыулы бал** ядовитый мед
**ағыулы үҫемлектәр** *бот.* ядовитые растения
**аҙау бал** *диал. то же, что* **комоҡҡан бал**
**аҙман** *диал. то же, что* **ата ҡорт**
**аҙыҡ тотоноу** использование корма
**аҙыҡ туҡлыҡлылығы** питательность корма
**аҙыҡ һаҡлығы** кормовые запасы
**аҙыҡтарҙы эшкәртеү** переваривание кормов
**айыртылған бал** мед, пропущенный через медогонку
**айыу баланы** *бот.* купена лекарственная
**айыутабан** *бот.* аконит высокий
**аҡ күҙле ҡорттар** белоглазые трутни
**аҡ туҡранбаш** *бот.* клевер белый
**аҡһым** белок
**аҡһым аҙыҡ** белковый корм
**алтынбаш** *бот.* золотарник обыкновенный, золотая розга
**Алыҫ Көнсығыш ҡорто** дальневосточная пчела
**Америка сереге** *вет.* американский гнилец
**ана ҡабы** *диал. то же, что* **инә көбө**
**ана ояһы** *диал. то же, что* **инә көбө**
**ана һауыты** *диал. то же, что* **инә көбө**
**анемофиль үҫемлектәр** *бот.* анемофильные растения
**арҡатау** *этн.* веревка для подъема и опускания батмана (*при добывании меда*)

**арса балы** вересковый мед

**артҡы ҡанат** *анат.* заднее крыло (*пчелы*)

**артыҡ ана** *диал. то же, что* **артыҡ инә**

**артыҡ инә** лишняя пчелиная матка

**арыҫлан ҡойроғо** *бот.* пустырник

**арыш сәскәһе** *бот.* василек синий

**асыҡ үрсем** открытый расплод

**аҫлыҡ** *диал. то же, что* **таҫтаҡ**

**ата ҡорт** трутень

**ата ҡорт аулағыс** трутнеуловитель

**ата ҡорт ауырыуҙары** *вет.* болезни трутней

**ата ҡорт күҙәнәктәре** трутневые ячейки

**ата ҡорт сперматозоиды** сперматозоиды трутня

**ата ҡорт үрсеме** расплод трутневой

**ата ҡорт үрсетеүҙе сикләү** ограничение выращивания трутней

**ата ҡорттарҙы ҡыуып сығарыу** изгнание трутней

**ата ҡорттоң ғүмер оҙонлоғо** продолжительность жизни трутня

**аталанған инә ҡорт** плодная пчелиная матка

**аталанған йомортҡалар** оплодотворенные яйца

**аталанмаған йомортҡалар** неоплодотворенные яйца

**ауыҙ ағзалары** *анат.* органы ротовой полости

**ауыҙау** сделать отверстие (*чтобы выбрать мед из ствола дерева, где роятся пчелы*)

**ауырыу ҡуҙғытыусылар** возбудители болезни

**ауырыу таратыусылар** распространители болезни

**аш һеңдереү ағзалары** *анат.* органы пищеварения

**ашатыусы ҡорт** пчела-кормилица

**ашҡан ҡорт күстәре** бродячий рой, дикие пчелы

**аяҡ** *диал. то же, что* **ләңге**

# Б

**бағана умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**

**бағау** *этн.* топор с поперечным лезвием (*для выдалбливания колодочных ульев и бортей*)

**бағыусы ҡорттар** пчелы-кормилицы

**баҙауыл** *диал. то же, что* **балауыҙ**

**бажым** *этн.* (солоҡ ауыҙы) паз, бортевая должея

**бажымлау** сделать пазы в бортевом дереве

**баҡса сейәһе** *бот.* садовая вишня

**бал** мед

**бал ағыҙыу** *диал. то же, что* **бал айыртыу**

**бал айыртҡыс** медогонка

**бал айыртыу** откачать мед

**бал бөрләтәүе** *анат.* медовый зобик

**бал бысағы** бортевой нож

**бал йыйымы** медосбор

**бал йыйыу** собирать мед; медосбор

**бал йыйыу осоро** медосбор

**бал ҡорто** пчела

**бал ҡорто пакеты** пчелопакет

**бал ҡыуғыс** *то же, что* **бал айыртҡыс**

**бал ҡыуыу** *то же, что* **бал айыртыу**

**бал мисәтләү** печатка меда

**бал табышы** *диал. то же, что* **бал йыйымы**

**бал тығыҙлығы** плотность меда

**бал өйрөлтөү** *диал. то же, что* **бал айыртыу**

**бал һөҙгөс** фильтр для меда

**бал һурҙырыу** *диал. то же, что* **бал айыртыу**

**бал һуты** *диал. то же, что* **тат**

**бал һыҡтырғыс** *диал. то же, что* **бал айыртҡыс**

**бал һыҡтырыу** *диал. то же, что* **бал айыртыу**

**бал эҫетеү** нагревание меда

**бал эшкәртеү** обработка меда

**бал әсеткеһе** дрожжи меда

**бала айырыу** *диал. то же, что* **күс айырыу**

**бала күҙәнәге** ячейка личинки

**бала күс** отроек; молодой пчелиный рой

**бала ҡорттар** детва (*молодые пчелы*)

**бала уйнатыу** игра перед роением

**балауыҙ** пчелиный воск

**балауыҙ балансы** восковой баланс

**балауыҙ биҙҙәре** *анат.* восковые, восковыделительные железы

**балауыҙ бүлеп сығарыу** восковыделение

**балауыҙ бәшмәге** восковой гриб

**балауыҙ иретеү** вытапливание воска

**балауыҙ иреткес** воскотопка

**балауыҙ «көҙгөләре»** *анат.* восковые «зеркальца»

**балауыҙ ҡоротҡостары** вредители воска

**балауыҙ оролары–«телсәләр»** восковые наросты – «язычки»

**балауыҙ пластинкалары** восковые пластинки

**балауыҙ сеймалы** восковое сырье

**балауыҙ тәңкәләре** восковые чешуйки

**балауыҙ табағы** вощина

**балауыҙ таҙартыу ысулдары** способы очистки воска

**балауыҙ төпрәһе** осадок топленого воска

**балауыҙ тығыҙлығы** плотность воска

**балауыҙ һыҡҡыс** воскопресс

**балауыҙ эмульсияһы** эмульсия воска

**балауыҙ эшләүсе машина** машина для производства вощины

**балауыҙҙың дауалау үҙсәнлектәре** лечебные свойства воска

**балауыҙҙың тулайым йыйымы** валовый сбор воска

**балауыҙлы дауалау препараттары** лечебные препараты воска

**балдағы аҡһым матдәләре** белковые вещества меда

**балдағы кислоталар** кислоты меда

**балдағы углеводтар** углеводы меда

**балдарҙы ҡушып бутау** купожирование медов

**балдарҙың бүленеше** классификация медов

**балдың ботаник сорттары** ботанические сорта меда

**балдың гигроскопик үҙсәнлеге** гигроскопичность меда

**балдың дауалау үҙсәнлектәре** лечебные свойства меда

**балдың калориялылығы** калорийность меда

**балдың карамелләшеүе** карамелизация меда

**балдың көллөлөгө** зольность меда

**балдың ҡомоғоуы** засахаривание меда

**балдың өлгөрөүе** зрелость меда

**балдың өлгөрөп етеүе** дозревание меда

**балдың тулайым йыйымы** валовый сбор меда

**балдың хуш еҫе** аромат меда

**балдың һуҙылыусанлығы (үҙлелеге)** вязкость меда

**балдың әсеүе** закисание меда

**баллы ашамлыҡтар** продукты из меда

**баллы дауалау препараттары** лечебные препараты из меда

**баллы кәрәҙҙәрҙе аса торған бысаҡ** нож для распечатывания сотов

**баллы үҫемлектәр** *бот.* медоносные растения

**баллы үҫемлектәр ултыртыу** посадка медоносных растений

**баллы үҫемлек менән мал аҙығы үҫемлектәре ҡатышмаһы** нектарно-кормовая смесь

**баллы үҫемлектәрҙең иҫәбен алыу** учет медоносных растений

**баллы үҫемлектәрҙең сәскә атыу ваҡытын теркәгән календарь** календарь цветения медоносов

**баллы үҫемлектәр ултыртыу** посадка медоносных растений

**баллы эсемлектәр** медовые напитки

**баллыҡай** *бот.* медуница

**балсы** *диал. то же, что* **ҡортсо**

**балсы ғаилә** семья-медовик

**балтырған** *бот.* борщевик

**баҫымсаҡ** *диал. то же, что* **һурнаҡ**

**баҫыу билсәне** *бот.* бодяк полевой

**батман** *этн.* батман (*небольшая кадка, служащая для хранения меда*)

**бауланыу** цепляясь друг за друга, висеть, как веревка

**башҡорт ҡорто** башкирская пчела

**башҡорт солоҡ ҡорто** башкирская бортевая пчела

**бер өйлө үҫемлектәр** *бот.* однодомные растения

**бесәй борсағы** *бот.* алтей лекарственный

**бесәй тырнағы** *бот.* мальва

**бесәй үләне** *бот.* валериана лекарственная

**битлек** лицевая сетка

**боланут** *бот.* иван-чай

**борош ҡасау** стамеска пчеловодная

**боһолдаҡ** *диал. то же, что* **төтәткес**

**боһолдатыу** *диал. то же, что* **төтәҫләү**

**бөкрө үрсем** горбатый расплод

**бөрйән солоҡ ҡорто** бурзянская бортевая пчела

**бөркөм** напрыск

**бөркөү** *вет.* опрыскивание

**бөрләтәү** *анат.* зобик

**бөрмәкәй** *бот.* подмаренник

**бөрөз** бортевое долото

**бөтнөк** *бот.* мята

**бур ҡорт** *диал. то же, что* **һурнаҡ**

**буш кәрәҙле рамдар** сушь

**бүлеп сығарыу ағзалары** *анат.* органы выделения

**бүлеш таҡтаһы** вставная доска, диафрагма

**бысаҡ эҫетеү** нагревание ножа

**бәбәк кристалдар** зародышевые кристаллы

## В

**ваҡ япраҡлы йүкә** *бот.* мелколистая липа

**вертикаль терәүле умарталар** вертикальные ульи-стояки

**ветеринария-бактериология лабораторияһы** ветеринарно-бактериологическая лаборатория

**ветеринария таныҡлығы** ветеринарное свидетельство

**вирус йөрөтөүсе** *вет.* вирусоноситель

## Г

**гел әре ҡорттар үҫеп сығыусы ғаилә** трутовочная семья

**гидрофил үҫемлектәр** *бот.* гидрофильные растения

**горизонталь ятмалы умарталар** ульи-лежаки

**гөжгөт** *диал. то же, что* **төтәткес**

## Ғ

**ғаилә көсө** сила семьи

**ғаиләнең инәһеҙ ҡалыуы** осиротение семьи

**ғаиләләрҙе көсәйтеү** подсиливание семей

**ғаиләнең эш көнө** рабочий день семьи

**ғаиләнең эшсәнлек хәле** рабочее состояние семьи

## Д

**дадан балауыҙы** листовой воск

**дадан умарта** рамочный улей

**дарыу бәпкәһе** *бот.* лекарственный одуванчик

**дауалау сиробы** лечебный сироп

**дауалау төтәткесе** лечебный дымарь

**дөйә тубылғыһы** *бот.* колючка верблюжья

**дөнгө** *диал. то же, что* **ҡорт ҡаяуы**

**дымлылыҡ** влажность

**дәүләт умарталыҡтары** государственные пасеки

## Е

**Европа сереге** *вет.* европейский гнилец

**елемләү** *диал. то же, что* **мисәтләү**

**ел ярҙамында һеркәләнеүсе үҫемлектәр** *бот.* ветроопыляющие растения

**елләткес торбалар** вентиляционные трубы

**елпеүсе ҡорттар** пчелы, вентилирующие гнездо

**емешлек** *бот.* пестик

**емләү** подкармливать

**емшән** *бот.* завязь

**енес ағзалары үҫеп етмәгән ҡорттар** пчелы-трутовки

**еңсә** *анат.* влагалище

**еҫ бүлеү ағзалары** пахучие органы

# З

**зәғиф башлы ата ҡорттар** малоголовые трутни

**зәғиф ҡорттар** пчелы-калеки

**зәһәр сүл борсағы** *бот.* очиток едкий

# И

**ике енесле сәскә** *бот.* обоеполый цветок

**ике корпуслы умарта** двухкорпусный улей

**ике өйлө үҫемлектәр** *бот.* двудомные растения

**ил** *диал. то же, что* **күс**

**иләкле ҡалпаҡ** *диал. то же, что* **битлек**

**инә көбө** маточник

**инә көбө күләме** объем маточника

**инә көбөн киҫеп алыу** вырезка маточника (*убрать лишнюю пчелиную матку*)

**инә көбөн һайлау** отбор маточника

**инә күҙәнәге** ячейка для пчелиной матки

**инә күнәге** *диал. то же, что* **инә көбө**

**инә ҡабы** *диал. то же, что* **инә көбө**

**инә ҡорт** *(или* **ҡорт инәһе**) пчелиная матка, пчела-матка

**инә ҡорт аҙығы** маточный корм

**инә ҡорт ауырыуҙары** болезни матки

**инә ҡорт еңсәһе** *анат.* влагалище матки

**инә ҡорт изоляторы** изолятор матки

**инә ҡорт күкәйлеге** *анат.* яичники матки

**инә ҡорт ҡанатын киҫеп ҡыҫҡартыу** подрезка крыльев у матки

**инә ҡорт матдәһе** маточное вещество

**инә ҡорт ситлеге** маточная клеточка

**инә ҡорт үрсетеү** вывод маток

**инә ҡорт үрсетеү ысулдары** способы выведения маток

**инә ҡорт үрсетеүсе** матковод

**инә ҡорт үрсетеүсе умарталыҡ** матководная пасека

**инә ҡорт һөтө** маточное молоко

**инә ҡорт һөтөнөң дауалау үҙсәнлектәре** лечебные свойства маточного молочка

**инә ҡортҡа эйәләү** налет пчел на матку

**инә ҡорттоң йәше** возраст матки

**инә ҡорттарҙы күпләп үрсетеү** промышленное выведение маток

**инә ҡорттарҙы яһалма үрсетеү** искусственный вывод маток

**инә ҡорттарҙың ике тапҡыр алмаштырылыуы** двухкратная смена маток

**инә ҡорттарҙың йомортҡа һалыуын сикләү** ограничение яйцекладки маток

**инә ҡорттарҙың парлашыу осошо** брачный вылет маток

**инә ҡорттарҙың тауыш биреүе** пение маток

**инә ҡортто тәрбиәләүселәр** свита матки

**инә ҡорт шлейфы** шлейф матки

**инә ҡорттоң орлоҡ һаҡлағысы** семяприемник матки

**инә ҡорттоң осоп сығыуы** выход матки

**инә ҡорттоң өлгөрөүе** созревание матки

**инә ҡорттоң үрсемлелеге** плодовитость матки

**инә ҡорт һөтөнән яһалған дауалау препараттары** лечебные препараты маточного молочка

**инә ятағы** *диал. то же, что* инә көбө

**инәлек ғаилә** материнская семья

**инәне ҡырҡыу** *(или* **ҡыйыу**) *диал. то же, что* **инә көбөн киҫеп алыу**

**инәһеҙ күс** безматочный рой

**ирекле күс айырыу** роевая свобода

**иретелгән балауыҙ** топленый воск

**иҫкергән бал** *диал. то же, что* **комоҡҡан бал**

**итальян ҡорттары** итальянские пчелы

**Й**

**йомортҡа** пчелиные яички

**йомортҡа һалыуҙағы тайпылыш** аномальная кладка яиц

**йондоҙ сәскә** *бот.* астра

**йөҙөм шәкәре** виноградный сахар

**йүкә** *бот.* липа

**йүкә балы** липовый мед

**йыйым** взяток

**йыйымһыҙ осор** безвзяточный период

**йыйыштырыусы ҡорттар** пчелы-уборщицы

**йылы һырынты** теплый занос

**йылытҡыс септәләр** утеплительные маты

**йәйге йыйым** летний взяток

**йәйге эштәр** летние работы

**йәттә** обножка

**йәттәнең дауалау үҙсәнлектәре** лечебные свойства пчелиных обножек

**йәш үрсем** пчелиная детка

**йәш бал** свежий мед

**йәш инә** молодая пчелиная матка

**йәшел кәртә** живая изгородь пасеки

**К**

**кеҙәл** *диал. то же, что* **балауыҙ күҙәнәге**

**кейек ҡорт** дикая пчела

**кейә** леток

**кейә биге** летковая задвижка

**кейә верандаһы** летковая веранда

**кейә ҡаплауыс** маткоуловитель

**кейә уйыу** выдолбить леток
**кейә һаҡлау** охрана летка
**кейә шыуҙырмаһы** *диал. то же, что* **кейә биге**
**киндер япма** холстик ульевой
**киртек** зарубка, засечка
**киртек баҫҡыс** бортевая зарубка
**киртек уйыу** сделать зарубку
**кирә** леток борти
**кирәләү** искать место для роения
**кирәм** *этн.* кирям (*плоская плетеная веревка или ремень, при помощи которых бортники лазают на дерево*)
**кирәм балта** *то же, что* **бағау**
**китап умарта** книжный улей
**контроль рам** контрольная рама
**контроль умарта** контрольный улей
**контроль умарта көндәлеге** дневник контрольного улья
**көбөлә инә ҡорт** свищевой маточник
**көҙгө** гладкая поверхность брюха пчелы
**көҙгө тикшереү** осенняя ревизия
**көҙгө эштәр** осенние работы
**көнбағыш** *бот.* подсолнечник
**көплө ҡорт** личинка, куколка
**көпләнгән үрсем** печатный, запечатанный зрелый расплод
**көсһөҙ ғаилә** слабая семья
**көсһөҙ йыйым** слабый взяток
**күҙ** *диал. то же, что* **кәрәҙ күҙәнәге**
**күҙгәнәк** *диал. то же, что* **кәрәҙ күҙәнәге**
**күҙелдерек** *диал. то же, что* **битлек**
**күҙәнәк** ячейка (сотовая)
**күҙәнәктәрҙе таҙартыу** полировка ячеек
**күҙәтеү умартаһы** наблюдательный улей
**күҙәү** *диал. то же, что* **кәрәҙ күҙәнәге**
**күкәй күҙәнәге** *анат.* яйцеклетка
**күкәйлек көпшәләре** *анат.* яйцевые трубочки

**күп инәле ғаилә** многоматочная семья
**күп корпуслы умарта** многокорпусный улей
**күрек** дымарь, окуриватель
**күс** пчелиный рой
**күс айырыу** отроить пчел; роение
**күс айырған ғаилә** изроившаяся семья
**күс инәһе көбө** роевой маточник
**күс йыйыу ҡалағы** ложка для сбора роя
**күс көбөһө** роевая мисочка
**күс ҡайтарыу** возврат роя
**күс ҡеүәте** роевая энергия
**күс ҡундырыу** остановить летящий пчелиный рой
**күс ҡуныу** привитие роя
**күс һарыу** *то же, что* **күс ҡуныу**
**күсереп йөрөтә торған йәшник** переносный ящик
**күсмә умарта** кочевой улей
**күсмә умартасылыҡ** кочевое пчеловодство
**күсте айыртмау саралары** противороевые меры
**күсте һоҫоп алыу** снятие роя
**күстең айырылып сығыуы** выход роя
**күстең ҡотороноуы** роевая горячка
**күстәрҙе ҡарау** осмотр семей
**кәмәшәү** кормушка для пчел
**кәрешкә** *бот.* вика
**кәрәҙ** соты
**кәрәҙ күҙәнәктәре** ячейки
**кәрәҙ һаҡлағыс** сотохранилище
**кәрәҙҙең ҡынаһын асыу** распечатывание сотов
**кәрәҙҙәге һитәне айырып алыу** отбор перги от сотов
**кәрәҙле бал** сотовый мед
**кәрәҙле балауыҙ** пчелиный воск
**кәрәҙле рам уртаһы** средостение сота
**кәҫә бал** *диал. то же, что* **ҡомоҡкан бал**

# К

**ҡабул итеүсе ҡорттар** пчелы-приемщицы

**ҡаҙау** *диал. то же, что* **ҡорт ҡаяуы**

**ҡайын** *бот.* береза

**ҡайын еләге** *бот.* земляника

**ҡанатһыҙ ҡорттар** бескрылые пчелы

**ҡандала үләне** *бот.* донник

**ҡапҡаҡ** дверца, створка у колодочного улья

**ҡапҡас** крышка

**ҡапсыҡлы үрсем** мешотчатый расплод

**ҡар һыуы** талая вода

**ҡара ҡорт** *диал. то же, что* **ата ҡорт**

**ҡарабойҙай** *бот.* гречиха

**ҡарабойҙай балы** гречишный мед

**ҡарағас** *диал. то же, что* **солоҡ ағасы**

**ҡарап тикшереү** визуальный наружный осмотр

**ҡарауылсы ҡорт** пчела-сторож

**ҡармауыс** *анат.* щупальца у пчел

**ҡары ҡорт** пчелосемья, перезимовавшая в дупле дерева

**ҡарышлауыҡ** личинка

**ҡарышлауыҡ аҙығы** личиночный корм

**ҡарышлауыҡ күсереп ултырта торған рам** прививочная рама

**ҡарышлауыҡ күсереп ултыртыу** прививка личинок

**ҡатмарлы күҙҙәр** *анат.* сложные глаза

**ҡатнаш бал** полифлерный мед

**ҡатнаш сәсеүлек** смешанный посев

**ҡатнаш үрсем** смешанный расплод

**ҡаты бал** каменный мед *(мед диких пчел)*

**ҡаты һыу** жесткая вода

**ҡашыҡ** *этн.* деревянная или берестяная ложка для забора роя пчел

**ҡаяҙ** *этн. диал. то же, что* **моҙға**

**ҡаяу** *анат.* жало

**колаҡ сөй** ушко для подвешивания колодочного улья

**ҡомоҡҡан бал** засахарившийся мед

**ҡорт** (*или* **бал ҡорто**) пчела

**ҡорт ағыуы** пчелиный яд

**ҡорт ағыуы ҡушып яһалған препараттар** лечебные препараты пчелиного яда

**ҡорт ағыуын бүлдереп сығартыу** отбор пчелиного яда

**ҡорт ағыуының дауалау үҙсәнлектәре** лечебные свойства пчелиного яда

**ҡорт аҙыҡтары** корма пчел

**ҡорт айырыу** *то же, что* **күс айырыу**

**ҡорт ауырыуҙары** болезни пчел

**ҡорт аяҡтары** *анат.* ножки пчелы

**ҡорт баҙы** зимовник, омшаник

**ҡорт баҙын йылытыу** утепление зимовника

**ҡорт баҙындағы дымлылыҡ** влажность воздуха в зимовнике

**ҡорт балы** пчелиный мед

**ҡорт баҡсаһы** пасека

**ҡорт башы** *анат.* голова пчелы

**ҡорт биҙҙәре** *анат.* железы пчелы

**ҡорт биологияһы** биология медоносной пчелы

**ҡорт елеме** прополис

**ҡорт елеме ҡушып яһалған препараттар** лечебные препараты прополиса

**ҡорт елеме тығыҙлығы** плотность прополиса

**ҡорт күсе** пчелиный рой, пчелиная семья

**ҡорт күсенең бал йыйыу ҡеүәһе** медовая продуктивность пчелиных семей

**ҡорт күстәрен берләштереү** объединение пчелосемей

**ҡорт күстәренең бал биреүсәнлеге** продуктивность пчелиной семьи

**ҡорт күстәрен тыңлап ҡарау** выслушивание пчелиных семей

**ҡорт күстәренең үҫеү осоро** период роста пчелиной семьи

**ҡорт күстәрен яһалма үрсетеү** искусственное размножение пчелиной семьи

**ҡорт инәһе** пчелиная матка

**ҡорт йәттәһе** пчелиная обножка

**ҡорт кәрзинкәһе (ҡалтаһы)** *анат.* корзиночка

**ҡорт күҙҙәре** *анат.* глаза пчелы

**ҡорт күкрәге** *анат.* грудь пчелы

**ҡорт ҡалағы** *этн.* лопаточка для сгребания пчелиного роя

**ҡорт ҡарышлауығы** пчелиная личинка

**ҡорт ҡорһағы** *анат.* брюшко пчелы

**ҡорт ҡундырыу** остановить летящий пчелиный рой

**ҡорт ҡуныу** роение пчел

**ҡорт ҡурсағы** куколка пчелы

**ҡорт мейеһе** *анат.* мозг пчелы

**ҡорт мороно** *анат.* хоботок пчелы

**ҡорт мыйыҡсалары** *анат.* усики пчелы

**ҡорт ояһы** гнездо пчелы

**ҡорт паразиттары** паразиты пчел

**ҡорт сағыуы** ужаление пчелы

**ҡорт тоҡомдары** породы пчел

**ҡорт тубалы** роевник

**ҡорт тәпәйе** *анат.* подушечка

**ҡорт уғы** *диал. то же, что* **ҡорт ҡаяуы**

**ҡорт уйнау** игра пчел перед роением

**ҡорт үрсеме** пчелиный расплод

**ҡорт үрсетеү** разведение пчел

**ҡорт үрсетеү ысулдары** методы разведения пчел

**ҡорт һибеү** *биол. то же, что* **ҡорт ябыу**

**ҡорт һөлдәһе** *анат.* скелет пчелы

**ҡорт энәһе** *диал. то же, что* **ҡорт ҡаяуы**

**ҡорт ябыу** пустить рой в улей

**ҡорт яралғыһы үҫеше** постэмбриональное развитие

**ҡортсо** пчеловод, пасечник

**ҡортсолоҡ зоотехнигы** зоотехник по пчеловодству

**ҡортсолоҡ продукттарын анализлау** анализ продуктов пчеловодства

**ҡортсолоҡто ветеринария яғынан хеҙмәтләндереү** ветеринарное обслуживание пчеловодства

**ҡортсолоҡто көсәйтеү** интенсификация пчеловодства

**ҡортсолоҡтоң тауар продукцияһы** товарная продукция пчеловодства

**ҡортсолоҡтоң тулайым продукцияһы** валовая продукция пчеловодства

**ҡорттар альбинизмы** *биол.* альбинизм у пчел

**ҡорттар аномалияһы** *биол.* аномалия пчел

**ҡорттар популяцияһы** популяция пчел

**ҡорттар осмай торған осор** безоблетный период пчел

**ҡорттарға тамға һуғыу** маркировка пчел

**ҡорттарға һыу эсергес** поилка для пчел

**ҡорттарҙы өйрәтеү** дрессировка пчел

**ҡорттарҙы районлаштырыу** районирование пчел

**ҡорттарҙы селекциялау** селекция пчел

**ҡорттарҙы төтәсләү** окуривание пчел

**ҡорттарҙы тышҡа сығарыу** выставка пчел

**ҡорттарҙы яңы умартаға күсереү** перегон семей в новый улей

**ҡорттарҙың ағыуланыуы** отравление пчел

**ҡорттарҙың аҙашыуы** блуждение пчел

**ҡорттарҙың анатомияһы** *биол.* анатомия пчел

**ҡорттарҙың аталаныу урыны** случной пункт пчел

**ҡорттарҙың атлап йөрөүе** передвижение пчел

**ҡорттарҙың башҡарған эштәре** работа пчел

**ҡорттарҙың бейеүе** «танцы» пчел

**ҡорттарҙың бер төр сәскәнән икенсеһенә күсеүе** переключение пчел с одних растений на другие

**ҡорттарҙың еҫ һиҙеүе** *анат.* обоняние пчел

**ҡорттарҙың йоғошло ауырыуҙары** *вет.* инфекционные болезни пчел

**ҡорттарҙың йоғошло эс китеүе** заразный понос пчел; нозематоз

**ҡорттарҙың йоғошһоҙ ауырыуҙары** *вет.* незаразные болезни пчел

**ҡорттарҙың йылылыҡ биреү һәләте** теплотворная способность пчел

**ҡорттарҙың йәйен ҡырылыуы** летняя гибель пчел

**ҡорттарҙың ҡуҙғыуы** раздражимость пчел

**ҡорттарҙың ҡышҡа сыҙамлылығы** зимостойкость пчел

**ҡорттарҙың ҡышҡы күс йомғағы** зимний клуб пчел

**ҡорттарҙың ҡышҡы-яҙғы ҡырылыуы** зимне-весенняя гибель пчел

**ҡорттарҙың ҡышлауы** зимовка пчел

**ҡорттарҙың нервы системаһы** *анат.* нервная система пчел

**ҡорттарҙың осоу ағзалары** *анат.* летный аппарат пчел

**ҡорттарҙың осоу алыҫлығы** дальность полета пчел

**ҡорттарҙың осоу бейеклеге** высота полета пчел

**ҡорттарҙың осоу радиусы** радиус лета пчел

**ҡорттарҙың осоу юлы** пути лета пчел

**ҡорттарҙың осошо** облет пчел

**ҡорттарҙың оялағы үҙ-ара бәйләнеше** взаимосвязь пчел в гнезде

**ҡорттарҙың саҡҡыс ағзалары** *анат.* жалоносный аппарат пчел

**ҡорттарҙың тирә-йүнгә юҫыҡланыуы** ориентация пчел на местности

**ҡорттарҙың тын алыуы** *анат.* дыхание пчел

**ҡорттарҙың уҡмашыуы** выкучивание пчел

**ҡорттарҙың урлашыуы** воровство пчел

**ҡорттарҙың үҫеше** развитие пчел

**ҡорттарҙың һеркә йыйыуы** сбор цветочной пыльцы пчелами

**ҡорттарҙың һеркәгә булған ихтыяжы** потребность пчел в пыльце

**ҡорттарҙың эмбриональ үҫеше** эмбриональное развитие пчел

**ҡорттарҙың эс китеүе** *вет.* понос пчел

**ҡорттарҙың эш көнө** рабочий день пчел

**ҡорттарҙың эш күләме** рабочая нагрузка пчел

**ҡорттарҙың яҙғы осошо** весенний облет пчел

**ҡорттарҙың ялы** отдых пчел

**ҡорттоң артҡы күкрәге** *анат.* задняя грудь пчелы

**ҡорттоң атлап йөрөүе** пешая локомация

**ҡорттоң тын алыу ағзалары** *анат.* дыхательный аппарат пчелы

**ҡорһаҡтың ярым ҡуласалары** *анат.* брюшные полукольца

**ҡоһор ҡорт** *диал. то же, что* **ата ҡорт**

**ҡуналҡа** прилетная доска пчел

**ҡурсаҡ** *биол.* куколка

**ҡурсаҡ көбө** *биол.* кокон

**ҡурсаулыҡ** заповедник

**ҡушауыҙ** колодочный улей с двумя секциями и летами

**ҡушҡанат** *вет.* «спаренные крылья» (*болезнь пчел*)

**ҡыҙыл туҡранбаш** *бот.* красный клевер

**ҡыйыр ҡорт** *диал. то же, что* **ата ҡорт**

**ҡына** восковые крышечки (*восковые пластинки, которыми пчелы запечатывают соты*)

**ҡына ҡыра торған машина** машина для распечатывания сотов

**ҡыналанған кәрәҙҙәр** соты, запечатанные восковой пластинкой

**ҡыналау** запечатать соты восковой пластинкой

**ҡырағай ҡорттар** дикие пчелы

**ҡырым ҡорто** крымская пчела

**ҡыҫҡа танау** *диал. то же, что* **эшсе ҡорт**

**ҡыуған бал** мед, пропущенный через медогонку

**ҡыуау** *диал. то же, что* **төтәткес**

**ҡышҡы йомғаҡ** зимний клуб пчел

**ҡышлаған бал** перезимовавший мед

**ҡышлау** *диал. то же, что* **ҡорт баҙы**

**ҡышлау бал** *то же, что* **ҡышлаған бал**

**ҡышлауыҡ** *диал. то же, что* **ҡорт баҙы**

**ҡышлыҡ кәрәҙҙәре** соты для зимних пчел

**ҡышҡы-яҙғы аҙыҡ һаҡлығы** зимне-весенние запасы корма

**ҡышҡылыҡҡа оя әҙерләү** сборка гнезд на зимовку

**ҡышлыҡ бал һаҡлығы нормаһы** норма зимних запасов меда

**ҡышҡы эштәр** зимние работы

## Л

**лаванда** *бот. (эфир майлы культура)* лаванда

**лавр** *бот. (мәңге йәшел хуш еҫле ағас)* лавр

**леспедеца** *бот. (аҙыҡ үлән)* леспедеца *(«сибирский чай»)*

**ләлә** *бот.* лилия

**ләңге** *этн.* бортевая перекладина (*помогающая при лазании на бортевое дерево*)

## М

**магазин ялғанмаһы** *то же, что* **өҫтәлмә магазин**

**магазиндар ҡуйыу** постановка магазинов

**май есеме** жировое тело

**манса** *диал. то же, что* **һитә**

**миләш** *бот.* рябина

**минераль балауыҙ** минеральный воск

**минераль тоҙҙар** минеральные соли

**мисәтләнгән үрсем** запечатанный расплод

**мисәтләү** запечатать соты воском
**моҙға** *этн.* роевня
**моҡлау** червиветь *(болеть)*
**монофлер бал** монофлерный мед
**морон** *анат.* хоботок
**мөрйә** *диал. то же, что* **төтәткес**
**мыйыҡ таҙартҡыс** *анат.* аппарат для чистки усиков
**мәрке** *диал. то же, что* **моҙға**

# Н

**нескә етен үләне** *бот.* льнянка слабая
**нозематоз** *(умарта ҡорттарының ауырыуы)* нозематоз
**нор** пчелиный червь, вызывающий болезнь
**норлау** червиветь
**нәркәс** *(гөл)* нарцисс
**нуклеус умартаһы** нуклеусный улей

# О

**оҙайлы йыйым** продолжительный взяток
**оҙонайған инә көбөләре** *биол.* удлиненные маточники
**ойошҡан күс** свалочный рой
**орнитофиль үҫемлектәр** *бот.* орнитофильные растения
**осар ҡорттар** летные пчелы
**осмаҫ ҡорттар** нелетные пчелы
**осҡат** *бот.* бузина
**оя** *диал. то же, что* **кәрәҙ күҙәнәге**
**ояларҙы һәм умарталарҙы йылытыу** утепление гнезд и ульев
**ояларҙың эҫегә ҡыҙыуы** перегревание гнезд

**ояны елемләү** прополисование гнезда
**ояны сикләү (кәметеү)** ограничение гнезда
**ояны яңыртыу** обновление гнезда

## Ө

**өлгөргән инә көбө** зрелый маточник
**өлгөргән үрсем** зрелый расплод
**өлгөрмәгән бал** незрелый мед
**өрҙөргөс** *диал. то же, что* **төтәткес**
**өркәтәү** *диал. то же, что* **арҡатау**
**өҫкө кейә** верхний леток
**өҫкө яңаҡ биҙҙәре** *анат.* верхнечелюстная железа
**өҫкө яңаҡтар** *анат.* верхние челюсти
**өҫтәмә аҙыҡ** дополнительный корм
**өҫтәлмә магазин** магазинная надставка

## П

**питомник рам** рама-питомник
**портулак** портулак
**поляриметрик баһа** поляриметрическая оценка
**протеин** *(ябай аҡһым)* протеин

## Р

**район тоҡомсолоҡ умартаһы** районная племенная пасека
**рам өҫтөндәге арауыҡ** надрамочное пространство

**рамдарҙы балауыҙлау** навощивание рамок
**рамлы умарта** рамочный улей
**рекордсы инә ҡорт** матка-рекордсменка
**рәшә бал** падевый мед



**саған** *бот.* клен
**сағауын** *диал. то же, что* **бал ҡорто**
**сағауын балы** *диал. то же, что* **ҡорт балы**
**сағыу** жалить
**сағыштырма дымлылыҡ** относительная влажность
**сайыр** *диал. то же, что* **ҡына**
**саҡҡыс** *диал., анат. то же, что* **ҡаяу**
**саф тоҡом үрсетеү зонаһы** зона чистопородного разведения
**саф тоҡомло ҡорттар** чистопородные пчелы
**саф тоҡомло ҡорттар үрсетеү** разведение чистопородных пчел
**сей бал** незрелый мед
**сескә бил** *диал. то же, что* **бал ҡорто**
**сигәләү** *диал. то же, что* **мисәтләү**
**сикә** *диал. то же, что* **һитә**
**сискә балы** *диал. то же, что* **сәскә балы**
**солоҡ** 1. борть; 2. *диал. то же, что* **бал ҡорто;** 3. *диал. то же, что* **түмәр умарта**
**солоҡ ағасы** бортевое дерево
**солоҡ балтаһы** бортевой топорик
**солоҡ кейәһе** бортевой леток
**солоҡ ҡапҡасы** *то же, что* **ҡапҡаҡ**
**солоҡ ҡорто** бортевая пчела
**солоҡ мөгәрәбе** *диал. то же, что* **ҡорт баҙы**
**солоҡ табалдырығы** бортевая педаль

**солоҡ умарта** борть
**солоҡ умартасылығы** бортевое пчеловодство
**солоҡ хужалығы** бортевое хозяйство
**солоҡсо** бортевик
**солоҡсолоҡ** бортничество
**сортлы балауыҙ** сортовой воск
**сөрөк** гнилушка
**сөрөкләү** *диал. то же, что* **төтәҫләү**
**статер ғаилә** семья-статер
**сырпы** *этн.* крышка для ульев, плетеная из прутиков
**сырпыҡ** *диал. то же, что* **тағара**
**сәйбал** *диал. то же, что* **йәш бал**
**сәнсем** *этн. диал. то же, что* **тағара**
**сәскә** *бот.* цветок
**сәскә атыу** *бот.* цветение
**сәскә балы** цветочный мед
**сәскә-тат конвейеры** цветочно-нектарный конвейер
**сәскә һеркәһе** *бот.* цветочная пыльца
**сым** проволока
**сыра** *диал. то же, что* тағара



## Т

**табаҡлы балауыҙ** фабричный воск
**табаҡлы кәрәҙҙәр** листовые соты
**табалдырыҡ** *этн.* табалдырык (*доска, на которой стоят бортники при добывании меда из бортей)*
**табыш** *диал. то же, что* **йыйым**
**табышһыҙ осор** *диал. то же, что* **йыйымһыҙ осор**
**тағара** *этн.* снозы *(бортевая палочка, поддерживающая соты в борти)*
**тағатылмай торған умарталар** неразборные улья

**taŋғаҡ** *этн.* помост, предохраняющий борть от медведей

**таж япрағы** *бот.* лепесток

**таҡта умарта** *диал. то же, что* **дадан умарта**

**тал** *бот.* ива

**тал үләне** *бот.* вербейник

**талпан ауырыуҙары** *вет.* варроатоз

**тамға** *этн.* тамга

**тамға һалыу** *этн.* ставить тамгу

**таҫтаҡ** подставка для ульев

**тапалған балауыҙ** *диал. то же, что* **табаҡлы балауыҙ**

**тат** *бот.* нектар

**тат токсикозы** нектарный токсикоз

**тат йыйыусы ҡорттар** пчелы-сборщицы

**татау** *диал. то же, что* **тағара**

**татлы ысыҡ** медвяная роса

**татлыҡ** *бот.* нектарник

**татлыҡай** падь

**татлы үҫемлектәр бүленеше** классификация нектароносных растений

**татлы һут** *диал. то же, что* **тат**

**тат бүленеү** *бот.* выделение нектара

**тауар балауыҙы** товарный воск

**тауар балы** товарный мед

**таш үрсем** *биол.* каменный расплод

**ташҡын һыуы** паводковая вода

**теплица умартасылығы** тепличное пчеловодство

**техник балауыҙ** технический воск

**тиҙәк миҡдары** каловая нагрузка

**тоҙ токсикозы** солевой токсикоз

**тойоу ағзалары** *анат.* органы чувств

**тоҡом төркөмө** породная группа

**тоҡом яҡшыртҡыс инә ҡорт** матка-улучшательница

**тоҡомдо билдәләүсе сифаттар** породоотличительные признаки

**тоҡомло** породистый, племенной

**тоҡомло ғаилә** племенная семья
**тоҡомло инә ҡорт** племенная матка
**тоҡомлолоҡ** породистость, порода
**тоҡомсолоҡ** породность
**тоҡомсолоҡ совхозы** племенной совхоз
**тоҡомсолоҡ эше** племенная работа
**тос бал** полновесный мед
**тотош үрсем** сплошной расплод
**төксәләр** *анат.* волоски
**төп бал йыйымы** главный медосбор
**төп ғаилә** основная семья
**төп йыйым** главный взяток
**төп күс** маточная семья
**төпсөк умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**
**торпө** *этн.* инструмент для чистки бортей
**төтәçләү** закуривать, закуривание
**төтәткес** дымарь; окуриватель
**трахея системаһы** *анат.* трахейная система
**тубал** *диал. то же, что* **моҙға**
**тубана** *диал. то же, что* **моҙға**
**туғай балы** луговой медосбор
**туҙ ижау** *диал. то же, что* **ҡашыҡ**
**туҡмаҡ** *этн.* тукмак *(колотушка, подвешиваемая над бортью для предохранения ее от медведей)*
**тулайым артым** валовый привес
**туңау балы** остаток зимнего запаса меда
**туңдау бал** *диал. то же, что* **ҡышлау бал**
**тупланған күс** рой «ссыпчак»
**түмәр умарта** колодочный улей
**түмәр умарта ҡапҡасы** *то же, что* **ҡапҡаҡ**
**түнгәк умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**
**тын алғыстар** *анат.* дыхальца
**тырма** *диал. то же, что* **тағара**
**тырнаҡ йышҡы** бортевой скобель
**тырнаҡтар** *анат.* коготки

**тәбиғи аҙыҡты алмаштырыусылар** заменители естественных кормов

**тәбиғи йыйым** естественный взяток

**тәбиғи күс айырыу** естественное роение

**тәбиғи һайланыш** естественный отбор

**тәжрибә умартасылығы** опытное пчеловодство

**тәпән** *этн.* плоская посуда из полого ствола дерева для масла, меда и т. д.

**тәрбиәсе ғаилә** семья-воспитательница

**тәүге йырсы инә** певчий первак

**тәүге күс** первак

**тәүге осош** первый вылет

## У

**уйнау** игра в воздухе перед роением

**уйынсы** *диал. то же, что* **ата ҡорт**

**уҡ** *диал. то же, что* **ҡорт ҡаяуы**

**уҡмашыу** скучиваться, собираться в клубок

**уҡран бал** *диал. то же, что* **һитә**

**уҡыу-уҡытыу умарталығы** учебная пасека

**улаҡ рам** рамка-поилка

**улаҡ умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**

**умарта** улей

**умарта айырыу** *диал. то же, что* **күс айырыу**

**умарта алды майҙансығы** припасечный участок

**умарта бысағы** пчеловодный нож

**умарта диагностикаһы** пасечная диагностика

**умарта елләтеү** вентиляция ульев

**умарта замазкаһы** замазка для ульев

**умарта йәшниге** пасечный ящик

**умарта кейәһе** леток улья

**умарта корпусы** корпус улья

**умарта күсе** *диал. то же, что* **ҡорт күсе**

**умарта ҡапҡасы** крышка улья

**умарта рамы** рамки ульевые

**умарта сығарыу** выставка ульев

**умарта таҫтағы** подставка под улей

**умарта төбө** дно улья

**умарта төбөн таҙарта торған һоҫҡо** скребок-лопаточка

**умарта төҙөлөшө** конструкция ульев

**умарта төҫө** окраска ульев

**умарта түшәме** потолок улья

**умарта улағы** ульевая поилка

**умарта юнғыһы** тесак, применяемый в бортничестве

**умарта яһау** изготовление ульев

**умарталағы микроклимат** микроклимат улья

**умарталағы паразиттар** внутриульевые паразиты

**умарталарҙы күләгәләү** затемнение ульев

**умарталарҙы күсереү** транспортирование ульев

**умарталарҙы урынлаштырыу** установка ульев

**умарталыҡ** пасека

**умарталыҡ майҙаны** пасечный участок

**умарталыҡ көндәлеге** дневник пасеки

**умарталыҡ ҡасауы** пасечная стамеска

**умарталыҡтағы бал балансы** медовый баланс пасеки

**умарталыҡтарҙы паспортлаштырыу** паспортизация пасек

**умарталыҡты йәшелләндереү** озеленение пасеки

**умарталыҡтың төҙөлөшө** устройство пасеки

**умартаның ҡорттар ҡуна торған таҡтаһы** прилетная доска

**умартаның ҡорттар тарафынан елләтелеүе** вентилирование улья пчелами

**умартасы** пчеловод, пасечник

**умартасы гигиенаһы** гигиена пчеловода

**умартасы календары** календарь пчеловода

**умартасы өйө** пасечный дом

**умартасылыҡ** пчеловодство

**умартасылыҡ бригадаһы** бригада пчеловодческая

**умартасылыҡ ҡорамалдары** инвентарь пчеловодческий

**умартасылыҡ ҡорамалдары заводы** завод пчеловодческого инвентаря

**умартасылыҡ продукттарын таҙартыу** очистка продуктов пчеловодства

**умартасылыҡтың аҙыҡ базаһы** кормовая база пчеловодства

**умартасылыҡтың тәжрибә станциялары** опытные станции пчеловодства

**урау** *диал. то же, что* **һарыу**

**урмаҡ** *диал. то же, что* **күс**

**урман үҫемлектәренән йыйылған бал** лесной медосбор

**урмандағы баллы үҫемлектәр** *бот.* лесные медоносы

## Ү

**үҙенән-үҙе аталаныу** *бот.* самооплодотворение

**үҙенән-үҙе һеркәләнеү** *бот.* самоопыление

**үле ҡорттар** подмор

**үрсем** расплод

**үрсем ағзалары** *анат.* органы размножения

**үрсем ауырыуҙары** болезни расплода

**үрсем үҫтереү** выращивание расплода

**үҫемлек һыҙаттары** растительные полосы

**үҫемлектәрҙең аталаныуы** *бот.* оплодотворение растений

**үҫемлектәрҙең татлылығы** нектаропродуктивность растений

**үҫемлектәрҙең һеркәләнеүе** *бот.* опыление растений

**үҫтереү матдәләре** ростовые вещества

# Ф

**фацелия балы** мед фацелиевый
**фенологик күҙәтеүҙәр** фенологические наблюдения
**фураж балы** мед, оставленный пчелами на зиму

# Һ

**һағыҙаҡ ыласыны** *зоол.* пчелоед
**һаҡсы ҡорттар** пчелы сторожевые
**һалҡын һырынты** холодный занос
**һары ҡорт** *диал. то же, что* **эшсе ҡорт**
**һары мәтрүшкә** *бот.* зверобой
**һарығыс** *диал. то же, что* **һарыуыс**
**һарыу** окутывать, облеплять
**һарыуыс** приспособление из четырех колышков, покрытых корой для роения пчел
**һауа дымлылығы** влажность воздуха
**һауа тоҡсайҙары** *анат.* воздушные мешки
**һеркә** *бот.* пыльца
**һеркә алмаштырғыс** заменитель пыльцы
**һеркә йыйғыс** пыльцеуловитель
**һеркә ояһы** *бот.* пыльцевое гнездо
**һеркә токсикозы** пыльцевой токсикоз
**һеркә тоҡсайы** *бот.* пыльцевой мешок
**һеркә йыйымы** пыльцевой взяток
**һеркә һабы** *бот.* тычиночная нить
**һеркә япрағы** *бот.* тычинка
**һеркәле үҫемлектәр** *бот.* пыльценосные растения
**һеркәлек** *бот.* пыльник
**һеркәләндереүсе бөжәктәр** насекомые-опылители

**һеркәләнеү** *бот.* опыляться

**һитә** перга, хлебина, цветень

**һитә алмаштырғыс** заменители перги

**һитә көйәләре** *зоол.* перговые моли

**һитә менән бал ҡатыштырылған аҙыҡ** медоперговая смесь

**һитә ҡоротҡостары** вредители перги

**һитә талпандары** *зоол.* перговые клещи

**һоро ҡорт** *то же, что* **ата ҡорт**

**һоҫа** *диал. то же, что* **ҡашыҡ**

**һөйәм умарта** *диал. то же, что* **түмәр умарта**

**һуҡырлыҡ** *биол.* анофтальмия

**һуңлап йыйылған йыйым** поздний взяток

**һурнаҡ** пчела-воровка, которая забирает мед из чужих ульев

**һүтелмәле күп корпуслы умарталар** разборные многокорпусные ульи

**һыҡтырылған бал** *диал. то же, что* **айыртылган бал**

**һылау** *диал. то же, что* **мисәтләү**

**һыңар күҙле ҡорттар** *биол.* одноглазые пчелы

**һырынты** занос

**һыуыҡ тейгән инә ҡорт** застуженная матка

**һыуыҡ тейгән үрсем** застуженный расплод

**һыуыҡ һырынты** холодный занос

## Ш

**шайтан таяғы** *бот.* чертополох

**шартлы рефлекс** условный рефлекс

**шартһыҙ рефлекс** безусловный рефлекс

**шеш** *диал. то же, что* **тағара**

**шим бал** чистый мед

**шимләү** подкармливать пчел сахарным сиропом

**шәйләк ҡорттар** пчелы-разведчицы

**шәкәр-аҡһым ҡамыры** канди (*корм для пчел*)
**шәкәр балы** сахарный мед
**шәкәр иретмәһе** сахарный сироп
**шәкәр онтағы** сахарная пудра

# Ы

**ыу** *диал. то же, что* **ҡорт ағыуы**

# Э

**эзбизләнгән үрсем** *вет.* известковый расплод

**эләңге** *этн.* подножка, поднога (*палка или доска, привязываемая к дереву для стояния бортника во время ухода за пчелами или съема меда*)

**энә** *диал. то же, что* **ҡаяу**
**эркәтәү** *этн.* веревка для подачи ведра с медом
**эсәк ауырыуҙары** *вет.* кишечные болезни
**эшкәртелгән балауыҙ** производственный воск
**эшсе ҡорттар** рабочие пчелы

# Ә

**әре ҡорт** *то же, что* **ата ҡорт**
**әре ҡорттар тупланған урын** место сбора трутней
**әре ҡорттар үрсетеүсе ғаилә** отцовская семья
**әрйә** *диал. то же, что* **моҙға**
**әсә ҡорт** *диал. то же, что* **инә ҡорт**

**әсәлек** *диал. то же, что* **инә көбө**
**әүрәткес бейеү** виляющий танец, вербовочный танец

## Ю

**юғалған урынына сыҡҡан инә ҡорт** свищевая матка
**юғары продуктлы ҡорт** высокопродуктивная пчелосемья
**юнғы** общее название инструментов для выделки бортей и колодочных ульев

## Я

**ябай күҙҙәр** *анат.* простые глаза
**яһалма көбө** искусственная мисочка
**яғау** бортевое тесло
**яҙғы йыйым** весенний взяток
**яҙғы ревизия** весенняя ревизия
**яҙғы эштәр** весенние работы
**ялҡау ҡорт** *диал. то же, что* **һурнаҡ**
**ялтас ҡорттар** безволосые пчелы
**яңғыҙаҡ ҡорттар** одиночные пчелы
**яңы бал** новый, свежий мед
**яңы ғаилә** отводок
**япраҡ балы** падевый мед
**япраҡ балына ағыуланыу** падевый токсикоз
**япраҡ һабы** *бот.* черешок
**ярҙамсы инә ҡорт** матка-помощница
**ярым күҙ** ячейка, наполовину наполненная медом
**яһалма бал** искусственный мед
**яһалма һайланыш** искусственный отбор

## ҠУШЫМТА

### Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә

Байҙан йоҡмай, балдан йоға <От богатого нет пользы, а от меда есть>

Алйотҡа өгөт әйтһәң «алдай», – тиер,

Аҡыллыға өгөт әйтһәң «балдай», – тиер <Глупый не прислушается к твоему совету, а умный скажет, что твой совет сладок как мед>

Бал – себендә, яҡшы һүҙ әҙәмде эйәләштерә <Мед притягивает мух, а доброе слово – человека>

Бал тәмле тип, бармағыңды тешләмә <Позарившись на мед, не откуси палец>

«Бал» тиһәң, бер кәмей, бармаҡ тыҡһаң, ике кәмей <Мед убавляется от одного слова «мед», а если засунешь палец – убавляется вдвойне>

«Бал, бал» тигәндән ауыҙҙа тат булмай <От одного слова «мед» во рту не станет сладко>

Бал тәмле, балдан бала тәмле <Ребенок слаще меда>

Бала күрмәгән – балдан ауыҙ итмәгән <Не родивший ребенка не отведал меда>

Бал – арыу, етмеш төрлө ауырыуға дарыу <Мед исцеляет от семидесяти болезней>

Бал тотҡан бармағын ялаған <Кто пчел разводит, тот и мед ест>

Бал балсыҡ ашата <С медом и глина вкусна>

Бал ҡортоноң балы бар, балға тиклем наҙы бар <Пчела приносит не только сладость, но и радость>

Бал тамсынан йыйылыр <Мед собирается по каплям>

Бал ҡапҡан – ауыҙ япҡан, асыҡҡан – ауыҙ асҡан <Отведавший мед – наелся, не отведавший – остался голодным>

Бал бармаҡ тешләтер <Чтобы иметь мед, надо много трудиться>

Бал тәмле лә, ҡорт саға <Мед вкусен, да больно жалит пчела>

Балдың тәмен айыу белә <Лучше всех вкус меда знает медведь>

Балын ятатһаң, бәләһен дә ярат <Любишь мед, люби и хлопоты>

Бал ҡортоноң телен балсы белер <Повадки пчел знает пчеловод>

Барын-юғын белмәйҙер, бал теләйҙер тамағым <Есть ли, нет ли, а меда отведать хочется>

Был да балам балаһы – балдан татлы әсәһе, был да балам балаһы-ҡара йылан әсәһе <Одного внука мать слаще меда, потому что она – дочь, другого внука мать – черная змея, потому что она – сноха>

Йылан ағыу тапҡан ерҙән, бал ҡорто бал табыр <Там, где змея находит яд, пчела находит мед>

Бер тамсы дегет бер мискә балды боҙа <Ложка дегтя портит бочку меда>

Балсы ҡулынан бал тамыр, һауынсы ҡулынан һөт тамыр <У пчеловода в изобилии мед, у имеющего корову – в изобилии молоко>

Инәһеҙ ҡорт бал йыймаҫ, бал йыйһа ла мул йыймаҫ <Пчелы без пчелиной матки не собирают мед, а если и собирают, то немного>

Инә ҡорто ғәйрәтле булһа, умарта ҡеүәтле була <У сильной матки сильная семья>

Ҡорт бал табыр, ир мал табыр <Пчела найдет мед, мужчина добудет богатство>

Ҡорт таныһаң тотоп ал, күсе һайын бер бот бал <Старайся приручить пчелу, каждый пчелиный рой принесет тебе пуд меда>

Ҡорт саҡмайынса бал булмаҫ <Пока не ужалит пчела, не получишь меда>

Ҡотһоҙға ҡорт ҡунмаҫ, умартаһында ҡорт булмаҫ <К невезучему не прилетит пчелиный рой и не станет жить в его ульях>

Ҡорт күсә иле менән <Пчелы отделяются вместе с роем>

Ҡорттоң инәһе ҡайҙа ҡунһа, күсе шунда ҡуныр <Рой садится в то место, куда села пчелиная матка>

Яҡшы һүҙ балдан татлы <Приветливое слово слаще меда>

### Былар ҡыҙыҡлы

...бал ҡорто һаҡсылары уғры ҡорттарҙы, шулай уҡ башҡа ғаилә ҡорттарын еҫенән танып беләләр. Һәр бал ҡорто ғаиләһенең үҙенең генә үҙенсәлекле еҫе була;

...инә ҡорт ата (әре) ҡорт менән бер генә тапҡыр аталана, унын орлоғон махсус ағзаһында һаҡлай һәм үҙенә ҡасан кәрәк, шул саҡта файҙалана;

...инә ҡорт ҡарышлауығы йәшәүенең 5 көнө эсендә ҙурлыҡҡа өс мең тапҡырға, ә эш ҡорто 1,5 мең тапҡырға үҫә;

...инә ҡорт үҙенең нәҫелдәштәренә ҡарағанда 50—60 тапҡырға оҙағыраҡ йәшәй;

...инә ҡорт йәйен тәүлегенә 2000-гә тиклем, ә иң күбендә 3500-гә ҡәҙәр йомортҡа һалыуға һәләтле. Был йомортҡаларҙың ауырлығы инә ҡорттоң үҙенең ауырлығынан ике тапҡырҙан да күберәккә артып китә;

...төп бал йыйыу мәленең тамамланыу билдәһе булып умартанан әре ҡорттарҙы туҡмап ҡыуып сығарыу һанала;

...бал ҡорто осҡан саҡта секундына 440 тапҡыр ҡанатын ҡаға;

...100 мг ауырлыҡтағы бал ҡорто осҡан саҡта сәғәтенә 10 мг-ға тиклем бал һуты ҡуллана;

...бер осоуҙа бал ҡорто 50–60 мг-ға тиклем бал һуты килтерергә мөмкин, ә ҡорт күсе көсөргәнешле эшләгәндә көнөнә уны 10–12 килограмға тиклем йыя ала;

...ҡытыршы йөҙлө әйбер өҫтөнән бал ҡорто үҙенен ауырлығынан 20 тапҡырға ауырыраҡ йөктө тартырға һәләтле (ат үҙенең ауырлығына тиң йөктө тарта ала);

...бал ҡорто күсенең ауырлығы 5–6 килограмға тиклем етергә мөмкин. Күс 50–60 мең ҡорттан тора, уларҙың бөрләтеүендә 2–3 килограмм бал була. Йонсоу, насар көндәр торғанда, бал ҡорттары үҙенең һаҡлыҡ балы менән 8 көн буйына туҡлана ала;

...бал ҡорто умартанан 8 километрға тиклем алыҫлыҡҡа осоп китә һәм кире ҡайтыу юлын таба ала. Бал ҡортонон файҙалы осошо радиусын 2 км тип иҫәпләйҙәр, был иһә 1256 гектарға тиң;

...тән температураһы 15 градусҡа тиклем түбәнәйгәндә, бал ҡорто осоуын туҡтата;

...бал ҡортонон тән температураһы +13, +14 градус булһа, унын хәле ауырлаша, быңдай температурала ул хәрәкәт итеүҙән туҡтай;

...тән температураһы 8–9 градус булһа, ҡорт хәрәкәтләнеү һәләтлеген юғалта һәм үлем хәленә килә;

...тән температураһы 8 градус һәм унан да түбән төшһә, ҡорттар ҡатып ҡала;

...әгәр ҡатып ҡалған ҡорттоң тән температураһы ике көн эсендә 2 градустан түбән төшмәһә, ул йылытҡан ваҡытта терелә;

...әгәр ояның үрсем өлөшөндә температура +32 градусҡа тиклем түбәнәйһә, бал ҡортонон үҫеше 2–3 тәүлеккә тиклем тотҡарлана һәм ҡорттар зәғиф ҡанатлы булып сығалар;

...үрсем өлөшөндә температура +27 градусҡа тиклем һыуынһа, сыҡҡан ҡорттар бөтәһе лә шунда уҡ һәләк була;

...ояның температураһы +38, +39 градуска тиклем күтәрелһә,артыҡ йылылыҡтан үрсем һәләк була;

...ҡышҡы осорҙа ояла күстең үҙәк өлөшөндә, ҡорттар рамдар араһында тупланған ерҙә, температура 24 градус самаһы була;

...бер килограмм бал ҡулланып, ҡорттар яҡынса 1450 грамм углекислота һәм пар формаһында 500 грамм һыу бүлеп сығара. Уңайлы ҡышлатыу урындарында, умарта баҙында ҡорт ғаиләһе ҡышҡы осорҙа 10 килограмм самаһы бал файҙалана. Был иһә 14,5–17,4 кг углекислый газ һәм 5–6 кг һыу барлыҡҡа килтерә;

...углекислота ла, һыу ҙа оянан даими сығарып торола. Һөҙөмтәлә ояла тейешле дымлылыҡ, углекислый газ һәм кислород ҡушымтаһы булдырыла;

...ояла һауаның дымлылығы 50 процент булһа, бал ҡортоноң йоморткалары кибә, ә дымлылыҡ 95–100 процент булһа, уларҙың үлеүе күҙәтелә;

...бал ҡортоноң кәрәҙ күҙәнәге тәбиғәттәге иң рациональ геометрик формалы һауыт булып тора, уны төҙөү өсөн аҙ ғына материал талап ителә (ҡорттарҙың 100 күҙәнәгенә 1,3 г балауыҙ тотонола), ә төҙөлөш яғынан ныҡлығы һәм һыйҙырышлылығы буйынса уның тиңдәше юҡ;

...бал ҡорттары – «математиктар». Улар төҙөгән кәрәҙҙәр үлсәмдәренең аныҡлығы, формаларының бер ишлеге һәм теүәллеге менән айырылып тора. Улар иң рациональ геометрик форманы – кәрәҙ күҙәнәгенең төбөндә түңкәрелеп ятҡан ромбиктарҙан торған өс яҡлы пирамидалы, алты ҡырлы форманы һайлаған. Ошондай форма арҡаһында кәрәҙ күҙәнәктәре бер-берећенә үтә лә яҡын, тығыҙ итеп урынлашҡан, һөҙөмтәлә төҙөлөшкә урын әҙ китә һәм был бик нескә, ватылыусан төҙөлөштөң иң юғары ныҡлығы тәьмин ителә, кәрәҙҙәрҙең иң күп һыйҙырышлылығына ирешелә (стандарт оя рамына 4 кг бал һыя) һәм уларҙы төҙөү өсөн балауыҙ тотоноуҙа ҡәтғи экономия яһауға өлгәшелә;

...балауыҙ – бал ҡорттарының иң ҡиммәтле төҙөлөш материалы. Ысын умартасы балауыҙҙы бәләкәй генә бөртөктәрҙән йыя, сөнки ҡорттар бүлеп сығарған 100 балауыҙ тәңкәһе, ни бары 25 мг (бер грамдың ҡырҡтан бер өлөшө) тарта, һәм шулай булыуға ла ҡарамаҫтан айырым умартасылар бер миҙгелдә һәр ҡорт ғаиләһенән 2 килограмға тиклем балауыҙ алыуға өлгәшә;

...һитә составына бик күп микроэлементтар: барий, ванадий, вольфрам, тимер, алтын, иридий, кальций, кадмий, кобальт, кремний, магний, баҡыр, молибден, мышаяҡ, аҡ ҡурғаш, палладий, платина, терегөмөш, фосфор, хлор, хром, цинк, стронций инә;

...бер кәрәҙ күҙәнәгенә 18-гә тиклем йоморса (һитә йомғағы) һыя, унда һитә массаһы 140–180 мг тәшкил итә;

...ҡорттар тарафынан йыйылған татлы һут улар тарафынан бик ныҡ ентекле эшкәртеү үткәргәндән һәм 40-тан алып 70 процентҡа тиклем һыуҙы парға әйләндереп ҡыуып сығарғандан һуң ғына балға әйләнә. Бер көндә йыйылған 5 килограмм татлы һуттан, эшкәрткәндән һуң, 1,5–2 килограмм ғына бал тороп ҡала;

...бер йыл эсендә бер бал ҡорто ғаиләһенең йәшәү һәләтлеген тәьмин итеү өсөн 80–100 кг бал (шуның 10–12 кг-ы ҡышҡы мәлдә тотонола), 20–25 кг һитә һәм 30 литр һыу талап ителә;

...күп быуаттар буйы кешеләр, бал ҡорттарының ҙур ғаиләһендә инә ҡорт, ҡорттар төркөмө йәки һоро (әре) ҡорттар «хужа» булып тора , тигән бәхәс алып барҙы. Моғайын, күп быуаттарға һуҙылған бәхәстә ҡатнашыусылар, «хужа»ның бөтөнләй юҡлығын белһә, бик аптырашта ҡалыр ине. Әммә «хужа» ролен үтәүсе инстинкт бар, йәғни бөтәһенә ҡорттарҙың йәшәү эшмәкәрлеге «идара итә»;

...тәбиғәтте өйрәнеүсе бөйөк Чарльз Дарвин ҡорттарҙың кәрәҙ эшләү инстинктын «бөтә инстинкттарҙан иң ғәжәбе» тип атаған;

...шундай осраҡтар ҙа булған: сығып киткән күс, үҙенә һауа ояһы ҡороп, йүкә ботағында, көнбағыш кәрзинендә 35 – 46 көнгә «туктап торған»;

...илебеҙҙең айырым төбәктәрендә беҙҙең көндәргә тиклем умартасылар, күс айырып сыҡҡан саҡта, күнәккә, тасҡа, салғыға һәм башҡа әйберҙәргә һуға. Уларҙың фекеренсә, был күсте «ҡамап ала», йәнәһе. Ысынында иһә ҡорттарға был тауыштың бөтөнләй кәрәге юҡ. Саң ҡағыу – борондан килгән ғәҙәт кенә, уның асылы шуға ҡайтып ҡала: умартасы, берәй нәмә шалтыратып, үҙенең күршеһен күс осоп сығыуы тураһында иҫкәртә, әгәр ҙә күс уның ихатаһына барып ҡунһа, күрше күсте ҡайтарып бирергә тейеш була;

...белендермәй генә сығып киткән күстең ҡайһы ғаиләнән икәнен еңел белеп була. Бының өсөн кисен күстән ҡорттарҙы бер ҡалаҡ һоҫоп алалар ҙа уларға теш порошогы йәки он һибәләр һәм ҡалаҡтан бушаталар. Ҡорттар үҙҙәренең ҡайҙа йәшәгәндәрен «иҫкә төшөрә» һәм элекке урындарына кире әйләнеп ҡайта;

...күректе ышаныслы тоҡандырып ебәреү өсөн ҡоро ҡайын туҙы, ә яндырыу өсөн өйәңке сөрөгө файҙаланыла;

...ҡорттар һиҙеү буйынса «чемпиондар». Улар еҫтәрҙе кешегә ҡарағанда мең тапҡырға ныҒыраҡ тоя һәм айырып таный. Ҡорт бал йыйымы сығанағын эҙләгәндә сәскәләрҙең хуш еҫен бер саҡрымдан һәм унан да алыҫтараҡ тоя, улар араһынан иң яҡшыларын айыра һәм бал һуты барлығын һиҙә;

...ҡорттар – «синоптиктар». Ямғыр алдынан улар, әйтерһең дә, «команда» буйынса берҙәм рәүештә умарталарға әйләнеп ҡайта. Ғалимдар был хәлде, ямғыр йәки дауыл алдынан һауа электр менән бик ныҡ тула һәм ҡорттарҙың шунда уҡ статик заряды күбәйә, тип аңлата. Ул ҡорттарға умартаға ҡайтырға саҡырыусы хәүефле, ҡурҡыныслы хәл сигналы булып хеҙмәт итә лә инде;

...бал ҡорто бер саҡҡанда 0,2 мг ағыу бүлеп сығара;

...кеше өсөн бал ҡорто ағыуының үлтерерлек дозаһы бер кг ауырлыҡҡа 1,4 мг йәки уртаса 0,1 – 0,2 г ағыу тәшкил итә, ул 500–1000 ҡорт саҡҡанға тигеҙ;

...хатта һау-сәләмәт кеше лә аллергик реакция арҡаһында бер тапҡыр ҡорт сағыуҙан да үлергә мөмкин;

...сысҡандар – 2–3, себештәр – 3–5, тауыҡтар – 8–10, йорт ҡуяндары – 10–20 һәм бер нисә тиҫтә ҡорт сағыуҙан үлә, ә аттар өсөн 1000-дән ашыу ҡорт сағыу – үлтерерлек доза;

...йыландарға, терпеләргә, баҡаларға, ташбаҡаларға, селәндәргә, айыуҙарға һәм башҡа ҡайһы бер хайуандарға бал ҡорто ағыуы тәьҫир итмәй, йәғни улар ағыуға бирешмәй;

...миллиондарса йыл элек бик күп бөжәктәр һәм хайуандар үлеп бөткән. Хатта динозаврҙар ҙа. Ә бал ҡорттары ҡалған һәм бер нисек тә үҙгәрмәгәндәр тиерлек.

...инә ҡорт бер ҡасан да кешене саҡмай, ләкин башҡа инә ҡорт менән осрашҡанда, ярһып, ҡаяуын эшкә ҡуша ала;

...әгәр ҙә умартасы ҡулдарын ентекләп мелисса үләне йәки лимон бөтнөгө япрағы менән ыуһа, ҡорттар саҡмай, уларҙың еҫен ҡорттар ныҡ ярата. Шуға ла күс ябыр алдынан умартаның эсен шул үлән менән һөртәләр;

...умарталыҡтан алыҫ булмаған ерҙә электр тапшырыу линиялары һәм юғары вольтлы линиялар бал ҡорттарының йәшәү ваҡытына, инә ҡорттарҙың һаҡланыуына һәм, ахыр сиктә, ҡорт күсенең продукт биреүенә кире йоғонто яһай. Электр ҡыры тәьҫире аҫтында ҡорттар шаҡтай асыулы булып китә;

...балауыҙ көйәһен умартаға киптереп һалынған цитрус емешенең (әфлисун, лимон, грейпфрут) ҡабығы, шулай уҡ айыу баланы, ҡара тамыр, әрем, кейәү үләне һәм башҡа ҡырҡыу еҫле үҫемлектәр ҡурҡыта;

...балауыҙ көйәһе һарымһаҡ еҫенән ҡурҡа. Әгәр ҙә кәрәҙҙәр һаҡланған йәшниктең йәки умартаның стенала-

рына һарымһаҡ һөртһәң, көйә уларға зарар килтерә алмай;

...ҡырмыҫҡалар һаҙанаҡ үләненән ҡурҡа, уны йоҡа ғына итеп ҡорттар үҙ йомортҡаларын урынлаштыра торған киндер япмаға йәки умартаның төбөнә йәйеп һалырға кәрәк. Ҡырмыҫҡаларға ҡаршы көрәштә бигерәк тә умарта аҫтына көл һәм эзбиз оно һибергә кәрәк. Шулай уҡ умартаға үтеп инә торған урындарға күмер һөртөп сығыу ҙа етә;

...көйәнән һәм кимереүселәрҙән ҡурҡытыу ысулы сифатында умартасылар бер йәки бер нисә үҫемлекте: әле генә өҙгән әрем, сәтләүек япрағы, үлмәҫгөл, еҙтөймә, һаҙанаҡ, айыу баланы, эт теле үләндәрен файҙалана, уларҙы умарта эргәһенә йәйеп һала. Кимереүселәр ул үҫемлектәр еҫенә түҙә алмай, был ерҙе ташлап китә;

...сысҡан һәм ҡомаҡтарға аҡһырғаҡ япрағын йәки ҡара-зирә орлоғон онтап, онға бутап, шулай уҡ зәһәрле сүл боросон йомортҡа һарыһына болғатып, тимерҙең бысҡы вағын сүпрәгә ҡатыштырып биреү үлемесле тәьҫир итә. Алдатҡыстарҙы кәрәҙҙәр һаҡланған урынға йәки умарталар ҡышлай торған ергә йәйеп һалалар;

...40 мг һут һыйҙыра торған бөрләтәүен тултырыу өсөн, бал ҡорто бер осоуҙа 200-ҙән кәм булмаған көнбағыш, эспарцет йә горчица сәскәһенә, 15–20 баҡса культураһы сәскәһенә, 130–150 ужым рапсына йәки кориандр, йә чина сәскәһенә ҡунаҡларға тейеш;

...күпселек үҫемлектәрҙең татлы һутының составында өс төр шәкәр – сахароза, глюкоза һәм фруктоза бар. Улар төрлө үҫемлектә төрлөсә миҡдарҙа була. Ҡорттар күп глюкозалы (көнбағыш, горчица, тиле шалҡан һәм башҡалар) татлы һуттан эшкәрткән бал тиҙерәк ҡомоға. Әгәр ҙә татлы һутта фруктоза күберәк булһа (аҡ һәм һары акация, ашай торған каштан, арса), бал аҡрыныраҡ ҡомоға;

...бик күп үҫемлектәр бер үк ваҡытта һут һәм һеркә бүлә. Ләкин шундай үҫемлектәр ҙә бар, уларҙан ҡорттар

бары тик һеркә генә йыя. Ундайҙарға сәтләүек ҡыуағы, мәк, гөлйемеш, люпин, кукуруз һәм башҡалар инә;

...әгәр ҙә умарталыҡтан алыҫ булмаған ерҙә аҙыҡ сығанағы тапһа, ҡорт умарта эсендә, кәрәҙҙәр өҫтөндә «өйөрөлөп бейей». Ә ҡорттоң ҡорһағы менән «ҡыйшаңлаған» бейеүе алыҫыраҡта үҫкән баллы үҫемлек йәки һеркә тураһында сигнал бирә;

...«һут» (нектар) һүҙе, грек теленән тәржемә итһәң, үлемһеҙлек бүләк итә торған «аллалар эсемлеге» тигәнде аңлата;

...бер ҡалаҡ бал (30 г) әҙерләү өсөн 200 ҡорт иң яҡшы йыйым осоронда бер көн буйына һут йыйырға тейеш. Яҡынса шунса уҡ ҡорт умартала һутты ҡабул итеү һәм эшкәртеү менән шөғөлләнә. Ошо уҡ ваҡытта ҡорттарҙың бер өлөшө ҙур тырышлыҡ менән ояны елләтә, быныһы иһә һуттан артыҡ һыуҙы парландырыу ниәте менән эшләнә;

...1 кг бал йыйыу өсөн ҡорттар 4500-гә тиклем осош яһарға һәм 6–10 миллион сәскәнән һут алырға тейеш. Көслө ғаилә көнөнә 5–10 кг бал (10–20 кг һут) йыя ала.

...күс айырыуҙы иҫкәртеү һәм күстәрҙең юғалыуына юл ҡуймау өсөн, умартала бөтә инә ҡорт ояларын юҡ итәләр һәм уны көсһөҙ ғаилә урынына ҡуялар. Бында иһә инә ҡорт һаҡлыҡ өсөн 2–3 конгә ҡаплауыс менән ябылып ҡуйыла. Осоусы бал ҡорттары көсһөҙ ғаиләгә эләгеп, бал йыйыу эшенә тотона;

...умартанан сыҡҡан күстәргә юлда һыулы һәм ҡомло ҡаршылыҡтар булмаһа, улар төньяҡ-көнсығыш йүнәлешкә ынтыла;

...айырған ҡорттар ғәҙәттә саҡмай йәки саҡҡан осраҡтары бик һирәк, сөнки был мәлдә ҡорт бөрләтәүе бал менән тулған була (бал бөрләтәүенә 40–50 миллиграмға тиклем бал һыя). Күсте йыйған, уны урынлаштырған (япҡан) саҡта төтөн менән артыҡ мауығырға ярамай.

...иң күп балды Алыҫ Көнсығышта һәм Себерҙә йыйылар. Шундай осраҡтар мәғлүм: йүкә сәскә атҡан осорҙа

Алыҫ Көнсығышта үлсәүгә ҡуйылған умартанан көнөнә 30–33 килограмм артым алалар. Айырым ғаиләләр Себер шарттарында миҙгеленә 420-шәр, ә Алыҫ Көнсығышта 330–340-ар килограмм тулайым бал йыя.

## Файҙалы кәңәштәр

**Һыуыҡ тейгән саҡта** балды төнгөләккә ҡайнар сәй йәки һөт (1 стаканға бер аш ҡалағы бал), лимон һуты (100 грамм бал һәм бер йәки ярты лимон), ҡурай еләге һәм башҡа үләндәр менән эсергә тәҡдим ителә.

1 литр һыуға 0,5 кг һуған, 50 г бал һәм 40 г шәкәр һалырға, һүрән генә утта ярты сәғәт ҡайнатырға. Һыуытылған һарҡындыны шешәгә ҡойорға һәм тығыҙ итеп ябырға. Көнөнә 4–6 аш ҡалағы эсәләр.

1 аш ҡалағы миҡдарында үгәй инә үләненең киптерелгән япраҡтарын 1 стакан ҡайнар һыуҙа сәй һымаҡ бешерәләр. Аҙ ғына һыуыталар, һөҙәләр һәм 1 аш ҡалағы бал өҫтәйҙәр. Йүтәлде йомшартыу сараһы булараҡ, көнөнә 2–3 мәртәбә берәр аш ҡалағы эсергә кәрәк.

2 аш ҡалағы киптерелгән (йәки 100 грамм яңы йыйылған) ҡурай еләге емештәре 1 стакан һыуҙа бешерелә, 10–15 минуттан һуң 1 аш ҡалағы бал өҫтәлә һәм йылы килеш тирләткес дарыу сифатында ҡулланыла.

**Грипп менән ауырығанда** халыҡ араһында киң билдәле булған сара – бал-һарымһаҡ бутҡаһы файҙалы. Уның өсөн ҡабыҡтан таҙартылған һарымһаҡты ҡырғыста ҡыралар, 1:1 нисбәтендә бал менән (йүкә балы яҡшыраҡ) бергә бутайҙар һәм йоҡлар алдынан 1 аш ҡалағы ашап, йылы һыу эсәләр. Дауалау курсы – 3–5 көн. Ҡатнашманы ҡулланыр алдынан ғына әҙерләйҙәр.

**Тымаулағанда** сей сөгөлдөр һутына бал өҫтәргә лә һәр танау тишегенә көнөнә 4–5 тапҡыр 5–6-шар тамсы тамыҙырға.

**Йүткергәндә** бик һәйбәт сара – бал менән лимон һуты. Бер лимонды аҙ ғына һыуға һалып, һүрән утта 10 минут тирәһе бешерергә кәрәк. Шунан уны урталай ярырға ла, һутын һығып, ике аш ҡалағы глицерин өҫтәргә, болғатырға һәм стакан тулғансы бал ҡойорға.

**Йоҡоһоҙлоҡ интектергәндә** балдың тынысландырыусы тәьҫире файҙаланыла. Бер аш ҡалағы бал һалынған бер стакан йылымса һыу һеҙҙе тәрән һәм тыныс йоҡо менән тәьмин итер.

**Ҡан баҫымы юғары** булғанда бал менән йәшелсә һуттары эсеү тәҡдим ителә. Мәҫәлән, сөгөлдөр, кишер, шалҡан һутын һәм балды бер тигеҙ күләмдә (әйтәйек, берәр стакан) алып болғаталар. 2–3 ай дауамында ашарҙан бер сәғәт алда, көнөнә 3 тапҡыр, бер аш ҡалағы эсергә. Ҡатнашманы һалҡын урында һаҡларға кәрәк.

**Юғары әселекле гастрит ауырыуында** көнөнә өс тапҡыр ашарҙан 1,5–2 сәғәт алда бал ашарға. Бынан тыш, уны йылы һыуҙа иретеп, көнөнә 120–150 грамм эсергә. Дауалау курсы – 1,5–2 ай.

**Түбән әселекле гастрит ауырыуында** балды һалҡын һыуҙа иретеп ашар алдынан ғына эсергә кәрәк. Уны көнөнә 120–150-шәр грамдан арттыра барып эсергә. Дауалау курсы – 1,5–2 ай.

**Ашҡаҙан шеше (язва)** менән ауырығанда балды аҙыҡ ҡабул иткәнгә тиклем 1,5 сәғәт алдан йәки ашағас 3 сәғәттән һуң эсергә кәрәк. Балды иртәнге һәм төшкө ашҡа тиклем 1,5–2 сәғәт алдан һәм төшкө аштан һуң 3 сәғәт үткәс ҡулланыу яҡшыраҡ.

Балды йылы һыу менән ҡатнаштырып эсеү зарур, был иһә ашҡаҙан мускулатураһының тонусын кәметеүгә һәм ҡатнашманың яҡшыраҡ һеңеүенә булышлыҡ итә.

**Бөйөрҙә таш булғанда,** 20 грамм ҡыҙыл көртмәле япраҡтарын баллы (бер аш ҡалағы дәүмәлендә) бер стакан һыуҙа төнәтеп, берәр стаканлап көнөнә 3 тапҡыр эсәләр.

**Йөрәк эшмәкәрлеге насарайғанда, бөйөр ауырыуҙарында** бер аш ҡалағы кипкән гөлйемеште (100 грамм яңы бешкән

емештәрҙе) 1 стакан ҡайнар һыу менән бешерергә. 10 минут самаһы ҡайнатҡандан һуң, 12–24 сәғәткә һыуытырға ҡуйырға, һөҙөргә, емештәрҙе һығып айырып алырға, һарҡындыға бер аш ҡалағы бал һалырға һәм болғатырға. Яртышар стаканлап көнөнә 2–3 тапҡыр эсергә. Эсемлекте бер нисә тәүлек файҙаланырға мөмкин. Балаларға ла, өлкәндәргә лә файҙалы.

*Р. Ноғоманов менән Ә. Ишемғоловтоң*
*«Умартасылыҡ серҙәре» китабынан*
*алынды. Өфө, Китап, 1997.*

*Учебное издание*

**ЗАЙНУЛЛИНА Гаухар Динмухаметовна**

**РУССКО-БАШКИРСКИЙ,
БАШКИРСКО-РУССКИЙ СЛОВАРЬ
ПО ПЧЕЛОВОДСТВУ**

*Редакция мөдире С. Ғ. Мөхтәруллина*
*Мөхәррирҙәре Г. Ә. Ҡусҡарбаева, Э. Р. Хәйретдинова*
*Рәссамы һәм биҙәлеш мөхәррире Ф. Ф. Ислахов*
*Техник мөхәррире В. Абдрахманова*
*Корректорҙары Н. М. Мәхмүтова, В. С. Усманова*
*Компьютерҙа эшкәртеүселәр А. Х. Рәхимова,*
*В. Абдрахманова, Ю. М. Әбсәләмов*

Лиц. изд-ва № 0168 от 10.04.96. Сдано в набор 10.09.01. Подписано к печати 01.11.01.
Формат бумаги 84х108 $^{1}/_{32}$. Бумага офсет. Гарнитура Newtonl.
Печать офсетная. Условн. печ. л. 8,40. Усл. кр.-отт. 8,82. Учетн. издат. л. 6,20.
Тираж 3000 экз. Заказ № 616.

Башкирское издательство «Китап». 450001, Уфа, ул. Левченко, 4а.
Отпечатано с готовых диапозитивов
на Уфимском полиграфкомбинате. 450001, Уфа. пр. Октября,2.

*Для заметок*



Зәйнуллина Гәүһәр Динмөхәмәт ҡыҙы 1935 йылдың 16 авгусында Силәбе өлкәһенең Арғаяш районы Мәтәл ауылында уҡытыусы ғаиләһендә тыуған. 1950—1954 йылдарҙа Троицк ҡалаһының педагогия училищеһында, 1954—1959 йылдарҙа Башҡорт дәүләт университетында уҡый һәм 1960—1964 йылдарҙа Өфө ҡалаһының 1-се һанлы интернат мәктәбендә уҡытыусы булып эшләй. 1964 йылдан Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтында өлкән ғилми хеҙмәткәр вазифаһында ике томлыҡ «Башҡорт теле һүҙлеге»н төҙөүҙә ҡатнаша. 1988 йылда «Башҡорт лингвистика терминологияһының формалашыу тарихынан» тигән темаға диссертацияны уңышлы яҡлап, филология фәндәре кандидаты дәрәжәһен ала. Артабан Гәүһәр Динмөхәмәт ҡыҙы үҙенең ғилми эшмәкәрлеген башҡорт теленең лексикографияһы менән терминологияһына бағышлай. Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты телселәре менән берлектә «Башҡортса-русса һүҙлек» (1996), «Русса-башҡортса һүҙлек» (2001) төҙөүҙә ҡатнаша. Ул илленән ашыу хеҙмәт авторы, «Русско-башкирский лингвистический словарь» (1991), «Төрөксә-башҡортса һүҙлек» (1997) шулар

...ина «Башҡортостан Республикаһының ... эниәт хеҙмәткәре» тигән маҡтаулы ...ады.